ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

21-27 март (буранай) 2020

№ 12 (898)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Һаңраумын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән тауыштарҙы ишетмәйем;*
*телһеҙмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән һүҙҙәрҙе һөйләмәйем;*
*һуҡырмын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән нәмәләрҙе күрмәйем;*
*зәғифмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән ерҙәргә йөрөмәйем...*
*(Көнсығыш аҡылы).*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ғәҙәттән тыш,**

әммә күҙәтеү аҫтында



4

**Өфөлә - Шайморатов һәйкәле**



5

**Шакиров ниңә асыуланды?**



8-9

**Ҙур йылғалар шишмәнән башлана**



11

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан шифаханаларында дауаланыу, ял итеү кемгә тәтей?

***Фәтхулла ИМАНҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Башҡортостаныбыҙ - ожмахҡа тиң йәннәт иле. Бай тәбиғәте, файҙалы ҡаҙылдыҡтары менән генә түгел, ә йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт шифалы сығанаҡтары менән дә. Шуға ла ситтән бик күп халыҡ ағыла беҙҙең республика шифаханаларында сәләмәтлектәрен нығытып ҡайтыр өсөн. Һәм, ысынлап та, шифалы быу һәм батҡаҡтарҙан тәндәре яҙылып, ҡатҡан быуындары йомшарып, имгәкләп килгәне - атлап, атлап килгәне йүгереп, тере һыуҙарыбыҙҙы тәмләп, бөтөнөһөҙ көс һәм энергия туплап, ҡәнәғәт күңел менән үҙ илдәре тарафтарына ҡайтып китәләр. Был бик һәйбәт, ләкин бер үкенесе шул: шифалы еребеҙҙең терелткес сихәттәре ошо төбәктә тыуып-үҫеп, ошонда көс түккән-көн иткән халҡыбыҙға ғына тәтемәй һис. Республикалағы уртаса эш хаҡына ла, пенсия аҡсаһына ла үҙ шифаханаларыбыҙға путевка һатып алыу мөмкин түгел. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә улар "элиталы" учреждениеларға әүерелеп, нигеҙҙә кеҫәһе ҡалын ситтән килгәндәрҙе генә хеҙмәтләндерә. Дөрөҫ, һаулығын ҡәҙерләй белгән кеше хаҡына ҡарамай, ашамай-эсмәй тигәндәй өҙөп-йолҡоп путевкалыҡ, исмаһам, аҙна-ун көнгә булһа ла барып ҡайтырлыҡ аҡса туплай алалыр ҙа, бәлки, ләкин күпселек өсөн Башҡортостан шифаханалары - буй еткеһеҙ хыял ғына булып ҡала. Әммә ошо көндәрҙә ыңғай хәбәр килеп ишетелде: республикабыҙ етәкселеге, ниһайәт, ошо өлкәлә ғәҙелһеҙлеккә сик ҡуйырға ҡарар иткән. БР Хөкүмәтенең сираттағы аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә республика халҡына үҙебеҙҙең курорттарҙа ял итеү мөмкинлеге биреү мәсьәләһе ҡаралды һәм уның менән шөғөлләнәсәк эшсе төркөмгә проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләргә ҡушылды, тип хәбәр ителде республика киң мәғлүмәт сараларында. Был ҡыуаныслы хәбәрҙең яҡын араларҙа бойомға ашырылыуына ҙур өмөттәр бағлайбыҙ.

***Дим ӘХМӘҘИЕВ, хеҙмәт ветераны, Нефтекама ҡалаһы:*** 20 йыл буйы асыҡ һауа шарттарында (нефтянкала, аҙаҡ - төҙөлөштә) эшләп, быуын сиренә дусар булынғас, шифаханаларға күп йөрөргә тура килә ине: Евпатория ла, Ҡырым да ҡалманы, ләкин иң килешкәне үҙебеҙҙең Янғантау быуы менән Яҡтыгүл батҡағы булды. Ҡайта-ҡайта рәттән барып дауаланырға тура килде ваҡытында, уның ҡарауы, әйткәндәй булмаһын, хәҙер быуын ауырыуының ни икәне лә онотолдо. Шуға күрә, сир килтереп тәрәһә, путевка ҡиммәт тип торop булмай инде, кәрәк икән - үҙ йүнендә күрергә тырышаһың. Ә шулай ҙа үҙебеҙҙең республика халҡы өсөн хаҡтарҙы бер аҙ "ауыҙлыҡлап" алыу бер ҙә ҡамасауламаҫ ине, сөнки шифаханаға мотлаҡ барып дауаланыу кәрәк булһа ла, путевкаларҙың ҡиммәтлеге арҡаһында күптәр унда, ҡыҙғаныста күрә, бара алмайҙар. Киреһенсә, ҡайһы берәүҙәр арзанлығына ҡыҙығып, республиканан ситкә сығып китергә мәжбүр һәм улар Төркиә, Азия яҡтарында, Ҡара диңгеҙ буйҙарында ял итеп ҡайтыуҙы хуп күрә. Уйлап ҡараһаң, күпме аҡса ситкә китә. Ярай ҙа, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был өлкәләге етешһеҙлекте лә күреп ҡалды. Тик был мәсьәләне хәл итеүҙең ниндәй юлдарын табырҙар һәм ул ысынлап та халыҡҡа берәй еңеллек килтерерме - әйтә алмайым, уныһын киләсәк күрһәтер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ЮҒАРЫ БАҪҠЫСҠА КҮТӘРЕР БӘЙГЕ

**Ниһайәт, Башҡортостандағы иң масштаблы ярыштарға "Торатау" Конгресс-холл бинаһында тантаналы рәүештә йомғаҡ яһалды. Әйткәндәй, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы 30-сы тапҡыр, ә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы 25-се тапҡыр үткәрелә. "Йәш уҡытыусы" бәйгеһе һөнәри конкурстар араһында иң "йәше" - ойошторолоуына 5 йыл.**



Бына ошондай күптән билдәле, абруйлы ярыштарҙа быйыл йәмғеһе 208 уҡытыусы ҡатнашҡан, шуларҙың 54-е башҡорт теле уҡытыусылары, 30-ы рус теле, 16-һы татар теле уҡытыусылары, ә бына йәш уҡытыусылар - 37. Ғәҙәттәгесә, һәр конкурс сиктәрендә бишәр лауреат һайланды һәм индәр араһында иң-иңе - абсолют еңеүсе билдәләнде. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында иң юғары баһаға Ҡыйғы районының Үрге Ҡыйғы лицейы уҡытыусыһы Нәзилә Низамова (**һүрәттә**) лайыҡ булды. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы конкурсында икенсе тапҡыр һөнәри оҫталығымды һынайым, - тине ул. - Тәүге тапҡыр 2003 йылда ҡатнашҡайным, ул ваҡытта беҙ асыҡ дәрес күрһәтеп китә инек, аҙаҡ асыу һәм ябыу тантаналарына ғына килдек. Хәҙер иһә, һынауҙарҙың һаны, педагогтарға ҡуйылған талаптар артҡан һәм был бик яҡшы күренеш. Быйыл тәүге тапҡыр һөнәри конкурсыбыҙҙа милли кейемде презентациялау һынауын индереүҙәре айырыуса күңелгә ятты, иң ҡанатландырғаны шул булды. Мин үҙебеҙҙең төньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҡатын-ҡыҙҙары кейемен тергеҙҙем. Был эштә ағинәйҙәр, коллегаларым оло ярҙам күрһәтте. Үҙемә генә тип алъяпҡыс тегеп, уны төбәгебеҙгә хас нағыш өлгөләрен өйрәнеп ҡайынылар хатта. Конкурстың был һынауын туған телебеҙ менән бер ҡатарҙан рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлауға этәргес, тип ҡабул иттем..."

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

12+

***✓ Бөгөн был шифаханаларҙың файҙаһына күберәк ситтән килгәндәр кинәнә, ә үҙебеҙҙең халыҡ әллә ни курорттарға йөрөй һалып бармай шул: әллә путевка хаҡы уларҙы өркөтә, әллә өйҙән, ауылдан сығып өйрәнмәгәндәр.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Башҡортостан шифаханаларында дауаланыуҙ, ял итеү кемгә тәтей?

(Башы 1-се биттә).

***Фаил БАЙНАЗАРОВ, Яҡтыгүл шифаханаһы директоры:*** Беҙҙең һауыҡтырыу-дауалау учреждениеһы үҙенең шифалы батҡағы, саф һауаһы, гүзәл тәбиғәте менән элек-электән республиканан ситтә лә киң билдәле. Дауаланыуға ҡарағанда сирҙе алдан иҫкәртеү яҡшыраҡ, тип бик дөрөҫ әйтәләр. Был хәҡиҡәтте хәҙер халыҡ бик яҡшы аңланы һәм дауахана урынына күптәр тәбиғи һауыҡтырыу саралары өҫтөнөрәк күрә башланы. Был ҡайһы бер ял итеүселәрҙең хаҡына ҡарап тормайынса даими рәүештә шифахана юлында булыуынан да күренә. Хаҡтар тигәндән, Башҡортостан буйынса шифаханаларҙа улар төрлөсәрәк, әлбиттә: ҡайҙа ҡиммәтерәк, ҡайҙа уртаса тип әйтергә була. Һәр хәлдә, беҙҙең Яҡтыгүлгә путевкалар хаҡы урта хәлләләрҙең кеҫәһенән килерлек кимәлдә тип уйлайым. Хаҡтар бит, әйткәндәй, төрлө категориялар буйынса тәҡдим ителә: "Эконом" категорияһы буйынса, мәҫәлән, путевкаларҙы тәүлегенә 1300-ҙән 2100-гә тиклем хаҡ менән һатып алырға булһа, "Стандарт" буйынса улар 2300-ҙән алып, ә "Стандарт Плюс" 2700 һумдан алып тәҡдим итә. Пенсионерҙарға ташлама менән файҙаланыу хоҡуғы бирелә. Бынан тыш, һәр төрлө акциялар, ташламалар иғлан ителә. Миҙгелгә ҡарап та хаҡтар динамикаһы үҙгәреп тора. Нисек кенә булғанда ла, беҙ хаҡтарҙы ял итергә, дауаланырға теләгән кешегә яраҡлаштырырға, уларҙың теләктәрен, ихтыяждарын мөмкин тиклем иҫәпкә алырға тырышабыҙ. Сөнки беҙ улар өсөн эшләйбеҙ бит. Бөгөнгө көн талаптарынан сығып та эшләнә был: беҙҙең алға дауалау-һауыҡтырыу учреждениелары эшен социаль йүнәлешкә ярашлы реформалау бурысы ҡуйыла. Дөрөҫ, беҙҙең эш стиле ошоға тиклем дә фәҡәт социаль йүнәлештә алып барыла килде. Аҙ тәьмин ителгән категория халҡына ла хаҡтарҙы яраҡлаштырырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, берәй ауыл йә ҡаланан 10 кешелек төркөм тупланып килгән осраҡта улар юл хаҡын түләүҙән азат ителә: уларҙы автобус барып алып килә һәм аҙаҡ йәшәгән урындарына илтеп ҡуя. Ә кемдер 13 көн ял итә икән, 1 көн уға бушлай бирелә.

Шифахананан алыҫ түгел беҙҙең филиал - "Березка" тип аталған ял йорто бар, ул эконом-класс йүнәлешендә эшләй һәм аҙ тәьмин ителгәндәр өсөн булдырылған. Бында йәшәү, дауаланыу, тукланыуға хаҡтар байтаҡҡа түбән: бүлмәләренә ҡарап, 1600 һумдан тәғәйенләнгән. Унда йәшәүселәр дауаланыу процедураларын төп корпуска килеп ала, ике арала 15 минут һайын автобус йөрөп тора. Һүҙ ыңғайында гәзит уҡыусыларҙы Яҡтыгүл шифаханаһы үҙенсәлектәре менән дә таныштырып китеү кәрәктер, тип уйлайым. Көньяҡ Урал тауҙары һыртында Әбйәлил районы биләмәһендәге Яҡтыгүл (Банное) күле ярында иҫ киткес матур тәбиғәтле урынды тәйәк итә беҙҙең шифахана. Күлдең оҙонлоғо - 4,1 км, киңлеге 1,8 км, ә тәрәнлеге - 28 метр, йәғни был Башҡортостандағы иң тәрән күл иҫәпләнә. Уның төбөнән табылған батҡаҡтың шифалы үҙенсәлектәре буйынса тиңе юҡ. Шифахананың 12 бассейнынан йылына 400 кубометрға яҡын ҡиммәтле сифатлы батҡаҡ сығарыла. Ул һөйәк-мускул туҡымаһы, быуындар һыҙланыуынан, ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙ түлһеҙлегенән, нервылар системаһы, урология, гинекология буйынса , шулай уҡ псориаз, экзема кеүек тире ауырыуҙарынан бик файҙалы. Бынан тыш, яр буйы микроклиматы, тау һәм урман һауаһы ла файҙаға ғына буласаҡ.

***Венера ҺИҘИӘТОВА, хаҡлы ялдағы табип, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Бөгөнгө көндә был бәхет, мөғайын, аҡсалы кешеләргә генә тәтей торғандыр, сөнки һаулыҡты нығытыу, ял итеп, көс туплап ҡайтыу өсөн Башҡортостанда йәшәүсе уртаса килемле ябай халыҡҡа үҙебеҙҙең республика шифаханаларына юл ябыҡ. Путевкаларға хаҡтар шул тиклем "тешләшә", күп кеше хәҙер ял итеү мәсьәләһенә ҡул һелтәп кенә ҡуя. Ә бит элегерәк Яҡтыгүл тиһеңме, Янғантау йә Йомаҭауға булһынмы - уйлап та тормай барып ҡайта инек, хатта ғаилә менән ял итеү ҙә әллә ни күп сығым талап итмәне, сөнки путевкалар ябай эшсән кеҫәһенә һуҡманы; икенсенән, эшләгән хеҙмәт коллективы, уның профсоюз комитеты ла ярҙам итеп торҙо. Ул замандарҙан һуң да әле, республиканың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов етәкселек иткән йылдарҙа ла ял итеү әллә ни ҡиммәткә төшмәй ине. Һуңғы бер-ике тиҫтә йылда үҙ халҡыбыҙға республикабыҙҙың шифалы тәбиғи сығанаҡтары татлы хыял ғына булып ҡалды. Хеҙмәт ветераны, инвалид булараҡ, йәшәгән урыным буйынса халыҡты социаль яҡлау бүлегендә шифаханаға путевка алырға йылдар буйы сиратта торғанлыҡтан, ҡайта-ҡайта барып белешеп йөрөргә тура килә ине, ләкин унда ултырған ҡырыҫ ханымдар ҡулынан бер ваҡытта ла льготалы путевка алырға насип булманы. "Юҡ, сиратығыҙ етмәне әле" йәки "Путевкалар етешмәй" һәм башҡа шундай кире ҡағыуҙарҙан ялыҡҡас, үҙ иҫәбемә барып ҡайтырға тура килә ине. Пенсия аҡсаһына, билдәле, ял итеп тә, дауаланып та булмай, ләкин шифаханаларҙа ятып һаулығымды нығытайым, тиһән, ауыҙыңдан өҙөп,тинләп булһа ла йыйһаң инде. Шуныһы, дәүләттән ташламалы юлламаға өмөт итергә лә ярамай.

Мин үҙем электән ил гиҙергә, ял итергә яраттым. Ҡайҙарҙа ғына булманым эшләгән саҡтарымда: Греция, Италия, Төркиә, үҙебеҙҙең Ҡырым, Ҡара диңгеҙ буйҙары... Һәм, әлбиттә, Башҡортостаныбыҙ шифаханалары. Шуларҙың бөтәһен бер-береһе менән сағыштырып ҡараһаң, күңелгә иң йылыһы, иң шифалыһы, иң матуры, әлбиттә, үҙебеҙҙең республикалағы ял һәм һауыҡтырыу учреждениелары. Яҡтыгүл, Танып, Янғантау, Ҡарағай, Красноусол шифаханалары кеүек тәнгә сихәт, йәнгә рәхәтлек биргән ҡайҙа тағы ниндәй ожмах босмағындай урындар бар? Шуныһы бик йәл: бөгөн был шифаханаларҙың файҙаһына күберәк ситтән килгәндәр кинәнә, ә үҙебеҙҙең халыҡ әллә ни курорттарға йөрөй һалып бармай шул: әллә путевка хаҡы уларҙы өркөтә, әллә өйҙән, ауылдан сығып өйрәнмәгәндәр. Ауырыһалар ҙа түҙеп йөрөй бирәләр йә дарыуға тотоналар. Шифалы үләндәр, башҡа төр халыҡ дауалау саралары менән аяҡҡа баҫып киткәндәр ҙә бар, әлбиттә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, сирҙе аҙҙырмай, ваҡытында дауаланырға, бының өсөн аҙна-ун көнгә булһа ла путевка алып, үҙебеҙҙең шифаханаларға барып ҡайтыу сараһын табырға кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

АФАРИН!

# ЮҒАРЫ БАҪҠЫСҠА КҮТӘРЕР БӘЙГЕ



(Башы 1-се биттә).

Рус теле уҡытыусылары араһында Өфө ҡалаһының 56-сы мәктәбе уҡытыусыһы Дамир Шәмсетдинов, татар теле уҡытыусылары араһында Нефтекама ҡалаһының "Белем үҙәге" 10-сы мәктәбе уҡытыусыһы Ғәлиә Ҡорбанова, йәш педагогтарҙан Өфө ҡалаһының 86-сы гимназияһы математика уҡытыусыһы Мария Шершова абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булды. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ булдырған "Йөрәгемде балаларға бирәм" В. Сухомлинский исемендәге миҙал Благовещен ҡалаһының 5-се мәктәбе башланғыс синыфтары уҡытыусыһы Светлана Кокряцкаяға, Инвалид балаларға дистанцион белем биреү республика үҙәгенең өҫтәлмә белем биреү педагогы Айһылыу Сирбаеваға тапшырылды. Ә педагогтарҙың Рәсәй кимәлендәге бәйгеһендә Башҡортостан намыҫын яҡлау хоҡуғын Өфө ҡалаһының 95-се лицейы биология һәм химия уҡытыусыһы Федан Ғафаров яуланы. "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсында тәүге тапҡыр ҡатнашам. Конкурс һәр кем өсөн үҙенсә әһәмиәтле, сөнки ҡатнашыусылар бында баһалап бөткөһөҙ тәжрибә туплай. Бынан тыш, республика ярышына йыйылған иң яҡшы педагогтар менән артабан да хеҙмәттәшлекте дауам итеү мөмкинлеге артабанғы һөнәри үҫешкә яңы ишектәр аса", - ти Федан Фаяс улы. Ул 9 йыл балаларға белем бирә һәм конкурс барышында коллегаларына проект эшмәкәрлегенә ҡағылышлы оҫталыҡ дәресе күрһәткән.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы лауреаттарының береһе, Дәүләкән районы лицей-интернаты уҡытыусыһы Гөлшат Әхмәтова менән дә тәжрибә уртаҡлашыу тураһында әңгәмәләштек. "2013 йылда республика кимәлендәге конкурста ҡатнашып, финалға үткән 12 кеше араһында "Иң яҡшы дәрес" номинацияһына өлгәшкәйнем. Быйылғы конкурс уҡытыусылар бер урында ғына тапанып тормауын күрһәтте, ете йыл эсендә улар яңы инновацион технологияларҙы яҡшы үҙләштергән. Ул ваҡытта компьютер төймәһенә ҡурҡып ҡына баҫып торһаҡ, бөгөн сәмләнеп бөтә мөмкинлектәрҙе ҡулланалар, хатта жюри ағзаларына еңеүсе һайлауы ла ауыр булғандыр. Мин оҫталыҡ дәресемдә "Компьютер технологияларын ҡулланып, дәрестә балаларҙың телгә һәм әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныуын арттырыу" темаһына бағышланым

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына үҙгәрештәрҙе хуплау мәсьәләһе буйынса дөйөм Рәсәй тауыш биреүен тәғәйенләү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Ул Владимир Лениндың тыуған көнөндә - 22 апрелдә уҙғарыла. Был дата шаршамбыға тура килгәнлектән, тауыш биреү көнө ял тип иҫәпләнә.

✓Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "АгроКомплекс" күргәҙмәһен асты. Уға илдең 30 төбәгенән 350-нән ашыу компания килде. Күргәҙмәнең яңы йүнәлештәренең береһе - урындағы фермерҙарҙың һәм ауыл хужалығы кооперативтарының, шулай уҡ республика агрокомпанияларының тауарҙарын берләштергән "Фермер продукттары йәрминкәһе".

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Айыҡ ауыл" конкурсына йомғаҡ яһаны. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһында ҡатнашып, республика Башлығы Радий Хәбиров был сараның бик мөһим булыуын һәм приз фондының ун тапҡырға арттырыласағын билдәләне. Бәйгенең еңеүсеһе итеп Ейәнсура районының Башҡорт Үргене ауылы танылды. Икенсе урынға - Баймаҡ районы Йылым ауылы, өсөнсө урынға Аҫҡын районы Ҡарткисәк ауылы сыҡты.

✓Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, вазифаһын ҡалдырҙы. Бөгөндән ул Йылайыр районы башлығы вазифаһын башҡара.

✓Башҡортостандың 2020 йылға бюджетында Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы уңайынан бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр өсөн 187 миллион һум йүнәлтеү планлаштырыла. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандарға, ветерандарға, инвалидтарға, шулай уҡ элекке концлагерь тотҡондарына - 25 мең һум, тыл эшсәндәренә һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандарҙың тол ҡатындарына бер тапҡыр 5 мең һум түләнергә тейеш.

✓Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына ҙур саралар ойошторола, улар араһында республикала тәүгә тормошҡа ашырылған акциялар бик күп. Мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандар һәм инвалидтар өсөн "шәхси ярҙамсы" социаль хеҙмәте. Мохтаж ветерандар аҙнаһына 16-нан 28 сәғәткә тиклем ошондай ярҙам алырға хоҡуҡлы. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда шундай ярҙамға мохтаж 69 ветеран йәшәй.

***✓ Иң аяныслыһы - иғтибар кире күренештәргә: аварияларға, күпме кеше һәләк булыуға, кем-кемде туҡмауға һ.б. йүнәлтелә. Йәғни киң мәғлүмәт сараларының рейтингын күтәреү кешенең ябай хайуани булмышына йүнәлтелгән.***

УЙЛЫҒА - УЙ

# БЕҘ КЕМ?

## Ижадсылармы, әллә ҡыйратыусылармы?



**Киң мәғлүмәт саралары ысын мәғәнәһендә дүртенсе власть йәки властың идара итеү ҡоралы булып тора. Шулай ҙа… Улар йәмғиәткә нисек йоғонто яһай һәм уны ниндәй йүнәлештә үҫтерә? Әйҙәгеҙ, шуны аңларға тырышып ҡарайыҡ.**

Беҙ барыбыҙ ҙа - коллегалар, медиакиңлектә оҙаҡ йылдар эшләйбеҙ. Төрлө мәғлүмәт менән нисек эшләргә, уларҙы ҡабул итеү йәһәтенән нисек яҙырға, ниндәй сюжеттар төшөрөргә икәнен беләбеҙ. Әммә, әйҙәгеҙ, халыҡҡа ниндәй сифаттағы мәғлүмәт бирелә һәм ул йәмғиәткә нисек йоғонто яһай икәнен ҡарайыҡ. Беҙ хатта киң мәғлүмәт саралары аша тапшырылған мәғлүмәттең туранан-тура тормошобоҙға йоғонто яһауы йәки йәмғиәттә теге йәки был процестарҙы тыуҙырыусы механизм булып тороуы тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ. Ләкин уның принцибы шундай: мәғлүмәт тормошобоҙға йоғонто яһай, юҡһа, ул нисек идара итеү ҡоралы була ала?

Мәҫәлән, күптәр киң мәғлүмәт сараларының рейтингын үҫтерергә, сайттарға инеүселәр, гәзиттәргә яҙылыусылар һанын, тиражды арттырырға тырыша. Әгәр беҙ ижади тырышлыҡ, актуаль программалар, мәҡәләләр менән кешенең иғтибарын йәлеп итә һәм уны ылыҡтыра алһаҡ, бик яҡшы. Тик бөгөн аналитик мәҡәләләр булмауын, йәмғиәттең төптә ятҡан проблемаларын эҙләмәйенсә, уларҙың төп сәбәбе бөтөнләй асылмағанын күрәбеҙ. Хәҙерге заманда киң мәғлүмәт саралары факттар ҡоралы ғына булып тора: ул нимә була, нимә булған - шул хаҡта ғына яҙа. Иң аяныслыһы - иғтибар кире күренештәргә: аварияларға, күпме кеше һәләк булыуға, кем-кемде туҡмауға, күпме урлауға һ.б. йүнәлтелә. Йәғни киң мәғлүмәт сараларының рейтингын күтәреү кешенең ябай хайуани булмышына йүнәлтелгән.

Был нимә тураһында һөйләй? Йә йәмғиәт деградациялана башлаған, хайуан кимәленә төшкән һәм уға йоҡо, ашау, енси бәйләнеш, оборона (агрессия) ғына кәрәк, йә киң мәғлүмәт саралары юғары йөкмәткеле темалар күтәрмәйенсә, үҙе йәмғиәтте шундай примитив үҫеш юлына ҡыуып индерә.

Әйҙәгеҙ, коллегалар, эшмәкәрлегебеҙгә йәмғиәт менән идара итеү күҙлегенән ҡарайыҡ. Кеше ишеткәнен, күргәнен, уҡығанын үҙенең эске ҡарашы менән ҡабул итә, уйында образдар тыуҙыра. Әммә ҡабул итеү процесы образдар тыуҙырыу менән генә сикләнмәй. Шулай уҡ кешенең хис-тойғолары ла бар. Нимә ул хис-тойғо һәм ул беҙҙең тормошобоҙға нисек тәьҫир итә?

Кешенең хис-тойғоһо - билдәле бер күңел торошонда аңы эшләп сығарған нескә энергия. Эмоцияларҙың энергия булыуын ғалимдар, атап әйткәндә, совет физиотерапевтары - ирле-ҡатынлы Кирлиандар раҫлай. Улар газ разрядлы фотография ҡорамалы эшләй. Бындай фотоаппарат менән кешенең энергетик ҡырын һәм энергияһын фотоға төшөрөргә мөмкин. Шулай уҡ кешенең эмоциональ торошон тикшереүсе икенсе ҡорамал булып "ялғанлау детекторы" тора, ул кеше мейеһенең импульстарын яҙҙыра. Тимәк, һәр хис-тойғо - ул бүленгән энергия. Әммә энергияны һаҡлау ҡанунына ярашлы, тәндең энергияһы бер ҡайҙан да алынмай һәм бер ҡайҙа ла китмәй, ул бары тик бер тороштан икенсеһенә генә күсеүе мөмкин. Шулай итеп, кешенең, төркөмдөң, йәмғиәттең һәр хис-тойғоһо киңлектә "эшләй".

Заман психологтары уйҙарҙың матдилашыуын раҫлай. Әммә был процесс нисек тормошҡа ашыуын аңлата алмайҙар. Кешенең һәр уйы, хис-тойғолар менән нығытылып (асыу, ярһыу, үпкәләү, ҡурҡыу, шатлыҡ, мөхәббәт) билдәле бер тирбәлеш тыуҙыра һәм ул киңлектәге тирбәлеш менән берләшеп, кеше тормошондағы ваҡиғаны тартып килтерә. Кешелә ниндәй хис-тойғо өҫтөнлөк итә, уның тормошонда, дөйөм алғанда - йәмғиәттә, шундай процестар тыуа.

Быға киң мәғлүмәт сараһы хеҙмәткәре түгел, ә ябай кеше күҙлегенән ҡарайыҡ. Телевидение, радио, гәзиттәр, интернет-каналдар ниндәй мәғлүмәтте яҡтырта, улар ниндәй сифатта? Яуап ябай - беҙ сенсация эҙләйбеҙ. Ғәҙәттә, улар кире мәғлүмәт. "Тормош шулай ҡоролған", - тип уйлайбыҙ. Хатта, ҙур уңыштарға, ҡаҙаныштарға, именлеккә өлгәшкән кешеләрҙең тормош юлын күрһәткәндә лә уларҙың ошо юлын нисек үтеүен, ниндәй принциптар менән йәшәүен, нимәгә таяныуын, ниндәй хис-тойғо көсөргәнеше аша үтеүҙәрен, ниндәй тырышлыҡ һалыуҙарын, йәки, киреһенсә, барлыҡ "һабаҡтар" өсөн тормошҡа рәхмәтле булыуҙарын асып бирә алмайбыҙ. Беҙҙең тормошобоҙҙо нисек яҡшыртыу, нисек матди байлыҡты тартып килтереү һәм емергес эҙемтәләрһеҙ лайыҡлы эш хаҡы алыу, ни өсөн берәүҙәр - бай, икенселәр - ярлы икәнлеген аңларлыҡ ғилемебеҙ юҡ. Беҙ тәрән анализ яһай белмәйбеҙ һәм сәбәп-эҙемтә бәйләнешен күрмәйбеҙ. Үҙебеҙ үк ошо наҙанлыҡтан ыҙа сигәбеҙ.

Эйе, йәмғиәттең кире мәғлүмәткә һорау тыуҙырыуына һылтанырға мөмкин, беҙ бары тик уның ихтыяжын ғына ҡәнәғәтләндерәбеҙ, йәнәһе. Әммә ул ваҡытта беҙ киң мәғлүмәт сараларына ҡарата йәмғиәт менән идара иткән власть принцибын ҡуллана алмайбыҙ. Беҙ үҙебеҙ, уның ихтыяждарын иҫәпкә алып, йәмғиәттең ихтыярында барабыҙ. Ә был ихтыяж хаҡмы һәм күпселеккә тап киләме? Бында беҙ социологик һорау алыуҙарһыҙ яуап бирә алмайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта кире мәғлүмәткә минең ғаиләмдә, минең балаларымда, минең тормошомда ихтыяж юҡ һәм тормошобоҙҙа ундай ваҡиғалар тыумай ҙа. Әммә бындай сифаттағы мәғлүмәтте таратып, үҙебеҙ, ғаилә ағзалары, яҡындарыбыҙ, туғандарыбыҙ автоматик рәүештә ошо процестарға йәлеп ителәбеҙ, йәғни былар барыһы ла беҙгә үҙгәртелгән рәүештә кире ҡайта.

"Яуызлыҡ ҡылмағыҙ - яуызлыҡ килмәҫ", "Һәр кем ғәмәленә күрә ала" (Тәүрат), "Кешеләр үҙҙәре үҙгәрмәй икән, мин уларҙы шул ваҡытҡа ҡәҙәр үҙгәртә алмайым" (Ҡөрьән), тип изге китаптарҙа юҡҡа яҙылмаған. Ғәмәл (суфыйсылыҡ) һәм карма (Веды, Бхагават Гита), энергияны һаҡлау (Эйнштейн) ҡанундары - нимә сәсһәң, шуны урырһың, ти.

Кеше тауыш, әйтелгән йәки уҡылған һүҙ аша анда образ булып формалашыу аша үҫешә. "Әсәй, мөхәббәт, Тыуған ил, ғаилә, хаҡлыҡ, изгелек, тәбиғәт, атай, Аллаһы Тәғәлә, бәхет, хеҙмәт, мәрхәмәтлек, ярҙам, шәфҡәтлелек, ҡабул итеү, ҡыуаныশыу" - беҙ ошо һүҙҙәр аша үҫешергә тейеш түгелме ни? Улар аңыбыҙҙа образ тыуҙырып, йәмғиәттә, тормошта һәр саҡ матдилашасаҡ. Ә әлегә беҙ "Тормоштан бөтөн нәмәне ал, эгоизм, аҡса, иҡтисад, һуғыштар, мөнәсәбәт асыҡлауҙар, айырылышыуҙар, үлем, ҡурҡыу, енәйәтселек, сводка, уңайлылыҡ, матди прогресс, яңы модель, секс" образдары ғына тыуҙырабыҙ. Киң мәғлүмәт сараларында яңылыҡтар мөхите булдырып, үҙебеҙ ҙә аңламаҫтан, йәмғиәттә шундай процестарҙы арттырабыҙ. Иң хәүефлеһе - улар ғаиләләрҙә сағылыш таба.

Киң мәғлүмәт саралары аша бирелгән мәғлүмәтте йәмғиәт менән идара итеүҙә структураһыҙ идара итеү тип атайҙар. Ул кемделер буйһондороу йәки эшләргә мәжбүр итеүгә мохтаж түгел. Кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, ишеткәнен тормошҡа ашыра башлай.

Яҙғандарымды йомғаҡлап, киң мәғлүмәт саралары йәмәғәтселеген: журналистарҙы, хәбәрселәрҙе, репортерҙарҙы, етәкселәрҙе ошо хаҡта уйланырға саҡырам. "Башҡортостан журналисы"нда лозунг итеп юҡҡа ғына түбәндәге һүҙҙәр алынмаған: "Ысын журналистика - ул тормош үҙе, ә уның сағылышы түгел". Кешелектең яҙмышын сифатлы үҙгәртеү белем аша килә: кешегә йоғонто яһау һәм идара итеү ҡоралдарын өйрәнеп һәм ҡулланып, глобаль кимәлдәге процестарҙы аңлап, ижад ҡанундарын, психологияны, философияны өйрәнеп, ошо белемде үҙенә һәм ғаиләнә ҡулланып ҡына тормошобоҙ менән идара итә, уны сифатлы итеп яҡшы яҡҡа: ҡыйратыуға түгел, ә төҙөүгә үҙгәртә алабыҙ.

**Айбулат УРАЗБАХТИН, "Издательство ЗауралИнформ" яуаплылығы сикләнгән ширҡиәт директоры.**

---

һәм коллегаларыма "Votum" системаһын ҡулланып эшләүем тураһында, эшебеҙҙә файҙалы башҡа программалар хаҡында һөйләнем. Мәҫәлән, бөгөн барыһына ла билдәле: балаларҙың китап уҡырға ҡыҙыҡһыныуы юҡ. Шуға күрә уларҙың уҡыу тиҙлеге бик насар, күптәренең ижади фекерләү кимәле, тасуири һөйләү оҫталығы түбән. Был йәһәттән "Audacity" программаһын ҡулланып, дәрестә балаларҙың тауыштарын яҙҙырып, үҙҙәренә тыңлатам. Улар ҡайһы саҡта, ҡалай дөрөҫ һөйләшмәйем, ауыр уҡыйым икән, тип аптырап та ҡала. Өйгә эш итеп телмәрҙәрен камиллаштырырға, тауыштарын яҙҙырып күнекмәләр эшләргә биреп ҡайтарам. Бына шулай, хәҙерге ваҡытта дәрестәр 40 минутҡа ҡалды тип зарланырға түгел, эшмәкәрлегебеҙҙе яҡшыртырға, әүҙем булырға тейешбеҙ", - тине Гөлшат Йәдкәр ҡыҙы.

Йомғаҡлау тантанаһында уҡытыусыларҙы БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров тәбрикләне һәм был һөнәри конкурстарҙың ябай түгеллеген, улар белем, тәрбиә биреү өлкәһендәге эште юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәреүгә ярҙам итеүен, быны менән йәмғиәтебеҙҙе алға этәрер көс биреүен билдәләп үтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ни сәсһәң, шуны урырһың, тигән халҡыбыҙҙың тапҡыр һүҙе педагогтар эшенә иң яҡшы баһалама бирәлер. Улар илдең киләсәген формалаштырыусы, кешелекле һәм белемле йәмғиәттең нигеҙен тотоп тороусыларҙың береһе. Ә Башҡортостан уҡытыусыларының был йәһәттән күрһәтерлек эше, ғорурланырлыҡ уңыштары ла күп һәм беҙ барыбыҙ ҙа был хаҡта беләбеҙ. Ә үрҙә телгә алынған конкурстар уларҙы йәмғиәткә танытырға, лайыҡлы баһаларға форсат биреүе менән әһәмиәтле.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

---

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандар һәм инвалидтар, ҡамауҙағы Ленинградта йәшәгәндәр, балиғ булмаған концлагерь тотҡондары өсөн популяр такси сервисы бушлай хеҙмәт күрһәтә. Ветерандарға, улар 1345 кеше, айына дүрт тапҡыр республика биләмәһендә такси сервисы хеҙмәттәре менән бушлай файҙаланырға мөмкин, бер тапҡыр йөрөү хаҡы 250 һумдан артмаҫҡа тейеш.

✓Хәтер һәм дан йылында Башҡортостан Республикаһының биш мәктәбенә Советтар Союзы Геройҙарының исемдәре бирелде. Октябрьский ҡалаһының 11-се татар гимназияһына - Шакирйән Ғәтиәтуллиндың, Өфө районы Михайловка ауылы мәктәбенә - Алексей Алымовтың, Яңауыл районы Байғужа ауылы мәктәбенә - Ғәйнанша Хәйҙәршиндың, Өфө районы Чесноковка ауылы мәктәбенә - Александр Горчилиндың, Өфө районы Дорогино ауылы мәктәбенә Александр Пикунов исеме бирелде.

✓Өфөнөң "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" предприятиеһы дөйөм суммаһы 209 миллион һумға өс килешеү төҙөнө. Ҡала бюджетының ошо аҡсаһы Еңеү паркын төҙөкләндереү өсөн йүнәлтелә, ул 2021 йылдың аҙағына тамамлана, тип хәбәр итела дәүләт һатып алыуҙарының рәсми сайтында.

✓16 марттан 22-һенә тиклем Өфөлә "Бурыслы" оператив-иҫкәртеү операцияһы уҙғарыла, уның төп маҡсаты - штраф түләмәүселәрҙе асыҡлау һәм яуаплылыҡҡа тарттырыу. Билдәләнеүенсә, быйыл ғинуар-февралдә Өфө полицейскийҙары 3,2 миллион һумдан ашыу административ штраф түләттерҙе. Ете йөҙҙән күберәк кеше штрафты законда билдәләнгән ваҡытта түләмәгән өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылды. Уларҙың 400-гә яҡыны мировой судья ҡарары буйынса 1-15 тәүлеккә тиклем ҡулға алынды.

✓2020 йылда республика һәм федераль бюджеттарҙан эшҡыуарлыҡҡа ярҙам күрһәтеү өсөн 2,318 миллиард һум бүленде, уны 20,7 мең бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары алыу мөмкинлегенә эйә. Уҙған йылда 8,4 мең эшҡыуар дәүләт ярҙамынан файҙалана алды. Башҡортостан хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты рәйесе Римма Бойцова ошо хаҡта белдерҙе.

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# ҒӘҘӘТТӘН ТЫШ,

## әммә күҙәтеү аҫтында

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров вирус инфекцияһы хәүефен һәм таралыуын кәметеү саралары тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы һәм республикала юғары әҙерлек режимын индерҙе.**



Юғары әҙерлек режимы ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуыу хәүефе янаған осраҡта индерелә. Уның сиктәрендә штаб тәүлек әйләнәһенә эшләй, тирә-яҡ мөхит торошон контролдә тотоу көсәйтелә, республикаға килгән кешеләрҙә киҫкен респиратор вирус инфекцияһы билдәләренең булыу-булмауы тикшерелә, ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуыуын иҫкәртеү буйынса оператив саралар күрелә. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда коронавирус инфекцияһын йоҡтороу осраҡтары юҡ. Әлеге ваҡытта республикала 51 кеше, шул иҫәптән 7 бала, коронавирусҡа шикләнеп, стационарға һалынған. Барыһының да хәле тотороҡло, дауалау Рәсәй һәм сит ил белгестәренең тәҡдимдәренә ярашлы алып барыла. Тикшереүҙәр үткәрелә, күҙәтеү һәм дауалау бокс бүлексәләрендә ғәмәлгә ашырыла.

Хөкүмәттә коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау мәсьәләләре буйынса оператив штаб ултырышы барышында Радий Хәбиров 250-нән ашыу кеше һәм сит ил вәкилдәре ҡатнашҡан мәҙәни, спорт, эшлекле сараларҙы үткәрмәҫкә йәки күсерергә ҡушты. Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова белдереүенсә, әле театрҙар һәр спектаклгә 200-ләп кенә билет һата, Опера һәм балет театры, Башҡорт дәүләт филармонияһы, "Башҡортостан" дәүләт концерт залы онлайн-трансляцияға күсә...

Шулай уҡ республика етәксеһе Мәғариф министрлығына юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарына белем биреү процесын дистанцион режимға күсерергә, уҡыусыларҙың яҙғы каникулын 6 апрелгә тиклем оҙайтырға һәм шулай уҡ педагогик коллективтарҙы дистанцион уҡытыу варианттарына әҙерләргә ҡушты. Республика мәғариф министры Айбулат Хажин белдереүенсә, яҙғы каникулдан һуң Башҡортостандың барлыҡ мәктәптәре дистанцион уҡытыуға күсәсәк. Уҡыусылар ял иткәндә, уҡытыусылар электрон ҡоралдарҙы файҙаланыу буйынса квалификацияны күтәреү курстарын үтергә тейеш. "Ата-әсәләре һәм законлы вәкилдәре баланы өйҙә ҡалдырыу мөмкинлеге булмаған уҡыусылар өсөн мәктәптәрҙә 15 кешенән артмаған махсус төркөмдәр ойошторола", - тине мәғариф министры. Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, уҡыусылар программанан артта ҡалмай, шуға күрә бер кем дә программаны йәйгә оҙайтырға йыйынмай. Республикала балалар баҡсалары карантинға ябылмай. Ләкин ата-әсәләр өсөн сикләүҙәр индерелә: оҙатып килгәндәрҙе мәктәпкәсә белем биреү бинаһына индермәйҙәр, баланы инә торған ерҙә тапшырырға кәрәк. Шулай уҡ һәр сабыйҙың температураһын тикшерәләр. Балалар баҡсаларында көн һайын дезинфекция үткәрәләр. 19 марттан Башҡортостан Мәғариф министрлығының коронавирус инфекцияһы буйынса хәлдә асыҡлау өсөн "ҡыҙыу бәйләнеш"е асылды. Телефон: **+7 (347) 292-11-52.** Ул эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем эшләй.

Өфө ҡала округы хакимиәтендә тәүлек әйләнәһенә коллүҙәк эшләй башланы. Сиргә бәйле һорауҙар менән **8-800-250-56-04** берҙәм телефон номеры менән мөрәжәғәт итергә.

Республикала йәшәүселәргә вирустың таралыуы теркәлгән сит илдәргә һәм Рәсәй төбәктәренә, кеше күп йөрөгән урындарға бармаҫҡа, предприятие-ойошмалар етәкселәренә эш урындарында дезинфекция ойошторорға кәңәш ителде. Сит илдәрҙән ҡайтҡан кешеләрҙе башҡалар менән тығыҙ бәйләнешкә индермәү буйынса шарттар булдырыу, ундай кешеләрҙә аҙ ғына сир билдәләре беленеү менән тиҙ арала коронавирус инфекцияһына тест үткәреү бурысы ҡуйылды. Коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау буйынса республика штабының "ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны: **+7 (347) 286-58-27**. Ҡыҙыу бәйләнешкә республикала йәшәүселәрҙән иң йыш бирелгән һорау - ваҡлап һатыу селтәрҙәрендә һәм аптекаларҙа шәхси һаҡланыу саралары - битлектәрҙең булмауына ялыуҙар. Әлеге ваҡытта битлектәрҙе сит илдән индереү тыйылған, үҙебеҙҙә етештереү буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла һәм тиҙҙән улар дарыуханаларға сығарыласаҡ. Өфөлә "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре дәүләт унитар предприятиеһында ла марлянан күп тапҡыр ҡулланыла торған медицина битлектәрен тегеү башланды. Бында көн һайын 3000 битлек етештерелә. Улар бөгөндән өс данаһы 70 һум менән дәүләт дарыуханаларына һатыуға сығарыла. Ә инде коронавирусҡа нисек һәм ҡайҙа анализ тапшырыу тураһындағы ҡарарҙы табип ҡабул итә. Бындай йүнәлтмә коронавирус менән сирләүсе эргәһендә булған йәки уны тәрбиәләгән кешеләргә, сир таралған төбәктәрҙән ҡайтыусыларға йәки килеүселәргә бирелә.

Шулай уҡ республика Башлығы халыҡ араһында коронавирусҡа бәйле ығы-зығы, юҡбар хәбәр таралыуын, магазиндарҙан аҙыҡ-түлекте күпләп һатып алыуҙарҙы ла тәнҡитләне. Белгестәр әйтеүенсә, Башҡортостанда аҙыҡ-түлек бар һәм тағы ла кәмендә ярты йылға етерлек. Ҡыҫҡаһы, республикала коронавирус инфекцияһының таралыу хәүефе янау сәбәпле бөтә һаҡлыҡ саралары тормошҡа ашырыла. "Өфө" аэропорты бик күп халыҡ-ара рейстарҙы туҡтатты. Республика судтарында граждандарҙан эштәр интернет-ҡабул итеүҙәр аша ғына атҡарыла, һәм башҡалар.

**Һеҙҙең иғтибарға тағы шундай хәбәрҙәр:**

● Хөкүмәт президиумының сираттағы ултырышында Башҡортостан Республикаһы премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров коронавирустың таралыуына бәйле Өфөлә Фольклориаданы уҙғармау йәки күсереү ихтималлығын хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, сараны үткәрмәү йәки күсереү тураһында һорау рәсми рәүештә асыҡ ҡала. Аныҡ ҡарар май айында Мексикалағы ултырышта ҡабул ителә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 18 июлдән 1 августа тиклем республикала VI Бөтә донъя Фольклориадаһы үтергә тейеш.

● Рәсәйҙә коронавирустың таралыуына бәйле Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу этабы күсерелә. Был хаҡта РФ Хөкүмәте вице-премьеры Татьяна Голикова белдерҙе. 2020 йылда Берҙәм дәүләт имтиханы өс этапта үтергә тейеш ине. Беренсе, ваҡытынан алда биреү этабы - 20 марттан 13 апрелгә, төп осор - 25 майҙан 29 июнгә, ә өҫтәмә осор 4 сентябрҙән 22-һенә тиклем тип билдәләнгәйне.

● 17 мартҡа ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостан менән сиктәш өс төбәктә йәшәүселәрҙә коронавирус инфекцияһы табылды. Татарстанда һәм Свердловск өлкәһендә - бер, Пермь крайында - ике. Республиканың көнбайыш сиге янында урынлашҡан Һамар өлкәһендә 5 кеше ауырый. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 17 мартҡа коронавирус йоҡтороуҙың 114 осрағы асыҡланды, шул иҫәптән 21-е - һуңғы тәүлектә. Күпселек осраҡтар Мәскәүгә тура килә (55). Илдә вирустан һәләк булыусылар әлегә юҡ, 5 кеше һауығып сыҡты. Әлеге ваҡытта коронавирус пандемияһы үҙәге Көнбайыш Европаға тура килә. Италияла эпидемиологик хәл бик ҡатмарлы, унда 31,5 мең кеше сирле, ә үлгәндәр һаны - 2,5 меңдән ашыу. Үҙған йылдың декабрь аҙағында коронавирус тарала башлаған Ҡытайҙа һуңғы көндәрҙә зарарланыу осраҡтары теркәлмәй тиерлек.

● Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһынан шундай кәңәш: ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндән һуң ҡулды мотлаҡ йыуырға. Роспотребнадзор хәбәр итеүенсә, Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы ҡулаҡсаны файҙаланырға ярамай тигән ҡәтғи тәҡдим индермәй, ләкин теоретик яҡтан ҡарағанда, ҡулаҡсаның да вирустар йоҡтороу каналы булыуы ихтимал. Вирус ҡағыҙҙа ла, пластикта ла күпмелер ваҡыт әүҙем булып ҡала. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәтенә ярашлы, коронавирус ҡағыҙҙа - өс-дүрт көн, пластик картала туғыҙ көнгә тиклем йәшәй.

**Әйткәндәй, коронавирус тәү ҡарашҡа ябай киҫкен респиратор вирус инфекцияһы (ОРВИ) кеүек билдәләргә эйә: юғары температура, тамаҡ ауырта, танау тона, тән һыҙлай, ҡоро йүтәл барлыҡҡа килә, коньюнктивит күҙәтелә, ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡосторорға, эс китергә мөмкин. Был ауырыу осрағында битлектәргә генә ышанырға ярамай, ә белгестәр кәңәш итеүенсә, ҡулдарҙы йышыраҡ һабынлап йыуырға, бинаны даими елләтергә, танау ҡыуышлығын һабынлы йәки физиологик иретмә менән йыуып торорға, иммунитетты нығытыусы саралар ҡулланырға кәрәк.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Өфө "Еңеү эшелоны-2020" мәғлүмәт биреү һәм пропагандалау акцияһының маршрутына инде. Акцияны 24 апрелдә Иркутск ҡалаһында башлап, 8 майҙа Екатеринбург ҡалаһында тамамларға тәҡдим ителә. Өфөгә эшелон 2020 йылдың 1 майында иртәнге 11-се 10 минутҡа килеп етергә, 5 сәғәт 52 минут торғандан һуң, көндөҙгө сәғәт 5-се 02 минутта ҡуҙғалырға тейеш.

✔Башҡортостан - мәктәп стоматологияһын үҫтереү буйынса алдынғы төбәктәрҙең береһе, тип белдерҙеләр Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Әйтәйек, быйыл республикала 61 мәктәп стоматология кабинетын асыу планлаштырыла. Уларҙың береһе Өфө районы Шамонин ауылы мәктәбендә асылды. Ошо күләмле проекттың "Сәләмәт йылмайыу" модуле 800-ҙән ашыу бала белем алған мәктәптәрҙә стоматология кабинеттарын асыуҙы күҙ уңында тота. Уҡыусылар аҙыраҡ булған мәктәптәр өсөн поликлиникаларҙа теш табиптарында ҡаралыу ойошторола.

✔Башҡортостанда уҙған йылда 2 705 ВИЧ инфекциялы кеше асыҡланған, тип хәбәр итте республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Уларҙың күпселеге - ир-егеттәр (61 проценты), ҡатын-ҡыҙҙар - 39 процент. 2018 йыл менән сағыштырғанда быйыл сир йоҡтороу 2,48 процентҡа кәмегән. Элекке йылдарҙағы кеүек уҡ, зарарланыуҙың төп сәбәбе - енси юл менән йоҡтороу. Уның өлөшөнә 84,8 процент тура килә. Парентераль юл менән зарарланыу өлөшө кәмегән һәм 14,5 процент тәшкил иткән.

✔2020 йылдың йәйендә "ИрАэро" авиакомпанияһы Өфөнән Симферополгә һәм кире йүнәлештә осоштар башҡара башлай. Өфө аэропортынан рейстар шаршамбы көндө башҡарыла, осош ваҡыты - киске сәғәт 8 тула 15 минутта. Симферополдән Өфөгә самолет шаршамбы көндөҙгө сәғәт 2 тула 20 минутта һауаға күтәрелә. Авиакомпания сайтында билеттарға алдан заказ бирергә мөмкин, хаҡы бер кешегә (ике яҡҡа) яҡынса 17 мең һумға төшә.

✔5 июндә "Еңеү" авиакомпанияһы Өфө-Анапа маршруты буйынса даими рейстар башҡара башлай. Осоштар - аҙнаһына ике тапҡыр: дүшәмбе һәм йома көндәрендә. Өфөнән - киске 11 тула 20 минутта, Анапанан - киске 6-сы 20 минутта. Осош 2,5 сәғәт тиерлек дауам итә, тип белдерҙеләр "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәтендә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Йәмәғәт тыңлауҙарында сығыш яһаусыларҙың барыһы ла проекттың ҡала өсөн кәрәклеген, үсеп килеүсе быуында илһөйәрлек тәрбиәләүҙә унда ҡуйыласаҡ һәйкәлдең мөһим роль уйнаясағын билдәләй.*



АФАРИН!

**V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы барышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Совет майҙанына 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыу, территорияны тулыһынса төҙөкләндереү инициативаһы менән сығыш яһағайны. Ошо көндәрҙә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында территорияны реконструкциялау проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үтте. Унда 400-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, шул иҫәптән 35-е сығыш яһаны.**

# ӨФӨЛӘ - ШАЙМОРАТОВ ҺӘЙКӘЛЕ



Проектҡа ярашлы, майҙан уртаһында генерал Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ, уның алдында утлы-музыкалы "ҡоро" (асыҡ бассейны булмаған) фонтан урынлашасаҡ. Проект буйынса ул шулай күҙаллана: майҙан өҫтө ҡатламы, бағаналар тулыһынса алмаштырыласаҡ, ағастар ҡырҡылып, улар урынына йорт фасадтарын ҡапламаған яңылары ултыртыласаҡ. Шулай уҡ 1-се музыка мәктәбе, БДПУ бинаһы янында һәм һәйкәлдең ике яғынан скверҙар булдырыласаҡ. Совет майҙанының йәйәүлеләр зонаһы боллардтар - юлдарҙы автоматик рәүештә ябыу ҡулайламалары менән сикләнәсәк. Төрлө саралар үткәргәндә улар ер менән тигеҙ булып ятасаҡ. Машиналар эргә-тирә кварталдарҙағы майҙандарға күсереләсәк, йәғни улар өсөн шунда парковка буласаҡ. Реконструкцияның беренсе этабын һәм һәйкәл ҡуйыуҙы быйыл тормошҡа ашырыу планлаштырыла. Был маҡсатта төбәк бюджетынан 500 миллион һум аҡса бүленә. Башҡа эштәр икенсе йылға ҡалдырыла.

Йәмәғәт тыңлауҙарында сығыш яһаусыларҙың барыһы ла проекттың ҡала өсөн кәрәклеген, үсеп килеүсе быуында илһөйәрлек тәрбиәләүҙә унда ҡуйыласаҡ һәйкәлдең мөһим роль уйнаясағын билдәләй. Шулай уҡ Өфө ҡала хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идарәһына килгән мөрәжәғәттәрҙең күпселегендә - 232 - проект хуплана, 12-һендә генә ҡаршы фекер белдерелә. Йәмәғәт тыңлауҙарында ҡатнашыусылар ҙа проект өсөн тауыш бирҙе. Ғөмүмән, был хаҡта төрлө даирә вәкилдәре нимә уйлай икән? Әйҙәгеҙ, уларҙың да фекерҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ.

***Өлфәт МОСТАФИН, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы:*** Бөгөн беҙ һәр кеше уңайлылыҡта йәшәһен өсөн шарттар тыуҙырырға тырышабыҙ. Беренсе сиратта, ул таҙа подъездар һәм төҙөкләндерелгән ихаталар, скверҙар, парктар. Был йәһәттән Совет майҙанын реконструкциялау - ошо йүнәлештәге эшмәкәрлектең беренсе булып тора. Шайморатов һәйкәле, фонтан, скверҙар быға тиклем бында үткән киң күләмле сараларға ҡамасауламаясаҡ, уларҙы икенсе урынға күсермәйбеҙ, мәҫәлән, сығарылыш уҡыусыларҙың "Яҙғы бал"ы барыбер ошонда үтәсәк. Халыҡты борсоған парковка мәсьәләһенә килгәндә, хәҙерге мегаполистарҙа күптән күп кимәлле роботлаштырылған паркингтар системаһы ҡулланыла. Беҙгә лә бындай механизмдар индерергә ваҡыт. Цюрупа урамында 500 машина һыйҙырышлы парковка эшләнәсәк.

***Илүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, 112-се Башҡорт кавдивизияһы музейының элекке мөдире:*** Һис шикһеҙ, батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ символы булған Миңлеғәли Шайморатовтың исемен мәңгеләштереү - ул беҙҙең изге бурыс. Баш ҡаланың Совет майҙаны - ул тарихи урын, 1942 йылдың 22 мартында ошо урындан 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары халыҡтан наказ алып фронтҡа оҙатыла. Миңлеғәли Шайморатов БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе Рәхим Ибраһимов ҡулынан Ҡыҙыл Байраҡты ҡабул итеп алып, "ҡаныбыҙҙың һуңғы тамсыһына тиклем көрәшербеҙ, Еңеү менән әйләнеп ҡайтырбыҙ", тигән һүҙҙәрҙе әйтә. Үҙе әйләнеп ҡайта алмаһа ла, уның дивизияһы яу яланында батырлыҡтар күрһәтеп, Башҡортостандың ғына түгел, бөтә Совет Армияһын данға күмә.

Миңә дивизияның хәрби юлы буйлап күп йөрөргә тура килде. Һәр ерҙә уның исемен белмәгән кеше юҡ. Дивизияның беренсе һуғышҡа ингән Липецк өлкәһендәге Тербуны районында, Ростов өлкәһендәге Белая Калитва ҡалаһында, Волгоград өлкәһендәге ҡаты бәрелештәр булған ауылдар аша үтергә тура килде. Башҡорт дивизияһы, уның легендар командиры Шайморатовты белмәгәндәр юҡ унда. Ә Луганск тураһында әйтеп тораһы ла түгел: һәр мәктәп музейында ошо беҙҙең дивизияға арналған экспозициялар бар һәм экскурсияларҙы унда тик балалар алып бара. Шайморатовтың биографияһын яттан беләләр. Миңлеғәли Шайморатов ерләнгән Петровск ҡалаһында Шайморатов майҙаны бар. Бөтөн саралар ошо майҙанда уҙғарыла. Шайморатовтың ҡәбере йыл әйләнәһенә сәскәнән өҙөлмәй. Шулай уҡ унда 2009 йылда Башҡорт атлылары скверын булдырҙыҡ, унда Башҡортостандан алып барып ағастар ултырттыҡ, һәйкәл ҡуйҙыҡ. Мәктәп уның исемен йөрөтә. Унда Шайморатов, дивизия яугирҙары тураһында Башҡортостан балаларына ҡарағанда күберәк беләләр. Республикала хәрби-патриотик темаға күп саралар уҙғарырға тура килә, балалар "Шайморатов-генерал" йырын йырлап йөрөй, уның тураһында һорайһаң, тулы ғына яуап бирә алмайҙар, өҙөк-йыртыҡ ҡына беләләр. Йәш быуынды хәрби патриотик рухта тәрбиәләү, илдең киләсәге имен, халҡыбыҙ тыныс тормошта йәшәһен өсөн тарихты белеү кәрәк. Уны дөрөҫ итеп киләсәк быуынға еткереү зарур. Ҡала уртаһында, ошо Совет майҙанында һәйкәл булдырыу, сквер эшләү - бик изге эш тип уйлайым һәм уны бик хуп күрәм. Киләсәктә төрлө райондарҙан хәрби хеҙмәткә китеүсе егеттәрҙе ошо майҙандан Шайморатов "үҙе" оҙатып ҡалһа - был айырым бер тантана, хәрби бурысҡа, хәрби антына тоғролоҡ сағылышы булыр ине.

***Таңсулпан БИКҠУЖИНА, Мәскәү ҡалаһында йәшәүсе:*** Мин Өфөнө бик ныҡ яратам, шунда тыуҙым, үҫтем, уҡыным, аңлы ғүмеремдең ҙур өлөшөн шунда үткәрҙем. Шуға күрә, ҡалала булған һәр үҙгәреште күңелем аша үткәрәм, улар ҡалаға, унда йәшәгән халыҡҡа зыян итмәҫме, тип борсолам. Ҡаланың үҙәк өлөшөн, уның инфраструктураһын үҙгәртеп ҡора башлаһалар, иң элек ошо уй башҡа килә. Ә инде 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры генерал Шайморатовҡа, ниһайәт, һәйкәл ҡуйыласағы ҡыуандыра. Быны күптән тормошҡа ашырырға кәрәк ине, сөнки бөгөн генералдың иҫтәлеге бары тик уның тыуған Ҡырмыҫҡалы районында ғына мәңгеләштерелгән.

Совет майҙанын рекострукциялау макетын, яңы һәйкәл урынын күрҙем. Бер яҡтан, барыһы ла логик йәһәттән уйланылған һәм бөтә нәмә үҙ урынын буласаҡ - ҡаланың тарихи үҙәге, тирә-яҡта министрлыҡтарҙың матур мөһабәт биналары - совет архитектураһы өлгөләре һәм тарихи 3-сө гимназия... Шулай уҡ фонтан ҡуйыу ҙа планлаштырыла. Һис һүҙһеҙ, проект шәп һәм кәрәкле, әммә, тәү сиратта, ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың уңайлылығы тураһында уйларға кәрәк. Министрлыҡтарға бик йыш башҡа төбәктәрҙән вәкилдәр килә, беҙҙең ҡунаҡсыллыҡ улар күңелендә ҡаланың матур йөҙө менән генә түгел, уңайлылығы менән дә оҙаҡ һаҡланырға тейеш.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Күреү һәләте насарайһа

❖ Күреү һәләтен кәзә һөтө яҡшырта. Һауылған һөттө банкала бер аҙ ҡалдырырға һәм һунынан бармаҡ менән күҙгә һыларға. Һөт күҙ эсенә төшһөн өсөн йомғолап алырға. Тәүҙә ҡулланғанда күҙҙәр томаланыуы бар, ҡурҡырға кәрәкмәй, артабан ул үтер һәм күреү һәләте лә яҡшырыр. Был дауаны көн дә эшләгәндә айырыуса файҙалы.

❖ 3 ҡәнәферҙе ҡәһүә тартҡыста ваҡлап, бер стакан һыу ҡойорға һәм бөтөргәнсе эсергә. Аҙна ярым тирәһе ошолай дауаланыу күреү һәләтен яҡшыртыр.

❖ Кесерткән дә күҙҙәргә бик файҙалы. Уны аш-һыу әҙерләгәндә ҡулланыу отошло. Мәҫәлән, салат эшләргә була: ҡайнар һыуҙа сайып, турарға, йомортҡа һәм бер аҙ лимон һуты ҡушырға. Шулай уҡ ҡуҙғалаҡ урынына ҡулланып аш бешерергә лә була.

### Арпа сыҡһа

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, алоэ япрағының һутын һығып алып, 1:10 нисбәтә менән ҡайнатылған һыу ҡушырға. Ауырыған күҙгә көнөнә бер нисә тапҡыр сылатҡыс эшләргә.

❖ Күҙгә арпа йыш сыҡһа, ҡанды таҙартыу кәрәк. Бының өсөн бер ус аҡтамыр тамырына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Көн дауамында ашау-ашамауға ҡарамай, бер нисәгә бүлеп эсергә. Был дауаны бер ай эшләп эсһәң, күҙгә арпа сығыуҙан туҡтай.

### Конъюнктивит

❖ Конъюнктивит булғанда юл япрағын, гөлйемеш һәм мәрүәр сәскәһен (бузина) 1:2:1 нисбәттә алып бергә ҡушырға. Ике ҡалаҡ әҙерләмәгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә. Стерилле бинт һәм мамыҡ аша һөҙөргә. Төнәтмәне йылы көйөнсә көнөнә 1 тапҡыр ике күҙгә лә өсәр тамсы тамыҙырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләнә.**

ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Музейҙарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың байтаҡ ҡына туй еләндәре һаҡлана. Был кейемде көньяҡ-көнсығышта ғәҙәттә ҡара ашлы туҡымаларҙан (лощеная ткань) теккәндәр һәм яға, салғый, итәк буйҙарын, ең остарын күк һәм һары материал, көмөш һәм алтын уҡа менән ҡаймаланған бер нисә рәт ҡыҙыл, йәшел буҫтау киҫәктәре менән биҙәгәндәр. Туҡыманың төп өлөшөн (салғый һәм итәген) биҙәү өсөн ҡайыу, сәйлән, мәрйен, мәрүәт һиҙәп, төймә, суҡ, ҡырланған ҡыйыҡтар һәм аҡыҡ ҡуйылған нағышлы сулпылар, тәңкәләр ҡулланылған. Ҡайылған орнаментта төрлө төҫтәге ҙур булмаған буҫтау һыҙаттары ҡулланылған (түңәрәктәр, өсмөйөштәр).

Ҡояш һәм йондоҙ биҙәктәр киң таралған. Бөрйән һәм тамъяндарҙа мөнәрҙәр (соляр билдә, йәғни ҡояш һүрәтләнешле биҙәк) өсмөйөш бетеүҙәр ваҡ мәрйендәрҙән ҡоролған. Улар тәңкәләр һәм ювелир айылдар менән сиратлашып килгән. Урал тауҙарының көньяҡ армыттарына таралып ултырған үҫәргән, түңгәүер һәм ҡыпсаҡ ырыуҙары башҡорттарының еләндәрендә сигелгән үҙәктәш түңәрәктәрҙең нурҙары булған (төрлө оҙонлоҡтағы сәнсемле элмәк йөй ҡулланылған). Үҙәгендәге төҫлө туҡыма түңәрәгенә мәрүәт төймә баҫылған. Салғый буйҙарына мәрүәт баҫыу киң таралған.



Мөнөр биҙәк төрҙәре
Мөнөр биҙәк баҫыу техникаһы

Түңгәүер ырыуы башҡорттарында, бигерәк тә Хәйбулла һәм Йылайыр райондарында, байрам еләндәренә мөгөҙгә оҡшаш нағыш һалынған (ҡуш элмә, элмә техникаһында). Башҡортостан Республикаһы Милли музейында салғый остары һәм ең остары ҡайылған ирҙәр еләне һаҡлана (кол. 3454).



Ир-егеттәрҙең байрам кейемендәге нағыш. БР ММ. Т.К. Сурина фотоһы

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ИШАРА

**Гәзитебеҙҙең 3-сө һанында отставкалағы прокурор Зәкирйән Әминевтың "Айыумы? Ул Госстрах инструкцияһын белмәгән бит" тип аталған шаян мәҡәләһен (булған хәл) оло кинәнес менән, көлә-көлә уҡып сыҡтым. Әҙәм балаһы прокурор менән башлыса теге йәки был законды "аша атлап" сыҡҡан осраҡта танышып ала бит инде. Шуға күрә, Зәкирйән ҡорҙаш әйтмешләй, закон вәкилен "бигүк яратып та бармайҙар". Ә әлеге айыу менән бәйле ваҡиғала бер кешегә ярҙам итеп ебәреүе был прокурорҙың киң күңелле булыуына, ғөмүмән, уның кешелеклегенә ишара тип һанайым.**

# ЗАКОН ҺӘМ...

## кешелеклек хаҡында фәлсәфә



Был авторҙың үҙе менән бер мәртәбә генә осрашҡаным булды. Юҡ, прокурор кабинетында түгел, Алла һаҡлаһын! "Киске Өфө" гәзите редакцияһында. Икебеҙ ҙә, төп һөнәребеҙ бөтөнләйгә башҡа булыуына ҡарамаҫтан, отставкаға сығып, яҙыусылыҡ менән булыша башлаған кешеләр булғанғамылыр, һүҙҙәребеҙ беректе. Уның йыш ҡына баҫылып сығып торған яҙмаларын мин дә яратып уҡыйым. Дөрөҫөн әйткәндә, Зәкирйән ҡорҙаштың үҙенең ҡасандыр етди, принципиаль закон вәкиле булғанын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Сөнки мин уны бөгөн ифрат алсаҡ, юморға бай, итәғәтле, ғөмүмән, ябай кеше тип кенә беләм. Әлеге айыуҙан зыян күргән кешегә ярҙам итеүе лә уның һөнәренә генә түгел, ә тап бына ошо изгелекле сифатына ла бәйлелер, тип һанайым. Ә ҡағыҙға яҙылғандар менән генә эш иткән, ғәҙәттә, кеше хәленә бик үк инә һалып бармаған закон кешеһе әлеге осраҡта бер ни ҙә эшләй алмаған булыр ине шәйт. "Ничем не могу вам помочь", тип кенә әйтеүе лә ихтимал. Илебеҙҙәге закондар, әлбиттә, барыһы ла кеше хоҡуғы яҡлы. Әммә уларҙы дөрөҫ итеп ҡулланырға ла кәрәк бит әле. Әҙәм балаһын дауалау маҡсатында етештерелгән дарыуҙарҙы тейешенсә ҡулланмаған хәлдә, кешегә зыян килтереү мөмкинлеге лә бар. Тап ана шуның һымаҡ, закондарҙың үтәлеүен дә тормошҡа ашыра белеү кәрәк. Закон һағында торғандар, әлбиттә, иң тәү сиратта тап бына ошоноң өсөн кәрәшә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кемдер әйтмешләй, тормош - тормош инде ул. Унда ниндәй генә ваҡиғалар булмай. Әлегесә, айыу түгел, хатта закон сығарыусыларҙың да был ҡатмарлы тормошта бәғзе хәлдәрҙең булыу-булмау ихтималлығын күҙаллай алмауы мөмкин...

Әлхәмдүлиллаһ, закон вәкилдәре менән уларҙың кабинеттарында осрашҡаным юҡ. Әммә, хәрби табип булараҡ, бәғзе ваҡыт уларҙың теге йәки был һорауына яуап бирергә тура килә ине. Һүҙбашым булған "кешелеклек"кә ҡағылған бер осраҡты бәйән итмәк булдым әле шунда ла. Был хаҡта элегерәк яҙған мәҡәләләремдең береһендә иҫкә ала биреп тә үткәйнем. Бөгөнгә тиклем хәтерҙә һаҡланған был ваҡиға тураһында тулыраҡ һөйләйем әле. Хәрби госпиталдә подполковник дәрәжәһендә, отоларингология бүлеге мөдире вазифаһын үтәп йөрөгән мәл. Бүлмәмә бер йәш хәрби прокурор килеп инде. Майор званиеһында. Матур итеп, йылмайып һаулыҡ һорашҡандан һуң, һаулығына зарланып, ифрат та әҙәпле итеп үҙенең проблемаһын һөйләп алды. Әммә сире отоларингологияға бөтөнләйгә ҡағылышлы булмаған, медицинаның башҡа өлкәһенән ине. Тейешле табипҡа (дөрөҫөрәге - дермато-венерологка) барып, был ауырыуҙан рәсми дауаланған осраҡта башҡалар, айырыуса ҡатыны белеп ҡалыуҙан шикләнеүе хаҡында ла йәшермәй һөйләне был иптәш. Бына шундай хәлдә табип ни эшләргә тейеш? "Ничем не могу помочь", тип әйтеп сығарғанда ла бер ни ҙә булмаҫ ине, әммә... Кеше хәленә инеү кәрәк, тип таптым. Халыҡ әйтмешләй, "тәртәнән бер аҙ ситкә сығып" булһа ла... Ҡыҫҡаһы, ниндәйҙер бер диагноз (гайморитмы, отитмы, хәтерләмәйем) менән үҙемдең бүлеккә һалып, бөтөнләй башҡа ҡалала аноним консультация биргән дермато-венерологтың тәғәйенләүе буйынса һәр төрлө уколдар яһап, был кешене дауалай башланым. Ысынлап та, мин уны кешеләрсә йәлләнем.

Госпиталгә ятҡандың иртәгәһенә ул әҙәпле генә ишек шаҡып, бүлмәмә килеп инде. Һаулыҡ һорашҡас, шундай уҡ итәғәтле тон менән минә ошондайыраҡ һорау бирҙе: "Доктор, ә һеҙ "врачебная тайна" тигән нәмәгә нисек ҡарайһығыҙ?" "Ыңғай", тинем мин, тик башта уның тел төбөн аңлап етмәнем. "Әгәр минең ысынбарлыҡтағы сирем хаҡында башҡа берәүгә әйтә ҡалһағыҙ, уның өсөн законда тейешенсә статья барлығы хаҡында беләһегеҙме?" - тине пациентым, шулай уҡ әҙәпле генә итеп. "Беләм", - тинем мин дә мөмкин тиклеп тыныс булырға тырышып, әммә күңелдә ошо кешегә ҡарата ихтирам тойғоһо әкренләп (юҡ, тиҙләп!) һүрелә барғанын да һиҙҙем. Минең урында башҡа берәй уҫалыраҡ доктор булһа, әлбиттә, уға икенсерәк итеп яуап бирер ине, тип уйлайым...

Эш быныһы менән генә бөтмәне. Бүлектә унан тыш, әлбиттә, бүтән хәрби хеҙмәткәрҙәр ҙә ята ине. Башлыса - һалдаттар. Уларҙың бәғзеләренә операциялар яһағайным. Әлеге әйткәндәй, гайморит, отиттарҙан дауаланып ятҡандар ҙа бар. Был пациентым да тейешенсә процедуралар алыуын дауам итә. Бер көн ул минең бүлмәмә тағы килеп инде. Ғәҙәтенсә, "вежливо" итеп кенә иҫәнләшкәс, бүлектә дауаланып ятыусы һалдаттарҙың барыһының да танауына рентген тикшереүе яһарға кәңәш итте!.. Нисәмә йыл хеҙмәт итеп, бындай хәл менән бер ҡасан да осрашырға тура килмәгәнгәме, башта албырғап ҡалдым. "Нисек инде?" - тием аптырап. "Эйе, эйе, тап шуны эшләргә!" - ти пациентым. Был юлы мин инде асыуымды йәшерә алманым: "Кемгә рентген-тикшереү кәрәклеген мин үҙем хәл итәм. Кемгә тейеш - уларҙың барыһына ла яһалған да инде!" "Ә мин, закон вәкиле булараҡ, быны талап итәм! Һеҙҙең бүлегегеҙҙә уставтан тыш мөнәсәбәттәр арҡаһында танауҙары һынып, башҡа диагноз менән дауаланып ятыусылар булыуы ихтимал..." - тимәһенме пациентым. Хәрби госпиталдә, шәхсән, мин етәкләгән бүлектә прокурор тикшереүе яһарға ҡарар иткән был эшлекле кеше менән артабан дауайлашып тороуҙы мәғәнәһеҙ тип таптым һәм ризалашырға мәжбүр булдым. Бүлектәге бөтә һалдаттарҙы рентген аша үткәрҙек. Рентгенолог барыһының да ауырыу тарихына "Костной патологии не выявлено" тигән ҡарарын яҙып ҡуйҙы. Дауалау курсы бөткәс, пациентым госпиталдән сығып ҡайтып китте. Рентген-снимоктарҙы ла үҙе менән алды. Күпмелер ваҡыттан округ хәрби госпиталенә "Суд медицинаһы" һөнәре буйынса уҡыуға барған бер хирург ҡулына рентген ҡағыҙҙары тотҡан әлеге пациентыбыҙҙы шунда күреп ҡалғаны тураһында һөйләне. Беҙҙең рентгенологка ышанмай, уларҙы шунда ҡабаттан тикшертеп йөрөгән булған икән...

Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләмдән ниндәй генә илдә йәшәһәң дә, көнкүрештә уның хөкүмәте сығарған ҡарарҙарға буйһоноп йәшәү зарурлығы хаҡында бер хәҙис бар. Шәриғәт ҡанунына ярашлы, илдәге закондарҙы тәнҡитләү ҙә ярамай... Шулай ҙа, уларҙың нисек үтәлеүе хаҡында әленән-әле һөйләшкеләп алыу мотлаҡтыр, тип уйлайым. Ә иң мөһиме - ҡайһы ғына өлкәлә, ниндәй генә вазифа башҡарыуыңа ҡарамаҫтан, башта килтергән мәҡәлә авторы һымаҡ, кешеләргә ҡарата кешелекле булып ҡалыу кәрәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**

**отставкалағы хәрби табип.**

✓ *Ябынчы есаул улы Үҫәргән XVI йәшәгән булып сыға, тимәк, тап ошо ваҡыттан башлап боронғо мөйтәндәр яңы этник атама алып, ошо этноним аҫтында башҡорт ырыуҙары араһында танылыу ала.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН СЫҠҠАН ҮҪӘРГӘНДӘР БЕҘ!




Әлбиттә, ҡаңлыларҙың ата-бабалары кангар исеме аҫтында Туран (Ирандан төньяҡ-көнбайыштараҡ) ареалында киң билдәлелек яулаған ҡәүемдәрҙән була. Улар Хорезм территорияһындағы халыҡтар, шул иҫәптән мөйтәндәр менән дә аралашып йәшәгән, тип фараз ҡылырға була. Хорезмдың Курдар исемле ҡалаһы урта быуаттарға ҡараған күп кенә сығанаҡтарҙа иҫкә алына. Хәҙерге ҡарағалпаҡтарҙың мөйтән ырыуында кердерли аймағы булыуы ла ошо топоним менән бәйлелер, тигән һығымта яһап була.

Ғөмүмән, үҫәргән-мөйтәндәрҙең тарихи тамырҙарын иртә урта быуаттарҙағы Урта Азия ҡәүемдәре хаҡындағы сығанаҡтарҙан башҡа күҙаллауы мөмкин түгел. Әйтергә кәрәк, тап ошо географик киңлектәрҙә йәшәйеш өсөн көрәш алып барған төрлө сығышлы һәм төрлө телдәрҙә аралашҡан этник төркөмдәрҙең исемдәре теркәлеп ҡалған. IX быуаттың икенсе яртыһында ошо уңдырышлы ерҙәргә, икһеҙ-сикһеҙ көтөүлектәргә күп һанлы, һуғышсан уғыҙ ҡәбиләләре дәғүә итә башлай. Уларға дүрт ҡәүемдән - бәшәнәк, баджни, нәүкерҙә һәм башҡорттарҙан хасил булған союз ҡаршы сыға, әммә еңелеүгә дусар булып, көнбайышҡараҡ күсеп китергә мәжбүр була. Әммә ошо халыҡтарҙың байтағы элек йәшәгән ерҙәрен ташлап китмәй, шул уҡ бәшәнәктәр һәм башҡорттарҙың бер өлөшө артабан уғыҙҙарҙың 24 ырыуҙан торған этник берләшмәһенә инеп китә. Кангарҙар, йәғни әл Иҙриси яҙғанса, хангакишиләр бәшәнәк дәүләтендә кангар-оглы - ҡаңлы исемендә билдәле була. XIII быуат космографы, ғәрәп авторы Шәмс-ад-Дин ад-Димашки баджна ҡәбиләһен Дәште Ҡыпсаҡ халыҡтары составында телгә ала. Тик нәүкерҙә исеме менән аталған ҡәбилә артабан тарих аренаһынан юғала: күрәһең, улар үҙҙәренә союздаш, бәлки, ҡәрҙәш булған башҡорттарға ҡушылып, үҙ атамаһын башҡаса ҡулланмай башлай. Әйткәндәй, монголдарҙа нөхөр - ялланған яугир, һуғышсы, ҡалмыҡтарҙа нөкр - дуҫ, иптәш, бурәттәрҙә нухэр - дуҫ, ярҙамсы тигән мәғәнәләрҙә ҡулланыла. Башҡорт телендә лә нәүкәр, нүкер һүҙҙәре яугир тигәнде аңлата, шулай булғас, нәүкерҙә этнонимы ла шул уҡ яугирҙар берләшмәһе исеменән килеп сығыуы мөмкин.

Ошо факттар IX быуат аҙағында Хорезмдан уғыҙҙар тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарылған төрлө сығышлы төрки ҡәүемдәре ҡалдыҡтарының ошо тарихи аренала хәрәкәт иткән башҡорттар менән ҡушылып китеп, артабан үҫәргән исеме аҫтында таныласаҡ башҡорт ырыуына нигеҙ була алыуын раҫлай. Һуңғараҡ, XI-XII быуаттарҙа үҫәргәндәр составына ҡыпсаҡлашҡан ҡаңлыларҙың бер өлөшө ҡушылһа, Алтын Урҙа осоронда (XIII-XIV бб.) Курдарҙан сыҡҡан мутиян/мүйтен/мөйтәндәр ҙә башҡорт үҫәргәндәрен тулыландырғандыр, тигән фараз ҡылырға була.

Ошо фаразға XVII быуаттан да алдараҡ яҙылған "Дафтар-и Чингизнаме" китабына индерелгән "Ҡысса-и Сыңғыҙ хан" хикәйәтендәге ҡайһы бер мәғлүмәттәр нигеҙ була ала. Ошо әҫәрҙә XIII-XV быуаттарҙа Уралда һәм Көнбайыш Себерҙә булып үткән ваҡиғалар хаҡында бәйән ителә. Әлегә тиклем һаҡланып ҡалған шәжәрәләр бер нисә тапҡыр күсереп яҙылып, унда сағылыш тапҡан мәғлүмәттәр билдәле бер үҙгәрештәргә дусар булһа, "Ҡысса-и Сыңғыҙ хан " хикәйәте беҙгә аутентик хәлендә, йәғни тәүҙә нисек төҙөлгән, шул килеш килеп еткән. Был әҫәрҙә шул уҡ мөйтәндәрҙең тәү бабаһының исеме лә боронғораҡ вариантта - Мүтиән бей формаһында һаҡланып ҡалған. Йәнә, шунда уҡ мөйтәндәрҙең боронғо ораны "Байғуңрат" тип теркәлгән, был уларҙың монголдарҙың ҡуңғрат ҡәбиләһе менән бәйле булыуына ишара. Шул уҡ Хорезм мөйтәндәре ваҡыттар үтеү менән ҡарағалпаҡтарҙың Ҡуңғрад арысына (ырыу бүлеменә) ингәнлеге билдәле.

Тимәк, башҡорт һәм ҡарағалпаҡ мөйтәндәре заманында бер этник берләшмәне тәшкил иткән. Мөйтәндәр Ҡуңғрат берлегенә ҡараған ҡәүемдәрҙән булғанлыҡтан, уларҙың яҙма сағылыш тапҡан сәйәси тороштары монгол дәүләте - Алтын Урҙа заманына ҡарай. Йәнә тағы бер нәмә иғтибарға лайыҡ: Ҡуңғрат бейҙәре бик ҡеүәтле булып, ошо дәүләттә "бекләрбек" дәрәжәһенә эйә булған, йәғни Алтын Урҙа ханлығының беренсе министрҙары кимәлендә баһаланған. XVIII быуатта улар Хорезмда чингизидтар династияһын ҡолатып, Хива ханлығында үҙ династияһын нигеҙләй.

Мөйтәндәрҙең Ҡуңғрат берләшмәһенән сығып, башҡорттарға килеп ҡушылыуы хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәтте Ю.Бикбов нәшер иткән Үҫәргән шәжәрә-хроникаһынан табып була. Унда бына нимәләр теркәлгән: "Мөйтән бейҙән Шикмәли бей тыуған, Бату хандың замандашы, Шикмәли бейҙән Бүрке бей (Тоҡан хан замандашы), Бүрке бейҙән - Манҡут бей (Үзбәк хан ваҡытында), Манҡут бейҙән - Урал бей (Жәнибек хан замандашы), ул һуңынан Урал Тапҡан Урал бей, тигән ҡушамат ала. Ул, Жәнибек хан баҫымына (асыуына) дусар булып, ҡышын саңғыла Урал һырттарына ҡасып китә". "Таварих-и башҡорт" китабында ла ошондай уҡ мәғлүмәт бирелә: "Урал тапҡан Урал бей Жәнибек заманында бей булып, хөкүмәт идәр иде".

Шулай итеп, буласаҡ башҡорт мөйтәндәре үҙҙәренең ырыу башлыҡтары етәкселегендә Джанибек хан (1342-1357) ваҡытында Уралға күсеп килә, тап шунан һуң ғына уларҙың юлбашсыһы Урал бей ҡушаматына лайыҡ була. Әйтергә кәрәк, Юлбарыҫ Бикбов күсереп алған тарихи Үҫәргән хроникаһында Үҫәргән антропонимы иҫкә алынмай, ул исем әлеге "Таварих-и башҡорт" әҫәрендә бар, әммә уның атаһы сифатында шиғри шәжәрәләге легендар шәхес Мөйтән (Митан) бей түгел, ә башҡа кеше күрһәтелә. Ул бына нисек аталмыш: "Үҫәргән бин Ябынчы ясауыл".

Ябынчы есаул хаҡында Ю.Бикбов шундай риүәйәт яҙып ала: "Хәҙерге үҫәргән башҡорттарының күпселеге Ябынчынан таралып киткән, уны һуңынан Ябынчы ясауыл, тип йөрөткәндәр. Уның хаҡында бер риүәйәт бар икән: "Ябынчы Мөйтән бейҙең 8-се быуын варисы булған Сарыш бей ставкаһы янында 7 көнлөк ташландыҡ бала хәлендә табыла, ебәк юрғанға төрөлөп, өҫтөнә парса ябылған бишектә ятҡанлыҡтан, уны Ябынчы тип атайҙар. Һуңынан ул бей ихтыярын аҡыллы һәм етеҙ рәүештә үтәй килеп, Күсем хан хеҙмәтендә була, абруйлы есаул дәрәжәһенә өлгәшә". Ошо риүәйәткә ярашлы, Ябынчы есаул улы Үҫәргән XVI йәшәгән булып сыға, тимәк, тап ошо ваҡыттан башлап боронғо мөйтәндәр яңы этник атама алып, ошо этноним аҫтында башҡорт ырыуҙары араһында танылыу ала. Күрәһең, тап ошо заманда Үҫәргән исемле бей ошо ырыу менән етәкселек итә башлаған, был, боронғо традицияға ярашлы, уның ҡул аҫтында булыусыларҙың этник атамаһына әүерелгән.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 10-11-се һандарҙа).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

Р.К. Ибраһимов майҙандың уртаһынараҡ килеп туҡтағас, дивизия командиры М.М. Шайморатов уға рапорт бирҙе.

Бынан һуң Р.К. Ибраһимов хәрби байраҡ тапшырыу тураһында Верховный Совет Президиумы ҡарарын уҡыны.

Полковник Шайморатов байраҡты алыу менән теҙләнде һәм уны үпте. Шунан уны байраҡ йөрөтөүсегә бирҙе.

Байраҡ ҡабул ителгәс, Шайморатов Президиумдың грамотаһын уҡыны һәм яуап һүҙе әйтте. Унан ҡунаҡтар менән бөтә колонналарҙы йөрөп сыҡты. Һалдат һәм офицерҙар һауа яңғыратып "ура!" ҡысҡыралар. Бынан һуң Н.Д. Буренкин ҡыҫҡа ғына ҡотлау телмәрен һөйләне.

Артабан спорт ярыштары - бәйгеләр башланды. 3-сө полктың командиры Ғариф Макаев үтә лә етеҙ, йылғыр кеше икән: аттарын биҙәп алып килгән, "фигуралы" йөрөүҙәр - юрттырыу, саптырыуҙар әҙерләнгән. Биҙәү, матурлау, тышҡы оформление яғынан уны берәү ҙә үтерлек түгел. Был полктың шундай номерҙарынан һуң һәр төрлө кәртә-ҡамауҙар аша ат һикертеү башланды.

Ярыштарҙа беренсе призды беҙҙең полктың рядовойы Мангутов алды. Ләкин призларҙың күбеһе 2-се полкҡа, унан 3-сөгә эләкте. Ә конкурстан тыш ярышта дивизия күләмендә иң беренсе урын һикереүҙән дә, рубканан да майор Кусимовта булды. Р.К. Ибраһимов уға бурка бүләк итте.

Бөгөн Таһир Кусимов үҙе тураһында ифрат матур тәҫьорат ҡалдырҙы. Бөтәһе лә: "Бына боевой командир!" - тиҙәр. Ниғмәтйәнов менән Буренкин: "Был офицер һуғышта мотлаҡ герой булыр!" - тинеләр.

**25 март.** ... 13 сәғәттә хәбәр килде: БАССР Верховный Советы Президиумы һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы дивизия, полк командиры һәм комиссарҙарын хушлашыу кисәһенә саҡыра. Кискә табан саналарға тейәлешеп, Өфөгә киттек.

Кусимов менән Верховный Советҡа килдек.

Бөтәһе лә ултырышып бөткәс, Р.К. Ибраһимов мәжлесте асып, бокалдарҙы тултырырға ҡушты.

Төрлө тәҡдим-теләктәр менән республиканың башҡа етәкселәре лә тост тәҡдим иттеләр. Теләк бер - дивизия халыҡ наказын намыҫлы үтәһен!

Яуап һүҙенә күсеп, Ибраһимов:

- Беренсе һүҙ - 1-се полк командиры майор Кусимовҡа! - тине.

Кусимов оҙон һөйләмәне:

- 1-се полк - әҙер! Партия, халыҡ ышанысын аҡларбыҙ! - тип тамамланы ул һүҙен.

Иң аҙаҡҡы һүҙҙе, әлбиттә, комдив Шайморатов әйтте.

**26 март.** Отправка һаман юҡ әле. Ошо уҡ арала байтаҡ райондарҙан делегациялар ҡабул иттек. Улар алып килгән халыҡ наказдарын һалдат, командирҙарға еткерҙек.

Эскадрондарҙа йөрөгәндә аҙым һайын бер һүҙ ишетәһең:

- Беҙ әҙер, комиссар иптәш!

Гәпләшеп китәбеҙ.

- Ҡурҡмайһыңмы?

- Юҡ, ни эшләп ҡурҡа ти!

- Фашист ҡурҡһын!

Шулай ҙа, билдәләнгән көндәрҙә китмәгәс, һалдаттар бошона башланы. Әйләнгән һайын: "Етерлек яттыҡ бит, туйҙырҙы, тиҙерәк китәйек инде", - тигән һүҙҙәрҙе ишетәһең.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Асҡын, Әсән, Байҡыбаш, Борай, Краснохолм, Ҡыҙылъяр, Иҫке Балтас, Тәтешле, Яңауыл улыстары ҡараған Бөрө кантонында 1923-1924 уҡыу йылында 131 башҡорт, 10 татар, 112 рус, 47 мари беренсе баҫҡыс мәктәптәре булған.***



# ШАКИРОВ НИҢӘ АСЫУЛАНДЫ?

**1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙың рәсми һөҙөмтәләре иғлан ителгәс, Миҙхәт Закир улы Шакиров КПСС Өлкә комитеты секретарҙарын һәм бүлек мөдирҙәрен йыйҙы. Бик асыуланып, республикалағы демографик процестарға күҙәтеү яһаны һәм уларҙың дөрөҫ йүнәлештә бармауын, ә Өлкә комитеттың был процестарҙан ситтә тороуын, уларға етәкселек итмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Ни өсөн 1897 йылда Башҡортостанда 960 мең башҡорт булған, йәғни бөтә халыҡтың 43,7 процентын тәшкил иткән, 1920 йылда 1069 мең, йәғни 36,4 процент, ә 1979 йылда инде 935,9 мең, йәғни 24,3 процент ҡына башҡорт тороп ҡалған?" - тигән һорау ҡуйҙы. "Тимәк, - тип дауам итте ул, - башҡорттарҙың дөйөм һаны ла, проценты ла һиҙелеп кәмей. Былай барһа, башҡорттарҙың проценты, әйтәйек, 15 процентҡа төшһә, Башҡорт автономиялы республикаһының артабан йәшәүе шик аҫтына алыныуы ихтимал. Ә Башҡортостан Республикаһын һис тә юҡ итергә ярамай, сөнки ул бөйөк Лениндың (ул саҡтарҙа шулай һөйләйҙәр ине) декреты менән төҙөлгән".**



Артабан ул, республикала күптән барған был кире хәлдәрҙең сәбәбен асыҡларға тырышып, кәңәшмәлә ултырғандарҙан айырым-айырым һорай башланы:

- Таһир Исмәғилевич, һин - республиканың баш идеологы (Өлкә комитет секретары Ахунйәновҡа өндәшә), ни өсөн республикала башҡорттарҙың абсолют һаны ла, проценты ла кәмей бара, шул турала уйлағаның бармы?

- Уйлағаным да, махсус өйрәнгәнем дә юҡ был мәсьәләне, - тип яуап бирә Т.И. Ахунйәнов. - Әммә, Миҙхәт Закирович, был мәсьәләне тикшерергә, өйрәнергә, сәбәптәрен асыҡларға һүҙ бирәм.

М. Шакиров Өлкә комитетта һаулыҡ һаҡлау бүлеген етәкләгән Ш. Вәлишинға өндәшә:

- Һин, Шәриф Әхмәтович, халыҡтың һаулығы, тыуым-үлем мәсьәләләре менән махсус шөғөлләнәһең, Һаулыҡ һаҡлау министрлығының эше өсөн яуап бирәһең, шулай бит? Ни өсөн республика халҡының дөйөм иҫәбе артҡан саҡта башҡорттарҙың нисбәте кәмей?

Шәриф Әхмәтович бер аҙға аптырап ҡала, шулай ҙа яуап таба:

- Миҙхәт Закирович, һеҙ ошоға тиклем беҙҙең алда бындай һорауҙы ҡуйманығыҙ бит.

Шунда кемдер әйтеп ҡуйҙы: "Республикала балаларҙың тыуыуы кәмей бит, ғаиләлә бер-ике бала тәрбиәләү модаға әйләнде".

М. Шакиров эләктереп тә алды:

- Шулаймы икән? Йә, үҙебеҙҙән башлап тикшерәйек әле. Минең өс балам булды. Таһир Исмәғилевич, һиндә нисә бала? (Икәү икән). Р.Ш. Сәйфуллиндың - өс, А.Х. Юлбирҙин менән У.Н. Бакировтың икешәр бала...

Миндә өс бала булыуын ишеткәс, маҡтап та ҡуйҙы. Шунан ул Ш. Вәлишинға һорау бирә:

- Шәриф Әхмәтович, һинең нисә балаң бар?

- Берәү, - тине Шәриф Әхмәтович ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына.

М. Шакиров ныҡ аптырап:

- Нисек берәү генә?! Шәриф Әхмәтович, һин бит ысын башҡорт, нисек инде бер генә бала?

Шунан шаярыуға төшөп:

- Шәриф Әхмәтович, һинә бөгөн яуаплы бурыс ҡуябыҙ: ғаиләңдә кәмендә тағы бер бала булдыраһың!

- Миҙхәт Закирович, мин бит хәҙер алтмышҡа яҡынлайым...

- Ә һинең олатайың алтмыш йәштә дүртенсе ҡатын алып, тағы өс-дүрт бала тыуҙырып өлгөргән, һин дә олатайыңдан ҡалышма! - тип яуаплай Миҙхәт Закир улы. Ш. Вәлишин да юғалып ҡалғандарҙан түгел:

- Минең олатайым, Миҙхәт Закирович, обкомда эшләмәгән бит, ул яртышар йыл йәйләүҙә йәшәп, ҡымыҙ эскән, ат өҫтөндә йөрөгән...

Шундай шаярыу ҡатыш һөйләшеүҙән һуң М.З. Шакиров, етди төҫ алып:

- Партия Өлкә комитеты, йәғни беҙҙең аппарат, халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләрен ентекләп тикшерергә, иң мөһиме, үрҙә әйтелгән етешһеҙлектәрҙең сәбәбен асыҡларға тейеш. Был мәсьәлә менән һәр бүлеккә шөғөлләнергә ҡушам. Өс ай ваҡыт бирәм. Өс айҙан һуң һәр бүлектең белешмәһен көтәм, - тине.

Тимәк, мин етәкләгән фән һәм уҡыу йорттары бүлеге лә республикала башҡорттарҙың дөйөм һан яғынан һәм процент яғынан да һиҙелеп кәмеүенең төп сәбәптәрен асыҡларға һәм шул турала М.З. Шакировҡа рәсми белешмә йәки аңлатма яҙырға тейеш.

Әлбиттә, архивтарҙа ултырып, 1897 һәм унан һуңғы йылдарҙа үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләрен ҡараным, мәктәптәрҙең тарихын өйрәндем, татар телендә уҡытылған башҡорт ауылдарында булдым. Борай районына бер барғанда Иҫке Таҙлар тигән ауылда ҡунып киттем. Колхоздың партком секретары мине өйөнә алып ҡайтты. Был ауылда туҡтауым осраҡлы түгел ине, сөнки М.З. Шакировтың олатаһы менән өләсәһе ошо ауылда тыуып үҫкән. Кис, сәй эскәндә, хужа менән төрлө темаға һөйләшеп ултырҙыҡ, шул иҫәптән был ауылда кемдәр йәшәүе хаҡында ла һүҙ ҡуҙғаттым. Хужа кеше: "Беҙ боронғо башҡорт ырыуынан, Иҫке Таҙлар ырыуынанбыҙ..." - тип аңлатты. Ысынлап та, был ауыл халҡының бөтәһе лә башҡорт булып яҙылғайны. "Әммә телегеҙ татарсаға яҡын, ни өсөн?" - тип һорағайным, "Уҡытыу татар телендә бара бит беҙҙә..." - тип яуап бирҙе хужа.

Иртәгәһенә ҡайтырға сыҡҡайным, кеҫәмдә папирос бөткән булып сыҡты (ул саҡта тарта инем), шуға ла үҙемдең шоферға магазин янында туҡтарға ҡуштым. Магазинға инеп, сигарет алып сыҡһам, машина янында 15-16 йәштәрҙәге өс ҡыҙ баҫып тора. Шоферым әйтә: "Был ҡыҙҙарға Өфөгә барырға кәрәк икән, ултыртып алып барыуҙы һорайҙар, нишләйбеҙ?" "Артҡа һыялар бит, бер аҙ боҙлауыҡ та бар, әйҙә, ултырт, машинаң әҙерәк ҡалтырар", - мин әйтәм. Бер аҙ барғас, ҡыҙҙарҙы һөйләндерәм: үҙҙәре ошо ауылдан икән, район үҙәгендәге төҙөлөш ойошмаһына эшкә урынлашҡандар ҙа Өфөгә буяусылар курсына уҡырға китеп баралар. Әле бер көнгә ялға ҡайтҡандар икән. Теге ҡыҙҙарҙан һорайым: "Һеҙ, ҡыҙҙар, ошо ауылдан булғас, милләтегеҙ буйынса татар булаһығыҙмы, әллә мари, удмурт-фәләнме?" (Был тирәлә мари менән удмурт ауылдары ла бар). Ҡыҙҙар шунда уҡ: "Юҡ, абзый, беҙ чын борынгы башкортлар, татар да, мари да түгел", - тип яуап бирәләр. Тимәк, 15-16 йәшлек балаларҙа ла милли аң бөтмәгән...

Әммә бик күп башҡорт ауылдарында үҙҙәренең башҡорт икәнен бөтөнләй онотҡандар ине, сәбәбе - мәктәптәрҙә уҡыу-уҡытыу эшен татарса алып барыу.

Республикала башҡорт мәктәптәренең һаны һиҙелерлек кәмей, ә татар мәктәптәре арта барған. **Мәғариф комиссариатының мәғлүмәттәре буйынса, Асҡын, Әсән, Байҡыбаш, Борай, Краснохолм, Ҡыҙылъяр, Иҫке Балтас, Тәтешле, Яңауыл улыстары ҡараған Бөрө кантонында 1923-1924 уҡыу йылында 131 башҡорт, 10 татар, 112 рус, 47 мари беренсе баҫҡыс мәктәптәре булған** (Госархив БАССР, фонд Р-798, опись I, д. 739, 19-сы бит). **Был мәктәптәрҙә 6959 башҡорт, 488 татар, 7240 рус балаһы уҡыған** (шул уҡ сығанаҡ, 20-се бит). Шул уҡ уҡыу йылында Бәләбәй кантонында - 68, Өфө кантоны территорияһында беренсе мәүе арҡаһында тормошҡа ашырылған. Л.Н. Беленчук был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙҙы: "... Башҡорт АССР-ында башҡорттар йәшәгән райондарҙа рус һәм татар мәктәптәрен генә астылар, сөнки урындағы етәкселәр, башҡорт мәктәптәрен асыу белгестәр һәм дәреслектәр булмау арҡаһында мөмкин түгел, тип һананы" (Л.Н. Беленчук. Материалы Комнаца при Наркомпросе РСФСР - источник по изучению национально-культурного строительства (1929 -1934). Журн. "Советские архивы", 1988, № 5, 71-се бит). Әммә был аңлатмаға ышаныуы ҡыйын: беренсенән, 20-се йылдарҙа асылған башҡорт мәктәптәре күпмелер ваҡыт эшләп алған бит (ҡайһыһы - биш, ҡайһыһы тағы ла оҙағыраҡ); икенсенән, бик күп райондарҙа асылған башҡорт мәктәптәре бөтөнләй ябылмаған: нисек асылған, шулай эшләгәндәр. Был мәсьәләлә субъектив сәбәптәр өҫтөнлөк алған, күрәһең. Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретары Я.Б. Быкин 1937

баҫҡыслы 51 башҡорт мәктәбе эшләгән.

Ҡариҙел районы халыҡ мәғарифы бүлегенең 1933 йылдың 1 сентябрендә яҙылған отчеты буйынса 40 мәктәптән 13 мәктәп башҡорт телендә уҡытҡан (Госархив БАССР, фонд Р-798, опись 1, д. 2857, 1-6-сы биттәр).

1933 йылда Туймазы районында беренсе баҫҡыслы 14 башҡорт мәктәбе эшләп, уларҙа 1190 уҡыусы уҡыған, тағы ла ике крәҫтиән йәштәре мәктәбендә (ШКМ) 472 уҡыусы булған (Госархив БАССР, фонд Р-798, опись I, д. 2969, 25-се бит).

Баҡалы районы халыҡ мәғарифы бүлегенең 1933 йылдың 7 февралендә яҙған отчеты буйынса был төбәктә беренсе баҫҡыслы 18 һәм 3 крәҫтиән йәштәре мәктәбе уҡыу-уҡытыу эшен башҡорт телендә алып барған. Шундай уҡ хәл башҡа райондарҙа ла булған. Әммә 30-40-сы йылдар эсендә үрҙә һаналған территорияларҙағы башҡорт мәктәптәре йәйлап-йәйлап татар мәктәптәренә әйләнгән.

Халыҡ комиссариаты һәм урындағы мәғариф ойошмалары материалдарынан күренеүенсә, башҡорт мәктәптәрен татар мәктәптәренә әйләндереү, йәнәһе, башҡорт телендә яҙылған дәреслектәрҙең һәм уҡытыусыларҙың етеш-

✔ ***Иң мөһиме, иң хафалыһы: концертта башҡортса бер йыр, бер бейеү, бер шиғыр булманы, башҡорт шағирҙарының йәки композиторҙарының бер әҫәре лә яңғыраманы. Әллә Татарстанда ултыраммы, тигән һорау тыуҙы башымда.***



йылда Өлкә комитет пленумында сығыш яһап, былай тип әйткән: "...башҡорт мәктәптәрендә татар уҡытыусылары башҡорт телен ҡыҫты һәм башҡорт кадрҙарына юл бирмәне" ("Советская Башкирия" гәзите, 1937 йыл, 17 сентябрь).

Шулай итеп, башҡорттарҙың һан яғынан да, процент нисбәте буйынса ла кәмей барыуына мәктәп, мәктәптәрҙә уҡытыу теле йоғонто яһаған. Татар мәктәбен тамамлап сыҡҡан башҡорт йәштәре артабан татарса һөйләшкән һәм үҙҙәрен дә татар тип һанай башлаған. Ә был хәл ҡайһы бер райондарҙа, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш райондарҙа, бик күптән, ике-өс йөҙ йыл элек, башланған.

Бына ошо факттарҙы индереп, М.З. Шакиров исеменә тулы ғына белешмә яҙып бирҙем. Бер нисә көндән ул мине саҡырҙы, белешмәне ентекләп уҡыуын һәм үҙенең ҡәнәғәт ҡалыуын әйтте. Шунан һуң:

- Белешмәндә бер ниндәй ҙә тәҡдим индерелмәгән. Бәлки, телдән әйтерһең? - тине.

- Ысынлап та, тәҡдимемде яҙмай торҙом. Әммә белешмәнең йөкмәткеһенән бер тәҡдим үҙенән-үҙе аңлашыла: әлегә тиклем татарса уҡытылған башҡорт ауылдарында мәктәптәрҙе башҡортса уҡытыуға күсерергә кәрәк, - тинем. - Әлбиттә, был бик сетерекле эш, ҡаршылыҡ булыуы ла ихтимал. Башта ата-әсәләр менән һөйләшеп, уларҙың ризалығын алырға кәрәк. Шуның өсөн һәр мәктәптә ата-әсәләр йыйылышы үткәреп, тәҡдимде тауышҡа ҡуйып, рәсми ҡарар ҡабул итергә кәрәк булыр. Миҙхәт Закирович, мин берәй төбәккә, мәҫәлән, Асҡын йә Борай районына барып, ата-әсәләр йыйылыштарын үткәреп ҡайтайым. Әлбиттә, улар алдында бик дәлилләп сығыш яһарға тура килер, - тинем дә, шунан етди төҫ алып, өҫтәп ҡуйҙым. - Тик, Миҙхәт Закирович, халыҡ иҫәбен алғанда татар булып яҙылған ауылдарҙа мәктәптәрҙе башҡортсаға күсерергә ярамай...

- Эйе, һәр халыҡ үҙ телендә уҡыһын, дөйөм законды боҙмайыҡ. Ысынлап та, был эште башта бер районда ғына башлап ҡарайыҡ. Мин Илеш районын тәҡдим итәм. Бына ни өсөн: бынан ике-өс ай элек ауыл хужалығында өлгәшкән уңыштары өсөн уларға РСФСР Министрҙар Советы һәм ВЦСПС-тың күсмә Ҡыҙыл байрағын тапшырғайным. Нимәгә иғтибар иттем: бөтә сығыштар татар телендә булды. Уныһы ярай инде, ғүмер буйы татарса уҡып, татарлашып бөткәндәр, шуның өсөн уларҙы ғәйепләп тә булмайҙыр. Иң мөһиме, иң хафалыһы: концертта башҡортса бер йыр, бер бейеү, бер шиғыр булманы, башҡорт шағирҙарының йәки композиторҙарының бер әҫәре лә яңғыраманы. Әллә Татарстанда ултыраммы, тигән һорау тыуҙы башымда. Шуның өсөн тантана һуңынан бөтә район комитеты, район Советы хеҙмәткәрҙәрен, колхоз рәйестәрен, партия ойошмаһы секретарҙарын алып ҡалып, бик етди, ҡаты һөйләшеү үткәрҙем. "Һеҙ ҡайһы республикала - Башҡортостандамы, әллә Татарстандамы йәшәйһегеҙ, ниңә Ҡаҙан тураһында бер нисә йыр яңғыраны, Өфө тураһында бер нәмә лә ишетелмәне? Татар, сыуаш, рус, молдаван бейеүҙәре һәм йырҙары булды, ә башҡорт йыры ла, бейеүе лә юҡ". Тегеләр үҙҙәре лә аптырап ҡалды... Т. Л. Рахманов (беренсе секретарҙары - **Ә.А.**) үҙенең сығышында район комитеты, район Советы, уның мәҙәниәт бүлеге хеҙмәткәрҙәрен тәнҡитләне, үҙенең дә ғәйебен таныны. Хәҙер уларҙа бөтә идеологик эштәрҙе тәнҡит нигеҙендә яңынан баһалау һәм үҙгәртеү башланды. Шуның өсөн тәүге сәйәхәтенде Илешкә бағышла. Был эште Илештән башлау хәйерлерәк булыр, - тип бөтөрҙө һүҙен Шакиров.

Бына мин Илеш районында. Тәлғәт Лотфулла улы Рахмановҡа килеүемдең маҡсатын аңлатам. Ул бөтә хеҙмәткәрҙәрен йыйып алды, дөйөм һөйләшеү үткәрҙе. Берәү ҙә бер ҡаршы һүҙ әйтмәне, күптән кәрәк ине, тип хуплап ултырҙылар. Был районда ярты ай тирәһе булдым, район партия ойошмаһы секретары Фәтхиев менән (идеология эштәрен етәкләүсе) бөтә башҡорт ауылдарында ата-әсәләр йыйылыштарын үткәреп, башҡортса уҡытыуға күсеүҙең әһәмиәтен, йәштәр өсөн өҫтөнлөгөн аңлатырға тырыштыҡ, тауышҡа ҡуйып, киләһе уҡыу йылынан уҡыу-уҡытыу эшен башҡортсаға күсерергә кәрәк, тигән ҡарарҙар ҡабул иттек. Һуңынан был райондың мәктәптәрен уҡытыусылар һәм дәреслектәр менән тәьмин итеү буйынса ла шөғөлләнергә тура килде.

Илеш районында был эш ыңғай ғына башланып китте. Икенсе йылында ҡалған райондарҙың да башҡорт ауылдарында мәктәптәр башҡорт телендә уҡытыуға күсте. Был эш ун йылға яҡын алып барылды, ялыуҙар булманы тиерлек. Тик ҡайһы бер райондарҙа, мәҫәлән, Благовар районында, ҡайһы бер татар ауылдарының мәктәптәрен дә башҡортса уҡытыуға күсергәндәр, шуның менән Өлкә комитетының, татар ауылдарындағы мәктәптәрҙе башҡортса уҡытыуға күсермәҫкә, тигән күрһәтмәһен юрамал боҙғандар булып сыҡты. Әлеге лә баяғы ризаһыҙлыҡ тыуҙырыу өсөндөр инде. Ошо райондан ғына ялыу хаттары булды...

Өлкә комитеттың етәкселеге алышынғас, башҡортса уҡытыуға күскән мәктәптәрҙе яңынан татарса уҡытыуға күсерә башланылар. Власҡа осраҡлы ғына килеп эләккән кешеләр эше ине был. Уларҙың ризалығы йәки күрһәтмәһе булмаһа, бындай ҙур эште башларға бер кемдең дә ҡыйыулығы етмәҫ ине.

**Әхмәр АҘНАБАЕВ, филология фәндәре докторы, профессор.**

*(Был материал 90-сы йылдар аҙағында "Башҡортостан" гәзитендә баҫылғайны).*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*

# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

**2020 йылдың октябрендә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уҙғарылыуы барыбыҙға ла мәғлүм. Рәсәй - күп милләтле ил, һәм һәр кемдең милли үҙбилдәләнеше һөҙөмтәһендә теге йәки был милләткә ҡараған кешеләрҙең дөйөм һаны ла халыҡ иҫәбен алыу барышында асыҡланасаҡ. Билдәле бер объектив сәбәптәр арҡаһында айырым кешеләрҙең генә түгел, ҙур ғына халыҡ төркөмдәренең милли үҙбилдәләнешендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүе ихтимал. Фән телендә быны этник үҙлектең (идентичность) алмашыныуы менән аңлатырға тырышалар. Әммә беҙгә шуныһы ла мәғлүм: әгәр нәҫел-нәсәбен иң кәмендә ете быуынға тиклем мотлаҡ белергә тейеш булған башҡорттар үҙ шәжәрәһен күҙ ҡараһындай һаҡламаһа, тиҫтәләгән ҡәбилә, йөҙәрләгән бәләкәй ырыуҙарға бүленеп йәшәү, башҡа көслөрәк һәм күп һанлыраҡ ҡәүемдәр тарафынан ассимиляцияға дусар булыу арҡаһында күптән юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, совет осороноң билдәле сәйәси тайпылыш-болғаныштары һөҙөмтәһендә кешенең милли үҙбилдәләнеше һанға һуғылманы, төрлө баш-баштаҡлыҡтарға юл ҡуйылды. Мәҫәлән, быуаттар дауамында йәшәп килгән мишәр халҡы милләт булараҡ юҡҡа сыҡты. 1979 йылда Башҡортостанда 935,9 мең башҡорт теркәлһә, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу шаҡ ҡатырғыс һөҙөмтәләр бирҙе: республикала йәшәгән башҡортарҙың һаны 863,8 меңгә тиклем кәмене. Халҡы артыу урынына 72 меңгә кәмегән башҡорт ауылдарынан ҡырғын үткән, тиерһең. Ә 80-се йылдарҙа ауыл тормошо бөлгөнлөктә түгел ине, тап шул йылдарҙа тыуым да әүҙем генә арта барҙы. Ошо ваҡытта ебәрелгән хаталар төҙәтелеп, халыҡтың милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы ғәмәлгә ашырылғас, ысынбарлыҡтың бөтөнләйгә икенсе төрлө булыуы асыҡланды. Был хәлдәрҙән алынған һабаҡтың асылы ҡатмарлы түгел: ата-бабаларың аҫаба башҡорт булғас, милли асылыңды алмаштырыу уларҙың рухына хыянат итеүгә тиң. Тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты Әнүәр Әсфәндийәровтың "Западные башкиры по переписям 1795-1917 гг." тигән китабында баҫылған инеш мәҡәләһе ошо хәҡиҡәтте сағылдыра ла инде.**

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың социаль-иҡтисади тарихын, XVII-XIX быуаттарҙа бында урыҫ булмаған крәҫтиәндәрҙең күсеп ултырыуын өйрәнеүгә иғтибар ныҡ артты. Припущенник һәм типтәр институттарының килеп сығышын һәм асылын, уларҙың аҫаба башҡорттар менән мөнәсәбәттәрен, типтәрҙәрҙең этник составын, уларҙың Башҡортостандың айырым төбәктәренә килеп төпләнеү ваҡытын һәм темптарын төрлөсә аңлаталар. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан тарихының теге йәки был осоронда башҡорттарҙың, шул иҫәптән көнбайыш башҡорттарының да дөйөм һаны тураһындағы мәсьәлә бер төрлө генә хәл ителмәй. Шуның өсөн Көнбайыш, Төньяҡ-Көнбайыш һәм Төньяҡ-Көнсығыш Башҡортостан халҡының составын һәм ҡайҙа төпләнеүен этник яҡтан өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә. Был проблемаларҙы тикшереү яңы сығанаҡтарҙы өйрәнеүҙе һәм уларҙы ғилми әйләнешкә индереүҙе талап итә. Ревизия, иҫәп алыу материалдары һәм һөҙөмтәләре 1795-1917 йылдарҙа ауылдарҙа йәшәүсе халыҡтың социаль-иҡтисади хәле, этник составы һәм һаны буйынса төрлө мәғлүмәттәр тупланған ҡиммәтле документаль сығанаҡтар йыйылмаһы булып тора.

Билдәле булыуынса, Рәсәйҙә XVIII быуатта - биш ревизия (1719-1721, 1748, 1762, 1783, 1795 йй.), XIX быуатта шулай уҡ биш ревизия (1811, 1816, 1834, 1850, 1859 йй.) уҙғарыла. Ревизия материалдары старосталар һәм старшиналар биргән мәғлүмәт буйынса ялланып эшләгән грамоталы кешеләр тарафынан төҙөлгән, уларға "йәндәрҙе ("ревизские души" - **Ред. иҫк.**) төшөрөп йә йәшереп ҡалдырған өсөн яуаплылыҡ йөкмәтелеү" ҡаралған. Ревизия мәғлүмәттәре ауыл сходтарында өс мәртәбә тикшерелгән. Башҡорт халҡы ревиз сказкаларында тәүләп 1795 йылда ғына тулыһынса теркәлгән.

Ырымбур губернаһы халҡы буйынса V ревизия мәғлүмәттәре Мәскәүҙә Рәсәй дәүләт боронғо акттар архивында һаҡланған Ерҙәрҙе генераль межалауға "Иҡтисади иҫкәрмәләр" тип аталған документтан алынды. Губернаның бөтә 12 өйәҙе олоҫтарындағы башҡорт ауылдарына ҡараған материалдар ("Иҡтисади иҫкәрмәләр"ҙә Пермь, Вятка һәм Һарытау губерналары өйәҙҙәренең башҡорттары тураһында мәғлүмәттәр 1816 йылғы VII ревизия буйынса бирелә) тәү тапҡыр "Китап" нәшриәтендә 2001 йылда "Западные башкиры по переписям 1795-1917гг." тип исемләнгән китапта баҫылып сыҡты. Һәр олоҫтоң ауылдары исемлегенән һуң хужалыҡ өлкәләре, халыҡ шөғөлдәре тураһындағы мәғлүмәттәр бирелә. Олоҫтоң исеме аталып, уға ҡараған ауылдарҙағы йорт иҫәбе, башҡорттарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың һаны күрһәтелә.

1795 йылғы ревизия материалдарын дөйөмләштереү һөҙөмтәһендә 12 өйәҙҙең һәр ҡайһыһында һәм тотош губернала йәшәгән башҡорттарҙың дөйөм һаны асыҡланды (Аныҡ мәғлүмәттәрҙе мәҡәләлә килтерелгән таблицанан ҡарағыҙ). Шулай уҡ ошо мәғлүмәттәр енестәр нисбәтен билдәләү мөмкинлеген бирҙе, ә был этнографтарға башҡорттарҙа ғаилә-никах мөнәсәбәттәренең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен асыҡлау өсөн бик мөһим.

Ғилми әҙәбиәттә XVIII быуатта айырым башҡорт хужалығының йәки йортоноң (Русса ҡабул ителгән терминологияға ярашлы - башкирский двор. - **Ред. иҫк.**) нисә кешенән тороуы хаҡында ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр осрай. Берәүҙәр фекеренсә, ул ваҡыттағы йәмғиәттә ҡушма, йәғни айырымланмаған (атай, ағай-эне ғаиләләре һ.б.) ғаиләле йорттар өҫтөнлөк иткән. Икенселәр раҫлағанса, бәләкәй ғаиләле йорттар күберәк булған. Башҡорт йәмғиәтенең үҫеш кимәлен айырым йортта нисә кеше йәшәүенә ҡарап билдәләп була. Уртаса алғанда, бер башҡорт йортона 6,2 кеше тура килгәнен иҫәпкә алһаҡ, ата-әсәнән һәм балиғ булмаған балаларҙан торған айырым бәләкәй ғаиләле йорттарҙың өҫтөнлөк итеүен билдәләп үтеү артыҡ булмаҫ.

**(Дауамы бар).**

✓ *Шырлыҡҡа ҡасып кергән ҡыр кәзәһен, бәрәсен, ҡуянды уңайлы ергә ултырып, көндәр буйы ҡарауыллап ултырғанын күргәнем бар. Һуғышҡанда аяуһыҙ, үҙен йәлләмәй. Баҫҡан йәнлеге менән ерҙә әйләнгеләп йөрөүе күҙәтелә, әммә ебәрмәй.*



*Спартак ИЛЬЯСОВ*

# АТА-БАБАМ ҺӨНӘРЕ - ҠОШ СӨЙӨҮ



Борон-борон заманда түгел... Тормош кимәле бер ни тиклем үҙгәреп, аңлы ғүмер кисерә башлаған кеше үткән мең йыллыҡтар төпкөлөнән башҡа ҡоралдар һәм ҡорамалдар менән бергә ҡулына сөйөр ҡош та ултыртып килеп сыҡҡан. Кешенең төп йәшәү сығанағы һунар булғанлыҡтан, йәнлек, ҡош-ҡорт тотоу өсөн ул төрлө алымдар ҡулланған, төрлө ҡоралдар уйлап тапҡан, үҙенә хеҙмәт итерҙәй йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы ҡулға эйәләштергән. Улар уға аҙыҡ сығанағы ла, аҙыҡ табыу ҡоралы ла булып хеҙмәт иткән.

Ҡоштар, беҙҙең аңыбыҙға боронғо әкиәт-риүәйәттәр аша инеп ҡалған йыртҡыс ҡоштар донъя яралғыһында, үҫешендә, һис шикһеҙ, кешенән күпкә олораҡтыр, тигән фекерҙәмен. Аҙаҡ кеше ҡулға өйрәтелгән сөйөр ҡошто үҙ яҙмышы менән бергә бәйләп, төрлө ғәрәсәттәр аша беҙгә иҫтәлек итеп еткергәндәр. Сөйөр ҡош, ҡорал булараҡ, дүңгәк суҡмарҙан, тәгәрмәстән кесе булһа ла, ай-һай, уҡ-һаҙаҡ менән осорҙаш түгелме икән?

Бөркөттөң һәм ҡарсығаның ҡурҡыу белмәҫ серле ара күҙҙәре Алтай менән Урал араһында, Тын, Ҡобан буйҙарында йәшәгән төрки ҡәбиләләр тормошон, Яйыҡ һәм Урта Азияның сыбар баҙарҙарын, боронғо фосондарҙы, сармат һәм скиф кешеләрен, римляндарҙы, Сыңғыҙхандың яуға ағым булып ашыҡҡан меңәрләгән һыбайлыларын, тыныс холоҡло, олпат кәүҙәле, күп уҡ һөйләшмәҫ, ҡараштарын һәр саҡ алысҡа, дала-сәхрәгә, тау үркәстәренә төбәгән боронғо башҡорт, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ һунарсыларын да күргән. Уның был ваҡиғаларға һалҡын, вайымһыҙ күҙҙәре тимер ҡалҡандарын шалтыратып үҙ-ара бысаҡ менән һуғышҡан Рим рыцарҙарын да, бай кейемдәргә төрөнөп, йөҙәрләгән һыбайлылар һәм ҡыуғыр эттәр эйәртеп һунарға сыҡҡан хан һәм батша һарайҙарын да күргән. Ыласынды үҙ ҡулдарында япон самурайҙары ла, Иран шахтары ла, бәҙәүән шәйехтәр ҙә, Һиндостан хакимдары ла, Тамерлан да йөрөткән. Бөркөт һәм башҡа "сөйөр ҡоштарҙың" күҙе ҙур һәм бәләкәй дәүләттәрҙең, империяларҙың тыуыуына ла, емерелеүенә лә шаһит! Уның бойҙоҡмаған, әммә осҡор күҙҙәре беҙгә, 21-се быуаттың балаларына ла һис аптырауһыҙ, ғәйепһеҙ ҡарайҙар. Мең йыллыҡтар ҡараңғылығынан кеше ҡулына суҡмар, һөңгө тотоп ҡоралланып, ат менеп, эт эйәртеп, һунар өсөн өйрәтелгән бөркөттө, ҡарсығаны терһәгенә ултыртып, тарихты дауам иткән. Әммә шуныһы ҡыҙыҡлы: боронғо ҡоралдар күптән инде ҡулланылмай, йә үҙ йөҙҙәрен юғалтҡан, йә бик һирәк осрай торған музей күргәҙмәһенә әйләнгән. Бер һыуһау араһында йөҙәр сәҡрым үтер аттар ҙа, баҫтырып етеп ҡабан йығырлыҡ эттәр ҙә юҡ хәҙер. Әммә бик боронғо осорҙан һунарҙа ҡулланыла торған әйбер-мыяттары килеп еткән. Үкенес. Халыҡ хәтере бөгөн Башҡортостанда халыҡ ҡулланылышынан төшкән "ҡош сөйөү" шөғөлө менән бәхилләште, буғай. Ҡарттарҙың ҡош сөйөү шөғөлө осороноң ядынаһы (иҫтәлеге) 1994 йыл Учалы районы Ҡорама ауылында Ильясов Диас-Нияз Мөхәйүр улының ҡулында һуңғыһы булып һүнде, ахырыһы.

Ағайым бик оҫта һунарсы ине. Ул тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө булды. Һәр үләндең үҫеү һулышын ишетте, һәр йәнлектең ғәҙәтен, кеше менән һәр береһенең мөнәсәбәтен тәрән белде. Уның үҙ ҡаралтыһында төлкө лә, бүре лә, ҡыр ҡаҙы, ҡыр үрҙәге лә аҫыраған саҡтары булды. Баҡсаһында ҡыр кәзәһе лә, һарайында бөркөт тә үҫте. Бүресе, бөркөтсө булып үҙ төбәгендә исеме ҡалған Хисмәтулла ҡарттайҙың быуындан-быуынға һөйләнеп ҡалдырған иҫтәлегә буйынса бөркөт балаһын үҫтереп һунарға өйрәтте ул. Ул бөркөттө аҫрау һәм өйрәтеү алымдарын түбәндә бәйән итермен. Әлегә тарих буйынса бер аҙ сәфәргә сығайыҡ.

Халыҡтарҙың тормошонда ҡош сөйөү зауыҡ ҡына түгел, ә йәшәү сығанағы ла булғанлыҡтан, уға айырым мөнәсәбәттәрҙә айырым ныҡлы ҡанундар ҙа булдырылған. Башҡа яҡта нисек булғандыр, әммә беҙҙә көнсығыш Табын ҡәбиләһе ырыуҙары араһында түбәндәге ҡанун-ғөрөф йәшәгән. Ҡошто тотоп, үҫтереп өйрәтеү бик-бик ҡатмарлы булғанлыҡтан, һәр кешелә сөйөр ҡош булмаған. Ул ҡош менән һунарҙы бик яратҡан, бирелгән, түҙемле, ҡош-ҡорт тәбиғәтен яҡшы белгән, уны таҙа, яңы ит менән тәьмин итә ала торған кешеләрҙә генә була. Сөнки бөркөт тә, ыласын, ҡарсыға ла тик саф, таҙа ит кенә ашай. Ә ирекһеҙҙә тотолған ҡош һәр көн һунарҙа йөрөй алмай. Өйрәтелгән ҡоштоң хаҡы бик ҡиммәт булған. Байҙар өсөн ул бер нисә тиҫтә ат хаҡы торһа, бик ярлы кеше өсөн бер нисә ат хаҡы була.

Ҡошто ат урлаған кеүек урлау осраҡтары ла була. Ҡошто үлтереү йә урлап тотолған кешегә язаны бик боронғо ваҡытта аҡһаҡалдар ҡоро йәки ырыу башы янында һәр саҡ булған ике мулланың береһе билдәләгән. Сөнки муллаларҙың береһе - ер-һыу, тышҡы мөнәсәбәттәр, башҡа ырыуҙар менән бәйләнеш, оло низағтар, һуғыш һәм солох, һөйләшеү-килешеүҙәр кеүегерәк мәсьәләләр менән идара итһә, икенсеһе, дәрәжәһе һәм абруйы бәләкәйерәге ғаилә, етемдәр, туй, исем ҡушыу, эске татыулыҡ, уғрылыҡ, ҡатын һәм ир кеүегерәк эске мәсьәләләрҙе хәл иткән йәки үҙ ҡарарын сығарған. Беҙгә дүрт быуат аша шул муллаларҙың ҡайһы береһенең хатта исемдәре лә килеп еткән. Өмөтбай мулла, Толомхужа, Исламхажи һәм Мөхәмәтйәр, Ҡоромша муллалар исеме. Көнсығыш табындар тормошона 1710-1730 йылдар самаһы урыҫ империяһының административ ҡанундары үтеп керә башлағас, аҡһаҡалдар ҡоро, шәриғәт хөкөмө, үҙ-ара ҡарарҙар әкренләп юҡҡа сыға, империя үҙ ҡанундары буйынса хакимлыҡ итә башлай. Минең был булмышты яҙыуымдың үҙ нигеҙе бар. Сөнки беҙ, Көнсығыш табындар, рәсми рәүештә Урыҫ империяһына ҡушылмағанбыҙ, үҙенә ҡушып алыуын һорап кеше лә ебәрмәгәнбеҙ. Беҙ Урыҫ дәүләте тарафынан баҫып алынғанбыҙ. Ырымбурҙан Исәткә тиклем, Исәттән Екатеринбург аша Минзәлә ҡаҙаҡ ҡәлғәләре төҙөлөп уратып алынып, был ҡәлғәләрҙә даими ғәскәр тотола башлағас ҡына әсирлеккә мәжбүр булғанбыҙ. Был - тарихи ысынбарлыҡ. Хәҙер сөйөр ҡоштарға кире ҡайтайыҡ. Ҡәбилә, ырыу эсенең үҙ ҡанундары, үҙ эске дәүләтселеге ҡанундары йәшәгән.

Урлашҡан йәки башҡа төрлө енәйәттәр өсөн ҡылған ҡылмыштың зыянлығына ҡарап, яза ла билдәләнгән. Һунар ҡоштары: бөркөт, көсөгән, ҡарағош араһында иң ҡиммәтле булып бүрене, ҡыр кәзәһен, ҡыр ҡаҙын ала алған ҡош иҫәпләнгән. Ыласындар, ҡарсығалар араһында иң ҡиммәтлеһе торна, ҡыр ҡаҙын һуҡҡан ҡош, ә иң аҙ штраф, яһаҡ-түләтмә йәки хаҡ божор, сел, үрҙәк, бүҙәнә алған типкес иҫәпләнгән. Ҡош ҡына түгел, башҡа нәмә урлау өсөн дә юлға һалынған ҡанундар була. Барымтанан йәки ҡарымтанан килгән мал өсөн яза алыу ҡаралмаған. Әммә үҙ-ара ырыу аша урлашыу өсөн яза ҡаралған. Элегерәк оло быуын кешеләре ауыҙынан: "Тотолған Толомхужаға теҙ сүгер, өрккән Өмөтбайға барыр", - тигән әйтем һирәкләп булһа ла ишетелә ине. Ул ваҡытта был әйтемдең мәғәнәһен һис төшөнмәй инем. Әллә ғилем, әллә зиһен артты. Хәҙер ул әйтемдең асылын мин бик яҡшы төшөнәм. Күрәһең, ул, әгәр тотолһаң, хилафлыҡ ҡылһаң, ярлыҡау һорап Толомхужа мулла алдына барып теҙ сүк, һора, тигәнде аңлатҡан. Толомхужа мулла ярлыҡамаһа, әле өмөтөң бар, унан олораҡ Өмөтбай муллаға бар, тигәнде өңгән. Верховный судья һымаҡ була инде.

Боронғо ваҡытта беҙҙә, Табын-Барында, Әйлеләрҙә, Ялан-Ҡотойҙарҙа, Табын-Тиләүҙә, Ҡара-Табында, Күбәләк-Табында, Бөрйәндәрҙең, Ҡыпсаҡтарҙың, Тамъяндарҙың һәр береһенең солоҡ ағасы булған кеүек, бөркөт, көсөгән, ҡарсыға оялары ла билдәле кешеләрҙең шәхси милке иҫәпләнгән. Әле бөгөнгө көндә лә бесән ҡубаһындай тиерлек өйөлгән бик күптәнге бөркөт ояһы ҡарт ҡарағай ботаҡтары араһында тороуын беләм. Ул, ғәҙәттә, кеше йөрөмәгән, юлдан алыҫ, әммә яландан йыраҡ уҡ булмаған текәлек йәки ҡаялыҡ араһында була. Сөйөр ҡош тотоу беҙҙең ҡарттайҙарҙың аҙыҡ-түлек, тире табыу сығанағы ғына булмаған. Сөйөр ҡошто улар байлыҡ билгеһе итеп тә, зауыҡ өсөн дә, үҙ-ара ярыш өсөн дә тотоп, милли мәҙәниәтебеҙ бер күрһәткесе лә булып торған. Бөркөттәр ғаиләһенә ингән ҙур һунар ҡоштарынан беҙҙең урманлы, яланлы, таулы ерҙә һирәкләп булһа ла биш төр бөркөт осрай. Бөркөт, көсөгән, ялан бөркөтө, ҡарағош һәм таҙғара. Шуларҙың араһында беҙҙең ерҙе иң үҙ иткәне бөркөт.

## Бөркөт

Бөркөттәр ғаиләһендәге төп ҡош. Өй ҡаҙынан ҙур. Төҫө ҡара-көрән. Оло йәштәгеләренең муйыны, елкәһе һәм ҡабырға ҡауырыйҙары ерәнһәй. Ҡайһы бер ҡыҫҡа ҡауырыйҙарының осо ағара. Башҡа бөркөттәргә ҡарағанда ҡойроғо оҙонораҡ, ҡанаттары ла ослораҡ. Ҡанаттарын йәйһә, ике метрға етә. Көсөгәндән кәүҙәгә әҙ генә ҡайтыш кеүек күренһә лә, бөркөттөң башы ҙур, томшоҡтары ла көслөрәк күренә, бигерәк тә өҫкө суҡыштары. Аяҡтары бармаҡтарына тиклем ваҡ ҡауырыйҙан менән ҡапланған. Урал бөркөтөнөң холҡо ялан бөркөттәренә ҡарағанда һунарҙа күпкә ныҡышмалы, түҙемле. Шырлыҡҡа ҡасып кергән ҡыр кәзәһен, бәрәсен, ҡуянды уңайлы ергә ултырып, көндәр буйы ҡарауыллап ултырғанын күргәнем бар. Һуғышҡанда аяуһыҙ, үҙен йәлләмәй. Баҫҡан йәнлеге менән ерҙә әйләнгеләп йөрөүе күҙәтелә, әммә ебәрмәй. Башҡа бөркөттәрҙеке кеүек үк, күҙҙәре бик үткер, ҡарашы аяуһыҙ, сая, улар еңелеүҙе, сигенеүҙе уйламай ҙа. Ояһы ағас башында ла, ышыҡ ҡая кәштәләрендә лә була. Бер ояլаған еренән гәр атып, туҙҙырып, балаларын алып биҙҙермәһәләр, тиҫтәләгән йылдар китмәй. Ултыраҡ ҡош. Йомортҡаһы ҡаҙҙыҡындай, әммә оҙонса түгел. Ваҡ ҡына тутлы таптар була. Ояһына ике йомортҡа һала.

Ояны ҡорор өсөн сыбыҡ-сабыҡты икәүләп ташыйҙар. Бергә ғаилә ҡорған бөркөттәр үлгәнсе бер-берен ташламайҙар. Әгәр ниндәйҙер сәбәп менән береһе үлһә, юғалһа, мәҫәлән, атылһа, ҡапҡанға эләгеп үлһә, икенсеһе уны бик ныҡ итеп тирә-яҡты саңҡылдай-саңҡылдай бейектән осоп эҙләй. Оҙаҡ эҙләй. Тамам төңөлөп, бер үҙе ҡалғанын белһә, был ояла йәшәмәй, ташлап китә. Әгәр инә булһа, йәш ата бөркөттәр менән берекмәй, үҙ ишен эҙләй. Оло ата бөркөт булһа, йәш инә бөркөттө үҙенең һоллологон күрһәтеп, әүрәтеп ала. Яҙ көнө торналарҙың туйын ҡарап ятҡаныгыҙ бармы? Юҡтыр. Бик күбегеҙҙең юҡтыр. Торналар туйы сәхнәләге балет менән ҡушылған лирик драма төҫлө. Иҫ китмәле сағыу, моң, хәрәкәттәр, наҙлылыҡ донъяһы! Кеше ҡоштарҙан, йәнлектәрҙән отоп алған моңдо, нескә, һығылмалы хәрәкәттәрҙе сәхнәгә күсереп, үҙе үк шуға һоҡлана шикелле.

Шулай ҙа ата бөркөттәр үҙ ерен, үҙ ояһын ташлап китергә бик үк ашыҡмай, киреһенсә, ситтән яңғыҙ инә бөркөттө эйәртеп алып ҡайтырға тырыша, буғай. Орнитологтар ата бөркөттөң был алымын үҙҙәренсә, европаса, аңлата. Йәнәһе, инә бөркөт ата бөркөттө үҙе һайлап ала. Бөркөт туйында, торна туйындағы кеүек, өс-дүрт пар, йә бер туп бөркөт, 15-20 торна ҡатнашмай. Бөркөт туйында йә ике, йә өс кенә бөркөт була. Ата һәм инә бөркөт, йә ике ата, бер инә. Иртә яҙ көнө, аяҙ көн иртә менән оя янында йә унан ситтәрәк ике йә өс ҡош бергәләп бик-бик бейеккә күтәреләләр ҙә, бер-береһен баҫтырып, ҡыуышып уйнарға тотоналар. Ҡыйылып өҫкә менәләр, шығыйып аҫҡа төшәләр, инә ҡош алдында үҙҙәренең таһыллығын күрһәтәләр. Алмашлап баш түбән һәм арҡаға ятып та осоп ярышалар, инә ҡош менән шулай һауала йөрәшергә ынтылалар. Әлбиттә, тәбиғәттән килгән осҡорлоғона, етеҙлегенә ҡарап, инә ҡош йөрәшерен үҙенә яҡын ебәрә. Быны күргән икенсе ата шунда уҡ "ярыш" яланын ҡалдырып, ситкә оса. Йөрәшеү хоҡуғына эйә булған ата, әгәр инә ситтә йәшәгән булһа, яйлап үҙ ояһы тирәһенә эйәртә. Әгәр ата менән инә бөркөт электән бергә йәшәйҙәр икән, уйнағанда өсөнсө ҡош булмай. Тормоштары барлыҡ нәмә менән дә ыңғай булһа, йыл һайын бала сығаралар. Төп бөркөттөң, башҡа бөркөттәрҙән айырмалы, ҡойроҡ осо түңәрәкләнгән, ҡара. Унан аҡ. Шул уҡ ҡауырһындар өҫтөнән ҡара һыҙат, унан тағы ла аҡ. Тауышы ҡыуғыр эттең тауышына оҡшап ҡала. Томшоғо ҡара. Ҡара күҙҙәре һары дүңгәләк эсендә. Уҫал. Табышы янына башҡа ҡоштарҙы килтермәй, ә төлкө яҡын килергә баҙнат итмәй, йыраҡтан йәшенеп күҙәтә. Туҡ бөркөт ҡорбанына ташланмай, хатта осмай ҙа тиерлек. Ҡарттайҙар һәр саҡ тик ас бөркөт менән генә һунарға сыҡҡандар. Һауала ҡанатын ҡаҡмай бик оҙаҡ йөҙөп йөрөй ала. Алты сәҡрымға тиклем һауаға күтәрелә ала, тигән яҙманы уҡығаным бар. Улар бал ҡорто кеүек һауала ҡыуышалар, шул осорҙа менәләрҙер ят ҡараштарҙан ҡасып, тигән фекерҙәмен.

(Дауамы бар).

*✓ Силәбелә шешәләргә тултырылып, ниндәйҙер "Ирәндек һыуы" менән сауҙа итеүҙәрен ишетеп беләм. Беҙҙең ресурстарға хужа булып, байығырға маташыусылар күбәйеп китмәһен өсөн, үҙ ер-һыуҙарыбыҙға үҙебеҙ хужа булайыҡ.*

ҒАЛИМҒА ӨС ҺОРАУ

**БДУ-ның Сибай институты уҡытыусыһы - биология фәндәре докторы, профессор, академик Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтүринды беҙ абруйлы ғалим итеп кенә түгел, киң ҡарашлы йәмәғәт эшмәкәре, ғәҙел, тура һүҙле илһөйәр һәм телһөйәр шәхестәребеҙҙең береһе булараҡ та беләбеҙ. Шуныһын айырып әйтергә кәрәк: ул "Киске Өфө" гәзитенең күптәнге тоғро дуҫы. Өфөгә килгәнендә Сәфәрғәли Искәндәр улы мотлаҡ беҙҙең редакцияға инеп сығырға ла форсат таба. Ә журналист халҡы бындай фекерле, һәр яңылыҡҡа үҙ ҡарашы булған мәғлүмәт эйәһе менән осрашыуға һәр саҡ шат. Шуға ла ғалим менән аралашыу минуттарын гәзит мәнфәғәтендә файҙаланып ҡалырға ашығабыҙ. Был юлы ла хөрмәтле уҙаманға һорауҙарыбыҙ әҙер ине инде.**



# ҘУР ЙЫЛҒАЛАР ШИШМӘНӘН БАШЛАНА

**➔ Һеҙ күп йылдар Көньяҡ Уралда тирә-яҡ мөхиттең техноген бысраныуы проблемаларын өйрәндегеҙ. Ошо йәһәттән төбәктең бөгөнгө торошон нисек баһалайһығыҙ?**

- Бынан бер нисә йыл элек кенә Урал аръяғы төбәктәрендә тау-руда сәнәғәте предприятиеларының етештереү ҡеүәттәре кәмеү менән бәйле, тирә-яҡ мөхиттең бысраныу кимәле лә кәмей төштө, тип әйтергә булыр ине лә, бөгөн, үкенескә, ана шул процесс тағы көсәйеү алдында тора. Яңынан-яңы карьерҙар асыу (Басай, Түбә һ.б.) яҡшыға алып килмәйәсәк, әлбиттә. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең байлыҡ беҙҙең бәләгә әүерелә бара. Сибай ҡалаһы, Хәйбулла, Әбйәлил, Баймаҡ райондары биләмәһендәге тиҫтәләгән ана шундай карьерҙарҙың беҙ белмәгән-күрмәгән, ситтә йәшәүсе хужалары зарарлы производство ҡалдыҡтарын таҙартыу ҡоролмалары ҡуябыҙ, юл төҙөйбөҙ тигән кеүек буш вәғәҙә биреүҙән ары китә алмайҙар. Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы карьерындағы янғынды һүндереү буйынса күрелгән саралырҙан һуң (карьерға һыу тултырыу, елләтеүсе гигант вентиляторҙар урынлаштырыу һ.б.) 2018 йылға ҡарағанда ҡалала экологик хәл күпкә үҙгәрҙе һәм бөгөнгө көнгә һауаны бысратыусы зарарлы матдәләрҙең ПДК-һы нормаға ярашлы; ул тикшерелеп тора һәм даими контролдә тотола. Яңыраҡ ҡына атмосфераның бысраныу кимәлен билдәләүсе мониторинг системаһы эшләй башланы. Ул һауаға зарарлы матдәләр бүленеп сығыуҙы тикшерә һәм был хаҡта халыҡты оператив иҫкәртә ала. Баҡыр колчеданы, тимер рудаһы карьерҙарындағы эштән туҡтаған һәм ғәмәлдән сыҡҡан рудниктар зонаһында тупраҡты тикшереү уның бысраныу кимәле рөхсәт ителгән нормаға яҡын булыуын күрһәтте. Шул уҡ ваҡытта Күлйортау, Түбә, Миндәк карьерҙарына яҡын тупраҡта үҫкән үҫемлектәрҙең тимер йоғонтоһона дусар ителеүе күҙәтелә. Башҡа урындарҙа үҫемлектәрҙең һабаҡ өлөшөнә химик анализ уларҙағы элементтарҙың уртаса кимәленең бер аҙ кәмеүен дәлилләне. Колхоз-совхоз осоронда иҫәпһеҙ күп мал тояҡтары аҫтында тапалып, юҡҡа сыға барған ҡайһы бер үҫемлектәрҙең бөгөн яңынан терелә башлауын күреү ҙә ҡыуаныслы хәл. Тик шулай ҙа әлеге мәлдә күңелде иң борсоғаны - урмандарҙа ҡайындарҙың ҡороуы. Уның сәбәптәре төрлө булыуы мөмкин: тупраҡта дым етешмәү, ниндәйҙер йоғошло ағас сирҙәре йә бәшмәк сире. Урман хужалыҡтары ҡырҡылған йә ҡороған ағастар урынына яңыларын ултыртып, урманды тергеҙеү эшенә элекке кеүек яуаплы ҡарамай. Санитар ҡырҡыу, файҙаланылған диләнкәләрҙе таҙартыу эштәре лә онотолдо. Иғтибар итәһегеҙҙер: оло юл буйҙарындағы асыҡлыҡтарҙы, хәҙер инде эшкәртелмәй башлаған ташландыҡ баҫыу-ҡырҙарҙы күпләп ҡарағай, ҡайын ағастарының йәш үҫентеләре баҫып ала башланы. Ер хәтере үҙенекен итә: тәбиғәт шулай итеп үҙ-үҙен тергеҙә һәм һаҡлай. Был ыңғай күренеш, юғиһә урмандарҙы ҡырағайҙарса ҡырыу йылғаларҙың ҡороуына ла килтерҙе, сөнки тәбиғәттә осраҡлылыҡ юҡ, бер сәбәп эҙемтә булып, икенсеһенә бәйләнеп килә.

**➔ Йылғаларҙы бик урынлы телгә алдығыҙ. Таҙамы уларҙың һыуы был төбәктәрҙә?**

- Ошоға тиклем минең фәнни тикшеренеүҙәр объекты нигеҙҙә ҡатмарлы геохимик шарттарҙа үҫкән үҫемлектәр һәм улар тамыр ебәргән тупраҡ ҡатламының экологик торошона бәйле булһа, һуңғы ваҡыт, эколог булараҡ, мине тәбиғи һыу сығанаҡтары: йылға-шишмәләребеҙ, күлдәребеҙ ҡыҙыҡһындыра. Иң тәүҙә шулай ҙа Сибайҙағы эсәр һыу сифаты хаҡында әйтеп китеү урынлы булыр: мин һыу һатып алғаным юҡ. Ҡалалағы эсәр һыу сифаты тейешле санитар нормаларға тап килә, тип яуаплылыҡ менән әйтә алам, сөнки унан даими рәүештә анализға өлгөләр алынып, тикшерелеп тора. Ә инде эсеү өсөн ҡулланылмаған һыу сығанаҡтары - мин бында нигеҙҙә Сибай, Баймаҡ тирәһендәге Таналыҡ, Күлйортау, Ҡарағайлы кеүек йылғаларҙы күҙҙә тотам - ошо өлкәләге экологик хәлдәргә ярашлы, сөнки, беренсенән, тау байыҡтырыу комбинаттары эшмәкәрлеге һәм шуның һөҙөмтәһендә тупланған руда ҡалдыҡтарынан бысранһа, урындағы мөхиткә кешелек факторының да ярайһы ғына ҡағылышы бар. Предприятиелар үҙ эшмәкәрлеге зыянын таҙартыу ҡоролмалары ярҙамында кәметергә, һәр төрлө контроль органдары талаптарына яуап бирергә тырышһа, "кешелек факторын" йәғни беҙҙең үҙебеҙҙең тарафтан тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыянды ауыҙлыҡлар әмәл юҡ: йәшәгән урындарыбыҙ сүп-сар полигондарына әүерелә, тәбиғәт байлыҡтары тәләфләнә, кем ни теләй, шуны эшләй. Шуға ла, күрәһең, күңел кеше аяғынан һил, әлегә имен-аман, үҙ көйөнә селтерәп аҡҡан көмөш һыулы шишмәләребеҙгә тартыла. Мәҫәлән, Учалы районындағы Әүлиә шишмәһе һыуын алып ҡарайыҡ. Уның хаждан алып ҡайтылған изге һыуҙан бер айырмаһы ла юҡ. Ирәндектән ағып төшкән ана шундай өс шишмәнең һыуын алып ҡайтып тикшертеп ҡараным: алтынға бәрәбәр! Бына шуларҙы һаҡлап алып ҡалыу, таҙартып, ҡарап тороу беҙҙең бурыс, юғиһә, уларға ла "хужалар" табылыр, ҡыҙыҡһыусылар барлығын ишетеп торабыҙ. Ә бындай эреле-ваҡлы шишмәләр беҙҙең Урал аръяғы райондарында бик күп: Учалыла, Белоретта, Баймаҡта, Әбйәлилдә... Әйткәндәй, Силәбелә шешәләргә тултырылып, һатыуға сығарылыусы ниндәйҙер "Ирәндек һыуы" менән сауҙа итеүҙәре хаҡында ла ишетеп беләм. Ситтән килеп, беҙҙең ресурстарға хужа булып, байығырға маташыусылар күбәйеп китмәһен өсөн, үҙ ер-һыуҙарыбыҙға үҙебеҙ хужа булайыҡ, тимәксемен.

Дөрөҫ, ҡайһы бер урындарҙа беҙҙәге һыуға йод ҡытлығы хас. Уның ҡарауы, Хәйбулла районында йодҡа бай шифалы сығанаҡ барлығы билдәле. Йә булмаһа, Талҡаҫ күлен алып ҡарайыҡ. Менделеев таблицаһындағы бик күп химик элементтарға бай шифалы сығанаҡтарыбыҙҙың береһе. Унда шифахана асып, ваҡытында бик дөрөҫ эшләнеләр. Ә батҡағының файҙалы сифаттары буйынса тирә-йүндә тиңе юҡ! Тик бына уны файҙаланыуҙа ныҡлы контроль булдырырға кәрәк, тип уйлайым. Бер осор, хәтерләйһегеҙҙер, моғайын, Башҡортостан интеллигенцияһының "Мәккәһе"нә әүерелгәйне бит Талҡаҫ. Үкенескә, ул быуын ҡартайҙы, ә йәштәрҙең күңеле ситкә, Төркиәгә тартыла. Ә бында, киреһенсә, ситтән килә башланылар. Беҙҙең ғәҙәт шулай инде ул: аяҡ аҫтындағының ҡәҙерен белмәйбеҙ... Ә бындағы уникаль сәләмәтлекте нығытыу учреждениеһы уны артабан үҫтереүгә, һәр яҡлап ярҙамға мохтаж. Бының өсөн дәүләт хәстәрлеге лә, хәлле бағыусылар һәм инвесторҙар ҙа бик кәрәк.

**➔ Сәләмәтлекте нығытыу, тигәндән, һуңғы йылдарҙа Баймаҡ халҡы асфальт заводы һөрөмөн һулап йәшәргә мәжбүр, тип зарланалар.**

- Ҡала биләмәһендәге был завод, район үҙәгендә төҙөлөштөң артабан үҫә барыуы сәбәпле, тора-бара ҡала уртаһында уҡ тороп ҡалды. Бөгөн, ысынлап та, шәхси секторҙа асфальт заводы һөрөмөн һулап йәшәйҙәр: урамға сығырлыҡ та түгел, хатта ябыҡ тәҙрәләрҙән дә өйгә үтеп инә. Шунан, яман шеш сирҙәре арта бара, тип аптырайҙар. Мөрәжәғәт итеүселәр булғас, бер нисә тапҡыр сығыш яһап та ҡараным. Йәмәғәтселек күтәреп алмағас, мәсьәләгә иғтибар итеүсе лә юҡ. Миңә сит илдәрҙә йыш булырға тура килә. Күрәм: унда ла ҡала эсендә ниндәйҙер заводтар бар, ләкин бер грамм саң, зарарлы бүлендек сығармай, сөнки унда тирә-яҡ мөхит мәнфәғәте тәүге урында - культура, менталитет шундай; ә беҙҙә иң беренсе сиратта матди килем, кеҫә файҙаһы ҡайғыртыла. Бындай законһыҙлыҡ күренештәре менән көрәштең бер генә тәьҫирле юлы бар: ғәйеплеләрҙе матди яуаплылыҡҡа тарттырыу, йәғни суд ҡарары аша тирә-яҡ мөхитте бысратыусы предприятиеның эшен туҡтатыу йә штраф түләтеү.

**Шулай итеп, махсус әҙерләнеп, алдан килешелмәһә лә, ғалимдың һәр саҡ әйтер һүҙе, дәлилдәре бар, сөнки ул ғилми күҙлектән генә түгел, ә ошо ерҙә йәшәп, беҙ эскән һыуҙы һыулап, беҙ һулаған һауаны һулаған ябай ер кешеһе булараҡ та фекер итә: "Әлеге "кеше аяғы баҫмаған" ер - ул, асылда, күңел түрендә һаҡланған саф, мөғжизәле, әкиәти шишмәләр иле бит. Инде шишмәләребеҙҙе - асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалайыҡ берүк, сығанаҡтар көмөштәй сафлығын юғалтмаҫҡа тейеш, сөнки ҙур йылғалар шишмәнән башлана", - тип тамамланы һүҙен арҙаҡлы ғалим...**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әңгәмәләште.**

ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

**Суфыйсылыҡ тәғлимәте тураһындағы китаптарҙың ниндәйе генә юҡ хәҙер. Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китабында, мәҫәлән, "НӘФСЕ", "ЙӨРӘК", "РУХ" төшөнсәләренә үҙенсәлекле аңлатмалар бирелә. "Нәфсеһен тыя алған кеше донъя менән идара итеүгә өлгәшә, йөрәк ҡушыуы буйынса йәшәгән кешелә нәфсе һәм матди донъя менән ҡыҙыҡһыныу йәшәй әле. Ә инде нәфсеһенә баш була алмағандар йөрәкте һанға һуҡмай, йөрәген тыңлағандар рухын ишетмәй" тиелә китаптың баш һүҙендә.**
**Китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итергә булдыҡ. Һүҙҙе "Нәфсе"нән башлайбыҙ.**

## Нәфсе

Нәфсе кешегә тыумыштан бирелә. Нәфсенең төп билдәһе - кеше, ғәҙәттә, тик үҙе хаҡында ғына ҡайғыртып, оятһыҙ рәүештә үҙенең теләктәрен башҡаларға көсләп таға. Интеллект был осраҡта нәфсенең "аҡыллы ревизоры" вазифаһын башҡара, йәғни нәфсе үҙен ҡәнәғәтләндергән ваҡытта башҡалар һәм йәмәғәтселек өсөн зарары булмаған юлдарҙы һәм ысулдарҙы күрһәтә, өйрәтә. Али ибн Талиб нәфсегә шундай аңлатма биргән: "Нәфсе хаҡында һөйләгәндә мин һарыҡтарын йыя алмаған көтөүсе хәлендәмен. Көтөүсе малдарын нисек кенә итеп бер тирәгә өйөрөргә тырышмаһын, һарыҡтары шул тиклем ситкә тарала".

**Нәфсенең бер нисә сифатын билдәләп үтәйек:**

1. Нәфсе - наҙанлыҡ билдәһе. "Наҙандарҙан ситкә тайпыл. Нәфсе - барыһының араһында иң наҙаны һәм тәнҡитләнә торғаны," тигән Әбү Хәмзә Бағдади.
2. Нәфсе - әшәке ҡылыҡтар һәм насар холоҡтар сығанағы. Нәфсене оҙаҡ ваҡыт һауытта тоноп ултырған һыуға ла тиңләйҙәр. Әгәр ҙә уны болғатһаң, бурьяҡлана һәм насар еҫ сығара башлай.
3. Нәфсе - Аллаһы Тәғәләнең асыу ҡоралы. Нәфсе тәбиғәтендә яуызлыҡ тыуҙырыу халәте бар. Аллаһы Тәғәлә нәфсене кешенең холоҡ сығанағы итеп яралтҡан да, уны төрлө төҫкә әйләндереп торор өсөн Иблесте ҡуйған. "Аллаһы Тәғәләнең асыулы сағын күргән кеше үҙенең нәфсеһенең үҙенә тәьҫирен дә татый", тигән бер аҡыл эйәһе.
4. Нәфсе - янып торған торомбашҡа оҡшаш: ул бер үк ваҡытта матур һәм үҙендә емертеү халәте лә һаҡлай. Янып балҡыуы үҙенә ылыҡтыра, әммә күмере яндыра.
5. Нәфсе - ул һынташ. Уға иғтибар итеү һынташҡа, ботҡа табыныуға тиң.
6. Нәфсе тик ялғанда ғына үҙенә тыныслыҡ таба.
7. Нәфсе кешенең эсендә булған саҡта уға Аллаһы Тәғәлә күренмәй.

**(Дауамы бар).**

***✓ Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ЗИРӘК БУЛ!

■ Зирәклек күрһәткән кеше башҡаларҙың күҙе алдында бик уңышлы кеше булып күренә, ти Квинсленд университеты ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар араһында эрудицияны тикшереүсе һорауҙарға тиҙ яуап биреүселәрҙе шулай баһалағандар. Һөҙөмтәләр аҡыл кәүһәнә, кешенең шәхси сифаттарына бөтөнләй бәйле булмай сыҡҡан. Ғалим Уильям фон Гиппель билдәләүенсә, социаль интеллект - ул белгәнен практикала ҡуллана алған кеше. Бындай кешеләр йыш ҡына лидер булып тора һәм уларҙы тап зирәклеге берләштерә лә инде.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйыҡайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдә 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi -ҙың тәьҫир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, бынын өсөн зур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлыҡта тоторға кәңәш итә.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ экспериментты ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым һәм башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**"Кисә генә йүгереп йөрөй ине…", "Шап-шаҡтай күренә ине…", "Китеп барған ерендә ҡолаған да ҡуйған…" Һуңғы ваҡытта шундай хәбәрҙәрҙе йышыраҡ ишетәбеҙ һәм табиптарҙын: "Бер ерем дә ауыртмай тип йөрөү генә сәләмәтлек билдәһе түгел", - тип тылҡып торғанына ышана башлайбыҙ. Бөгөн донъя буйынса йөрәк-ҡан тамырҙары, яман шеш, шәкәр сире, тын юлы ауырыуҙарынан күпләп үлеүҙәр күҙәтелә. Әммә уларҙы иртә стадияла асыҡлағанда, ғүмер оҙайлығын арттырырға мөмкин. 2013 йылдан тотош Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла халыҡтың айырым төркөмдәрен диспансер тикшереүе ойошторолоуы ла ошо йүнәлештәге аҙымдарҙың береһе. Былтыр республикала халыҡты медицина тикшереүе буйынса күләмле эштәр алып барылды, төрлө яңылыҡтар индерелде. Ошо хаҡта БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының медицина профилактикаһы буйынса штаттан тыш белгесе, медицина фәндәре кандидаты Сара ӘХТӘМОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# НАМЫҪ КЕҮЕК ҮК…

## һаулыҡты ла йәштән һаҡла!



➔ **Рәсәйҙә диспансерлаштырыу индерелгәнгә лә ете йыл үтеп киткән. Уның төп маҡсаты нимәнән ғибәрәт һәм ошо йылдар эсендә ул ниндәй үҙгәрештәр кисерҙе?**

- Диспансер тикшереүе былтырға тиклем өс йылға бер тапҡыр, йәғни йәшең өскә бүленгән йылдарҙа үткәрелде, хәҙер тәртибе бер аҙ үҙгәрҙе. Хәҙер 40 йәште уҙыусылар йыл һайын диспансер тикшереүе үтергә хоҡуҡлы. Диспансеризацияның маҡсаты - хроник инфекция булмаған сирҙәрҙең хәүеф факторҙарын асыҡлау. Әгәр революцияға тиклемге Рәсәй тарихын иҫләһәк, халыҡ йоғошло ауырыуҙарҙан вафат булған. Вакцинация барлыҡҡа килгәс, кеше был сирҙәр менән идара итергә өйрәнде. Әммә бөгөн икенсе күренеш күҙәтелә - йоғошло булмаған хроник сирҙәр (ҡан тамырҙары, ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары (инфаркт, инсульт), тын алыу ағзалары ауырыуҙары, яман шеш, эндокринология (шәкәр сире) күбәйә һәм улар Өфөлә, Башҡортостанда ғына түгел, тотош донъяла халыҡтың инвалидлығының, үлеменең төп сәбәпсеһе булып тора. Хәҙерге заманда йәшәү рәүеше, туҡланыу темпы үҙгәреүе - яҡшы ашайбыҙ, күп ултырабыҙ, аҙ хәрәкәтләнәбеҙ - былар барыһы ла сәләмәтлеккә йоғонто яһай. Шулай уҡ стресс торошоноң да тәьҫире ҙур.

Ошо дүрт сиргә үлем осраҡтарының 76 проценты тура килә. Шуға күрә улар менән көрәш, уларҙы профилактикалау бөгөн көн үҙәгендә тора. Быны диспансеризацияның киң ҡолас менән алып барылыуы, Сәләмәтлек үҙәктәренең асылыуы ла раҫлай. Был саралар ҙың барыһы ла бер маҡсатта эшләй - инфекция булмаған хроник сирҙәрҙе иртә асыҡлау. Йәғни ниндәйҙер этапта ҡанда шәкәр, холестерин артыуын, кешенең аҙ хәрәкәтләнеүен асыҡланыҡ икән, уларға ниндәйҙер күрһәтмәләр биреп, ошо хәүеф факторҙарын бөтәрә алабыҙ һәм кеше теге йәки был сир барлыҡҡа килгәнсе көтөп йөрөмәй, сәләмәтлеген яҡшырта.

➔ **Сәләмәтлек үҙәктәрен телгә алып киттегеҙ. Тимәк, улар ҙа ниндәйҙер кимәлдә диспансерлаштырыу кеүек үк, сәләмәтлекте хәстәрләүҙең бер баҫҡысы булып тора?**

- Был, ысынлап та шулай. Улар 2009 йылда ойошторола башланы, тәүҙә 12 ине, хәҙер республика буйынса 22 үҙәк бар. Уларҙың 9-ы - Өфөлә, ҡалғандары республика ҡалаларында урынлашҡан. Әгәр диспансеризация ваҡытында барыһын да тикшерһәк, Сәләмәтлек үҙәктәренә йәштәрҙе, йәғни хроник сирҙәре булмаған, әммә хәүеф факторы асыҡланған - кем тәмәке тарта, кемдең йәштән шәкәр сире асыҡланған - категорияны саҡырырға тырышабыҙ. Бөгөн магазиндарҙа, кондитер бүлектәрендә кеше күргән ергә "Сәләм, диабет!" тип яҙып ҡуйыр инем, сәбәбе - ниндәй генә тәмтом юҡ уларҙа, барыһын да ашап ҡарағы килә! Өҫтәүенә, йәштәр генә түгел, ололар ҙа газлы шәрбәт һыу эсә. Мин быны бөтөнләй тыйыр инем, сөнки бер стакан татлы һыуҙа шәкәр күләме 5 ҡалаҡҡа тиң. Организмға шундай дозалар биреп, әлбиттә, эске ағзаларға көсөргәнеш тыуҙырабыҙ. Бәләкәйҙән балаларға шәрбәт һыуҙар эсереп, һуңынан уларҙа шәкәр сире ҡайҙан барлыҡҡа килгән, тип аптырайбыҙ. 1-се төр булһа ла, ул тотош организмға йоғонто яһай - ашҡаҙан аҫты биҙе лә, күҙҙәр ҙә, аяҡтар ҙа, тамырҙар ҙа зыян күрә.

Сәләмәтлек үҙәктәре, нигеҙҙә, халыҡтың үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлы булырға, уны ҡәҙерләргә өйрәтә: нисек сәләмәт тормош алып барырға, нисек туҡланырға, нисек хәрәкәтләнергә, хәүефле факторҙар асыҡланғанда нисек йәшәргә. Һәм беҙ һәр кем үҙ вазифаһында халыҡҡа иң мөһим ҡағиҙәне аңлатабыҙ: сәләмәтлеге өсөн һәр кем үҙе яуаплы. Әммә бөгөнгө йәмғиәттә быны аңлау юҡ, бөтөн яуаплылыҡты табип елкәһенә ауҙарырға тырышабыҙ. Табип кешегә кисәкен хәл-тороштан сығырға ғына ярҙам итә, ул һеҙҙең өсөн йәшәмәй, һеҙҙең өсөн ашай, эсә, хәрәкәт итә алмай.

Бынан тыш, медицина учреждениеларында сәләмәтлек мәктәптәре эшләй. Унда йөрөүсе сирле табиптың ҡушҡанын еренә еткереп үтәһә, сәләмәтлеге яҡшырасаҡ. Хатта шундай осраҡ булды: гормондар ярҙамында ғына йәшәгән сирле - ҡурылдай астмаһы - һуңынан гормондарҙан баш тартты, сөнки хәле яҡшырҙы. Быныҡ менән нимә әйтергә теләйем: кеше сәләмәт булырға теләһә - сәләмәт буласаҡ! Әммә тормош рәүешен үҙгәртеү еңел түгел: кешегә үҙе өйрәнгән мөхиттән - уңайлылыҡ зонаһынан сығырға кәрәк. Шул саҡта ғына үҙенә ярҙам итә аласаҡ. Мәҫәлән, беҙ көнөнә 10 мең аҙым һһарға - 7-10 саҡрым үтергә тейешбеҙ. Әммә быныҡ өсөн ваҡыт таба алмайбыҙ, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанабыҙ. Һәр хәлдә, һаулығыбыҙ 50 процентта үҙебеҙ алып барған тормош рәүешенә бәйле икәнен онотмау кәрәк.

➔ **Эш биреүсе эшләп йөрөгән кешегә диспансеризация үтеү өсөн бер көн бирергә бурыслы, ахыры, шулаймы?**

- Эшләп йөрөгән кешеләр эштән китә алмау сәбәпле, диспансеризация үтеүгә илке-һалҡы ҡарай ине. Шуны уйлап, барлыҡ медицина ойошмалары шәмбе көндө лә диспансеризация үтеүҙе ойоштороҙо. Йәғни һәр дауалау учреждениеһында кемдер шәмбе сығып эшләй. Үҙ һаулығына битараф булмағандар шәмбе сығып, башҡа көндәр менән сағыштырғанда ҡыҫҡараҡ ваҡытта тикшереү үтә ала. Хәҙер, законға ярашлы, эш биреүсе хеҙмәткәрҙең ғаризаһына ярашлы уға өс йылға бер тапҡыр диспансеризация үтеүгә бер көн бирергә тейеш. Был 40 йәште үткәндәргә лә ҡағыла. Шулай уҡ пенсия алды йәшендәгеләр, пенсионерҙар йыл һайын тикшерелеп тора ала.

➔ **Былтыр республика буйынса күпме кеше диспансеризация үтте һәм ниндәй сирҙәр асыҡланды?**

- 2019 йылда 764740 кешене ҡарау планлаштырылһа, беренсе этапта 765763 кеше (100,1 процент) тикшереү үтте. Өлкәндәр араһында айырым төркөмдәрҙе диспансер тикшереү барышында 78509 граждандә беренсе тапҡыр сир табылды. Улар араһында ҡан әйләнеше системаһы сирҙәре - 21519 осраҡ, икенсе урында - эндокрин системаһы сирҙәре тора (15256), өсөнсө урында - нервылар системаһы сирҙәре (6856). Социаль әһәмиәтле сирҙәр араһында беренсе тапҡыр 18 осраҡта - туберкулез, 593 - яман шеш, 1496 - шәкәр сире, 12750 - юғары ҡан баҫымы, 1757 - йөрәктең ишемик ауырыуы асыҡланды. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса беренсе тапҡыр теге йәки был сире асыҡланған категорияныан 56203 кешегә диспансер тикшереүе, 224563 кешегә дауаланыу билдәләнде, өҫтәмә тикшереүгә 25120 кеше йүнәлтмә алды, 26111 кеше шифахана-курорт дауаланыуына ебәрелде, 675 кешегә юғары технологиялы медицина ярҙамы талап ителде.

➔ **Ә бына ауыл халҡы менән ҡала халҡы араһында диспансеризация үтеү айырмаһы бармы? Йәғни ҡалала мөмкинлектәр күберәк, ә ауыл халҡы үҙенә ҡул һелтәп ҡуймағанмы?**

- Районлар халҡы тәүге этапты фельдшер-акушер пунктарҙа үтә, йәғни ауырлығын, буйын, тән ауырлығы индексын билдәләйҙәр. Былтыр был эштә күсмә фельдшер-акушер пункттары нығ ярҙам итте. Улар республика Башлығы Радий Хәбировтың күрһәтмәһе буйынса апрель-октябрь айҙарында биш йүнәлеш буйынса эшләнә һәм барлыҡ райондарҙы ла, төпкөл ауылдарҙы ла йөрөп сыҡты. Улар күсмә флюорография, маммография, Сәләмәтлек үҙәге менән йыһазландырылды. Ҡайҙалыр Республика клиник дауаханаһы, ҡайҙалыр Кардиоүҙәк модуле ҡушылды. Кем диспансеризация үтмәгән, ошо тикшереүҙәрҙән һуң улар диспансеризация үтеүселәр иҫәбенә индерелде. Әлбиттә, бик күп ауырыуҙар асыҡланды, халыҡ үҙе ҡәнәғәт ҡалды. Артабан бындай эш даими алып барыласаҡ. Быйыл майҙан тағы ла күсмә Сәләмәтлек поездары юлға сығасаҡ. Тикшереүҙәр һөҙөмтәһе буйынса халыҡҡа йүнәлтмәләр бирелә.

ШУЛАЙ ИТЕП…

**Медицина өлкәһендә ниндәй генә белгес менән һөйләшмә, улар барыһы ла сәләмәтлек өсөн тәү сиратта кеше үҙе яуаплылыҡ тойорға тейеш икәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Әгәр оло йәштә лә һау-сәләмәт, йәмғиәткә файҙалы булырға, йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашып йөрөргә теләһәң, намыҫ кеүек үк, сәләмәтлегеңде лә йәштән һаҡларға бурыслыһың.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ



## 1-се күренеш

*Әбей менән ике ҡыҙ һандыҡтан ҡомарткылар ҡарай.*

**Нәркәс.** Өләсәй, был нимә ул *(миҙал сығара)*?

**Әбей.** Ҡана әле, ҡана, был бит яугир миҙалы - ҡомарткы! Олатағыҙҙыҡы.

**Наҙгөл.** Ул олатайымдың исеме кем булған?

**Әбей.** Ишкилде булған, балам. Һеҙҙең алтынсы быуын олатайығыҙ Ишкилде Илбаҡтин.

**Нәркәс.** Алтынсы быуын? Ҡарт-ҡарт-ҡарт-ҡарт-ҡартатай! Ә ул ниндәй һуғышта ҡатнашҡан?

**Әбей.** Ватан һуғышында, балалар. 1812 йылда ла бик хәтәр һуғыш сыҡҡан.

**Ике ҡыҙ бергә.** О, 200 йыл үткән!

**Нәркәс.** Ике йөҙ йылда алты быуын алмашына икән? Ике йөҙҙө алтыға бүлһәк, тимәк, утыҙ өс йыл һайын бер быуын алмашына, шулаймы?

**Әбей.** Эйе, боронғо сама менән шулай иҫәпләнә.

**Наҙгөл.** Өләсәй, ә кемдәр менән һуғышҡан ул олатайым?

**Әбей.** Французлар менән.

**Нәркәс.** Ә ни эшләп французлар менән һуғышҡан ул?

**Әбей.** Уларҙың батшаһы Наполеон Рус дәүләтенә һуғыш асҡан. Ә беҙҙең башҡорт яугирҙары рус армияһына ярҙамға барған, дәррәү яуға күтәрелеп, дошманды Парижға хәтле ҡыуып, енеп ҡайтҡандар. Егерме һигеҙ полк менән киткән башҡорттар, менәрләгән ир-егет үҙенең атына менеп, үҙенең ашарын, кейемен, ҡоралын алып һуғышҡа киткән. Күптәре һәләк булған.

**Наҙгөл.** Өләсәй.

**Әбей.** Әү, балам.

**Наҙгөл.** Олатайым беҙҙең ауылдан бер үҙе генә киткәнме һуғышҡа?

**Әбей.** Юҡ, улар өсәү булған, бәлки, күберәк тә булғандарҙыр, ләкин башҡа яугирҙарҙың исемдәре оноторған, улар хаҡында бер документ та ҡалмаған.

**Наҙгөл.** Йәл, исемдәрен, батырлыҡтарын кем хәтерләй хәҙер?

**Нәркәс.** Уларҙың өсәүһе билдәле, тинең, өләсәй, улары кем һуң?

**Әбей.** Ишкилде олатайығыҙ Илбаҡтинды әйттем бит инде, икенсеһе Ишкенә олатай Илекәйев һәм өсөнсө яугир Арыҫланғужа олатай Илтенбаев булған. Ауыл халҡы уларҙы ҙурлап, Ашҡаҙар туғайында һабантуй яһап яуға оҙатҡан.

**Нәркәс.** Һабантуй яһап яуға оҙатҡан?

**Әбей.** Эйе, яҙғы һабантуйҙа хөрмәтләгәндәр. Һеҙ ҙә шуны ҡабатлап уйнап ҡарағыҙ, тиҙерәк аңларһығыҙ. Йолалар үҙгәрмәй бит.

## 2-се күренеш

*Һабантуйға бәйге йыйыу. Һабантуй күренеше.*

**Айнур.** Һабантуйға иғәнә-бәйге йыйабыҙ, ил һаҡларға киткән уландарға теләк теләп, бәйге бәйләгеҙ!

**Әбей.** Оҙон юлға сығасаҡ балаларға хәйерле юл теләп, бәйге бәйләйем. *(Әбей бәйге бәйләй. Ярыштар башлана. Музыка).*

*1. Сыбыҡты ат итеп ярышыу (Ҡыҙҙар ярышыусыларҙы дәртләндереп, бүләктәр бирә).*
*2. Йомортҡа һалынған ҡашыҡты тешләп йүгереш.*
*3. Тоҡ кейеп йүгереш.*

**Айнур.** Аттар! Аттар!

**Байрас.** Туҙан туҙҙырып сабып киләләр!

**Айнур.** Ишкилде ағайҙың Турыһы алға сыҡты!

**Ләйсән.** Уҡтай һонолоп елә генә!

**Айнур.** Унан әҙ генә арттараҡ Ишкенә ағай менән Арыҫланғужа ағайҙың аттары башҡа-баш саба!

**Балалар.** Ишкилде ағайҙың Турыһы беренсе! *(Ишкилде килеп инә).*

**Айнур.** Ишкилде ағай, афарин! *(Ҡотлайҙар, бәйге бүләген бирәләр). (Ишкенә менән Арыҫланғужа инәләр.)*

**Балалар.** Һай, афарин, ағайҙар! *(Ҡотлайҙар, бәйге бирәләр).*

**Әбей.** Балалар, азаматтар! Француз батшаһы Наполеон, Рәсәйгә ҡаршы һуғыш асып, рус батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша ғәскәре менән Мәскәүгә кире үҙ ҡулына алыу өсөн ни тиклем һуғышһа ла булдыра алмай икән. Ни эшләйбеҙ, балалар?

**Ишкилде.** Ҡайғырма, инәй. Ат өҫтөндә ҡорҙай уйнаған...

**Бергә.** Башҡорт!

**Ишкенә.** Сабып килһә, елдәй гөжләгән...

**Бергә.** Башҡорт!

**Арыҫланғужа.** Ҡая таштарҙа аҡ кейектәй һикергән...

**Бергә.** Башҡорт!

**Ишкилде.** Шыр урманды өс бүкәндәй һанаған...

**Бергә.** Башҡорт!

**Ишкенә.** Юшанлы сағылдарҙы еҙ йыландай аралаған...

**Бергә.** Башҡорт!

**Арыҫланғужа.** Бүре, айыуҙы ҡуй бәрәндәрҙәй ҡырған...

**Бергә.** Башҡорт!

**Ишкилде.** Саңғыла һыуҙағы балыҡтай йөҙгән...

**Бергә.** Башҡорт тигән халҡың бар!

**Ишкилде.** Бөгөндән бөтә Урал халҡы күтәрелә!

**Әбей.** Һай, ир-азаматтары! Бына был тәңкәләр йәнегеҙҙе һаҡлаһын. Иҫән йөрөп, енеп ҡайтығыҙ! Имен-һау ҡайтығыҙ ҙа, иҫән булһам, тәңкәмде кире бирерһегеҙ.

**Бергә.** Амин, шулай була күрһен.

**Әбей.** Ишкилде улым, үҙең һымаҡ азаматтар хаҡында бер йырлап ебәрәһеңме әллә?

**Ишкилде.** Йырлап ебәрәйем булмаһа, беҙҙең хушлашыу йыры булып та яңғыраһын ("Азамат"ты йырлай).

**Бергә.** Һай, афарин!

**Нәркәс.** Ағайҙар, юлығыҙ аҡтанаҡ, изгенән-изге булһын. Бына, аҡ эсегеҙ! (Һөт эсерәләр).

**Ләйсән.** *(Ишкилде янына килә).*
Атҡайҙарға менеп, беҙҙе ташлап,
Урал ашып яуға киттегеҙ,
Киткән юлығыҙға ҡарай-ҡарай,
Күҙҡайҙарҙы талдырып көтәрбеҙ *(Янсыҡ бүләк итә).*

**Әбей.** Уландар! Аттар әҙер!

**Ишкилде.** Илкәйебеҙ өсөн булырбыҙ шаһит, дошмандарға илде бирмәбеҙ! *(Китәләр, оҙатыусылар" Ерән ҡашҡа"ны йырлай).*
Иҫән генә йөрөп, һау ҡайтығыҙ,
Китһәгеҙ, китһәгеҙ инде лә ҡуҙғалып.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Елдәр тарай ялҡайын,
Эйәрләгән егетеңде
Ташлап ҡайтма, малҡайым,
Эй-й... ташлап ҡайтма, малҡайым.

## 3-сө күренеш

*Ҡыҙҙар йүгерешеп килеп инә, әбей янына барып ултыра.*

**Әбей.** Йә, йүгерешеп ял итеп алдығыҙмы инде?

**Бергә.** Эйе, өләсәй.

**Наҙгөл.** Өләсәй, ә яугирҙар һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡандармы һуң?

**Әбей.** Эйе, өс яугир ҙа 13-сө башҡорт полкында йөрөп һуғыша, дошманды еңеп, Парижды алып, Уралға һау-сәләмәт йөрөп ҡайтҡан.

**Нәркәс.** Кәләш алып, балалар үҫтергәндәрҙер инде.

**Әбей.** Ишкилде олатайҙың өс ҡатыны булған.

**Бергә.** Ө-ө-өс?

**Әбей.** Эйе, ул ваҡытта ир-егеттәргә ике, өс, хатта дүрт ҡатын менән йәшәү рөхсәт ителгән.

**Бергә.** Ҡыҙыҡ икән, ә беҙ быны белмәгәйнек.

**Әбей.** Ишкилде олатай Ильяс, Дәүләтбирҙе, Дәүләтша, Хәкимә, Әбүбәкер тигән балалар тәрбиәләп үҫтергән. Ә Ишкенә олатайҙың өс ҡатыны, өс ҡыҙы һәм өс улы булған. Улдары Ҡотләхмәт, Ҡотломөхәмәт, Баймөхәмәт исемле булғандар.

**Наҙгөл.** Ә Арыҫланғужа олатайҙың ҡатындары нисәү булған?

**Әбей.** Арыҫланғужа олатай Йәнбикә исемле ҡатыны менән 4 ҡыҙ һәм 3 ул тәрбиәләп үҫтергән.

**Нәркәс.** Ошолайтып, миҙалды күкрәктәренә тағып, ғорур баҫып ҡайтып инделәрме икән? (Миҙалды ҡулына алып, түшенә ҡуйып ҡарай).

**Әбей.** Эй-й, афариндар! Барыһын да белгеләре килә бит ошоларҙың. Үткәндәрҙе белергә теләүегеҙ яҡшы, балалар! Киләсәккә үткәндәр нигеҙ һала. Тарихты өйрәнергә кәрәк. Ә беҙҙең яугирҙарға килгәндә инде, Парижғаса барып етеп, Париж урамдарын дер һелкетеп, ҡурай уйнап, бейеп, йырлап, икешәр көмөш миҙалдарын сыңлатып, ғорур баҫып ҡайтып төшәләр.

*(Ишкилде, Ишкенә, Арыҫланғужа "Любизар" йырын йырлап сығалар).*
Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда
Алдан сыҡты данибыҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис.
*(Ишкилде ҡурайҙа уйнай).*

**Ишкилде.** Һай-й, үҙебеҙҙең тыуған яҡтар! Әйҙәгеҙ әле, егеттәр!

*(Ролдәрҙә башҡарыусылар сығып, һуңғы куплетты бергә йырлайҙар).*
Мәскәүгә лә керҙек беҙ,
Парижды ла күрҙек беҙ.
Французҙарҙы еңгәндә,
Ер емертеп йөрөнөк беҙ.

**Тәскирә ҒӘЛИНА.**
**Федоровка районы**
**Яңы Яуыш ауылы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 13-сө идея: Аң ҡоралдары

Һинең газоныңды маникюр ҡайсыһы менән ҡырҡырға йәки консерва банкаһын ҡәләм ослай торған бысаҡ менән асырға маташҡаның бармы? Әлбиттә, юҡ. Өйҙә һин үҙең тапҡан һәм һатып ала алған иң ҡулайлы ҡоралдар менән эш итәһең.

Ләкин тормоштоң үҙенә килгәндә, нисек һуң? Һин үҙ тормошонда ниндәй ҡоралдар менән файҙаланаһың? Ә бит беҙҙең һәр уйыбыҙ, һәр һүҙебеҙ һәм ғәмәлебеҙ физик торошобоҙға, ниндәй даирәне һайлауыбыҙға һәм үҙебеҙ аралашҡан кешеләргә йоғонто яһай. Әгәр шуның һөҙөмтәһендә беҙ берәй төрлө язаға дусар ителгәнбеҙ икән, тимәк, беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ (бәлки, үҙебеҙ ҙә аңғармаҫтандыр) шуға килтергәнбеҙ.

Беҙҙең һәр беребеҙҙә ижад итеү өсөн мөһабәт механизм бар. Һин уны уй-хыялдарыңдың алтын һарайы тип атай алаһың. Унда ижад итеү өсөн беҙ файҙаланған материал тупланған. Үҙ уйҙарыбыҙҙы ҡорғанда файҙаланған ҡорал - ул уйлау көсө, йәки беҙ уны, ғәҙәттә, хыял тип атайбыҙ.

Был уйлау көсө, Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән ҡалған бөтә һәләттәр кеүек, беҙҙең ҡуәтеү һәм идара итеү аҫтында. Ҡайһы берҙә, образдарҙы ижад итеүсебеҙ, фаразыбыҙ беҙҙе яуыз шаярта, теләгебеҙгә ҡаршы эштәр ҡылдыра кеүек тойола.

Ләкин ҡағиҙә физик камиллашыуҙың һәм эштәге уңыштарҙың һәр ваҡыт күҙ алдыбыҙға килтергән образға тап килеүенә ҡайтып ҡала. Ҡайһы, сирҙәр һәм фәҡирлек - беҙҙең уйҙар механизмыбыҙҙа нимәләр боҙолоуыньң билдәһе. Фәҡирлек һәм сирҙәр тураһындағы фараздарға, аңыбыҙҙа ҡалыуға юл ҡуйыу менән беҙ үҙ фәҡирлегебеҙ йәки сиребеҙ образдарын тәҙәйбеҙ.

Теләһә ҡайһы насар уй менән көрәшеү өсөн иң яҡшы, иң ҡулай ваҡыт - уның аңыбыҙҙа барлыҡҡа килгән мәле. Был мәл - дошмандың иң көсһөҙ сағы. Әммә уй барлыҡҡа килгәс, уға ҡаршы көрәшкәнсе, уның, ғөмүмән, аңға үтеп инеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Фекерҙәрҙең уяу һаҡсыһы, уйлау көсөнөң бер туҡтауһыҙ күҙәтеүсеһе уй-хыялдарҙың алтын һарайына тик ижади характерҙағы фекерҙәрҙе генә үткәрергә тейеш.

Үҙ уйҙарыңа аңлы контроль алып барыу өҫтөндә күнекмә яһау үтә мөһим. Һәр уйҙың тормошобоҙҙа һәм эштәребеҙҙә сағылған бөтә нәмәгә ҡағылышы бар. Ғәмәлдәге шарттарҙы һәм хәлде үҙгәртеүҙең берҙән-бер ысулы - күнегелгән уйҙар тәртибен үҙгәртеү. Уйлаған саҡта беҙ үҙебеҙгә ҙур яуаплылыҡ алабыҙ. Беҙ уйҙарыбыҙҙың һәм фекерҙәребеҙҙең үҙебеҙ йәшәгән донъяға ижади йәки емергес тәьҫир итергә һәләтле булыуы хаҡында һәр ваҡыт иҫтә тоторға тейешбеҙ.

Һин даими рәүештә: "Мин булдыра алмайым, мин ауырыйым, мин бик ярлымын, мин нык арыным", - тип ҡабатлайһыңмы? Тимәк, һин хаҡлы рәүештә үҙеңә тейешле көсөңдө, сәләмәтлегеңде һәм сәскә атыуыңды кире ҡағаһың. Көнсөл, яуыз, ике йөҙлө, тәкәббер һәм күнелһеҙ уйҙар тәнеңде уларға төрлө ауырыуҙар менән яуап бирергә мәжбүр итә. Уй-хыялдар ҡоралын аҡыллы файҙалан һәм үҙеңә: "Минең барыһы ла яҡшы, аҡсам етерлек, көсөм-дәртем сикһеҙ, бөтә кешеләр һәм үҙ-үҙем менән килешеп эш итәм", тип әйт. Шулай итеп һин сәләмәтлеккә, бәхеткә һәм сәскә атыуға юл асаһың. Әгәр һин асыҡ һәм яҡшы күңелле кеше икәнһең, бөтә ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар менән намыҫлы, ягымлы мөғәмәлә итәһең икән, бик тиҙҙән үҙеңдең изгелек батшалығында тороуыңды асыҡларһың. Тормош һинә барыһын да йөҙләтә ҡайтарыр.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## БСТ
### 23 МАРТ
### ДҮШӘМБЕ

7.00 Профилактика.
14.00 Итоги недели (на рус. яз.).
14.45, 21.15 Специальный репортаж. [12+]
15.00, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Сируси". [12+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Спортивные истории. [12+]
23.00 История одного села. [12+]
23.15 Теге өсәү. [12+]
23.45 Күстәнәс. [12+]
0.15 Х/ф "Сель". [12+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Ҡараһол". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 24 МАРТ
### ШИШӘМБЕ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.30 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак барс" (Казань). 1/2 финала восточной конференции. 4 матч.
22.00 По сути дела... [12+]
23.00 История одного села. [12+]
23.15 Земляки. [12+]
23.30 "ВасСәләм!" [16+]
0.00 Х/ф "Личный номер". [12+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]
4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]
5.00 "Наука 102". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 25 МАРТ
### ШАРШАМБЫ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]
11.15 По сути дела... [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Спортивные истории. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 История одного села. [12+]
23.15 Колесо времени. [12+]
0.15 Х/ф "Странник". [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 26 МАРТ
### КЕСАҘНА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Отчет Правительства РБ о проделанной работе за 2019 год.
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00 Яңылыҡтар.
13.30 "Бәхетнамә".
14.30, 23.45 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 "Автограф". [12+]
17.15, 18.00 Учим башкирский язык. [0+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
21.00 "Времечко".
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 История одного села. [12+]
23.15 Автограф. [12+]
0.00 Х/ф "Дом солнца". [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]
4.30 Д/ф "Дочь своего народа". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 27 МАРТ
### ЙОМА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Т/с "Сируси". [12+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]
13.00 Яңылыҡтар.
13.30 Үткән ғүмер. [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30, 5.30 Автограф. [12+]
17.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 "Бал маленьких принцесс". [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]
22.00 "ВасСәләм!" [16+]
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 Уфа. Живое. [12+]
0.15 Х/ф "Живи своей жизнью". [16+]
2.15 Спектакль "Земляки". [12+]
4.00 "Млечный путь". [12+]
5.00 "Бай". [12+]

### 28 МАРТ
### ШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 Надо знать! [6+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград. Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Автограф. [12+]
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Сольный концерт Айгуль Ахметшиной. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Ради добра. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Интервью. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз.).
23.15 Юбилейный концерт народного артиста РБ Азамата Тимерова. [12+]
1.30 Х/ф "Прощаться не будем". [12+]
3.30 Спектакль "Дети мои". [12+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Историческая среда. [12+]

### 29 МАРТ
### ЙӘКШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 Моя вершина. [12+]
9.45 Надо знать! [6+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]
17.00 Автограф. [12+]
17.30 Ҡош юлы. Балалар. [6+]
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Красная кнопка". [16+]
23.45 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.45 Х/ф "Двое во вселенной". [16+]
2.45 Спектакль "Женитьба". [12+]
5.15 История одного села. [12+]

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене*, не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко"**, который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная.*




СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru
ОГРН 1177847333993, *срок эксплуатации 10 лет.

На правах рекламы.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ХАЛЫҠ-АРА ҠУРСАҠ ТЕАТРЫ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 март "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

**27 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+

**28 март "Рөстәмдең сере"** (С. Баженова, Ғ. Ҡотойҙоң "Рөстәм мажаралары" әҫәре буйынса). 12.00 6+

**"Эҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

**29 март "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев) комедия. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 март "Аладдин"** (И. Казакова) мажаралы әкиәт. 16.00 0+

**29 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 март "Большой секрет"** (А. Рахманкулова) 12.00 0+

**25 март "Слоненок"** (Р. Киплинг) 12.00 0+

**26-27 март Премьера! "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди) 12.00, 14.00, 16.00 0+

**28 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 12.00, 14.00 0+

**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди) 16.00 0+

**29 март "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 12.00, 14.00 0+

**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди) 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 март "О, театр!"** Т. Сәйфуллин ис. БР дәүләт академия хор капеллаһы концерты. 6+

**26 март "Халҡым моңо - яҙмышым"** БР атҡаҙанған артисы С. Ильясованың юбилей кисәһе. 6+

**28 март Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+

**29 март "Маленький Мук"** (Г. Сиятвинда уҡый), оффлайн-трансляция. 15.00 0+

**10-сы һандағы сканворд яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** Аҡана. Ғарипов. Атнабаев. Ҡармаҡ. Кәрим. Таяҡ. Ырыҡта. Фтор. Дарыухана. Урҙа. Лаос. Елкә. Ашатып. Саман. Сафин. Тяни. Аҡыҡ. Әйтем. Ауыл. Алма.

**Вертикаль буйынса:** Көлдөксә. Априоризм. Монумент. Ғата. Ятаған. Бата. Ҡорама. Әсирә. Фал. Йыла. Ваҡыт. Форт. Алоха. Елем. Ҡамыр. Сантим. Ураҙа. Маяҡ. Ҡарағалпаҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (28) дүшәмбе | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |
| 24 (29) шишәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 25 (1) шаршамбы | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 26 (2) кесе йома | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 27 (3) йома | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 28 (4) шәмбе | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |
| 29 (5) йәкшәмбе | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

# УЙҘАР СӘЛӘМӘТЛӘНДЕРӘ

**"Кешенең үҙ уйҙары килтергән ауырлыҡтарҙы унның ҡан дошмандары ла теләмәҫ ине", - тиҙәр Көнсығышта. "Ауырыу менән көрәшкәндә табиптың өс сараһы бар: һүҙ, үҫемлек, бысаҡ", - тиер булған бороңғо билдәле дауалаусы Әбүғәлисина ла. Һүҙ беренсе урында килеүенә иғтибар итегеҙ.**

Париждағы бер госпиталдә йәш психолог Эмили Кьи баш табип ҡушыуына һылтанып, ауырыуҙарға көн дә бер үк һүҙҙәрҙе ҡысҡырып, йә күңелдән генә 10 тапҡыр ҡабатларға ҡуша: "Көндән көн мин үҙемде яҡшыраҡ тоям". "Ихластан, ышанып әйтергә кәрәк", тигән талап та ҡуя ул. Һәм бер айҙан был табипҡа килгән ауырыуҙар тураһында бөтә Франция ғәжәпләнеп һөйләй: тап ошо ваҡыт эсендә улар йүнәлә, хатта хирургик ҡатнашлыҡ та талап ителмәй. Бына шулай бороңғо бөйөк ғилем эйәһе Парацельстың ышаныуҙың мөғжизәләр яһауы тураһындағы дәлиле тағы бер тапҡыр раҫлана. Эйе, сәләмәтлегебеҙ беҙҙең уйҙарға туранан-тура бәйләнгән. Бөгөн кешенең физик һәм психик торошо араһында бәйләнештәр барлығын береһе лә инҡар итмәй. "Бөтә ауырыуҙарҙан, инфекцияларҙан иң яҡшы һаҡланыу ысулы - ул сәләмәт булыуыңа ныҡлы ышаныс һәм ыңғай тойғолар. Кире уйҙар кешене бөтөрә. Мәҫәлән, асыуланыу ашҡаҙан-эсәк юлдары ауырыуҙарына сәбәпсе була. Үпкәләү бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе, холецистит ауырыуҙарына килтерә", - ти был турала егерме йылдан артыҡ хеҙмәт стажы булған психотерапевт Андрей Метельский.

Иң мөһим психологик закондарҙың береһе буйынса, яратыу, оҡшатыу, һоҡланыуҙы белдергән һүҙҙәр менән кешенең йәшәү энергияһын көсәйтеп була. Ә яман һәм насар һүҙҙәр, киреһенсә, кәметә. Насар уйҙарға бәйле ауырыуҙарҙың дөйөм һаны арта бара. Уларға ҡаршы тороу өсөн элекке аҡыл эйәләренең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, нисек кенә ауыр булмаһын, тормоштоң йәмен табып йәшәргә тырышырға кәрәк. Сөнки кешенең һаулығы, тормошо һәм яҙмышы тик уның уй-фекерҙәренән генә тора. Яҡшы нәмә тураһында уйлаһаң - яҡшылыҡ көт. Насар уйҙар менән йөрөйһөң икән, шул алдыңа килер. Гел уйлап йөрөгән уй тора-бара ныҡлы фекергә әйләнә. Һәм ошо ышаныс хәл-ваҡиғаға әүерелә. Тап шуның өсөн бөгөндән алып бары тик изге уйҙа булып, яҡшылыҡ килеренә ышанып йәшәй башлағыҙ. Тағы ла, юҡ-бар нәмә өсөн үртәләнмәгеҙ! Был осраҡта йөрәк ауырыуҙарын профилактикалау буйынса белгес - Америка кардиологы Роберт Элиоттың ике төп ҡағиҙәһен һәр ваҡыт хәтерҙә тотоғоҙ. Беренсе ҡағиҙә - ваҡ-төйәк өсөн борсолмағыҙ, икенсеһе - барыһы ла ваҡ-төйәк булыуын белегеҙ!

✓ **Бөтөшө яман ҡамышты һыу эсендә үрт алыр; йөрөшө яман егетте ил эсендә яу алыр.**

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ҮҘ КӨСӨҢӘ ЫШАН!

**"Рәсәй-1" телеканалында барған билдәле "Ну-ка, все вместе!" тигән шоуҙың икенсе сезонында башҡорт ҡыҙы Азалия Ғәйнетдинова абруйлы 100 жюри алдында сығыш яһап, 99 тауыш менән финалға үткәйне. Уның менән был конкурс тураһында әңгәмәләштек.**



**Хәҙерге көндә халыҡ араһынан таланттарҙы эҙләүгә ҡоролған вокаль конкурстар бихисап. Ни өсөн тап "Ну-ка, все вместе!" шоуын һайланығыҙ?**

- Ғөмүмән алғанда, мин ниндәйҙер конкурстарҙа, ярыштарҙа бик ҡатнашып бармайым. Оялсан булыуым, сәхнәгә сығып баҫһам, тулҡынланыуым, күп кеше алдында баҙап ҡалыуым ҡамасаулай. Шуға ла әсәйем үҙе лә музыкант булараҡ мине бәләкәйҙән фортепьяноға ҡушылып йырларға өйрәтеп, 6 йәштән үҙебеҙҙең Салауат ҡалаһындағы вокал студияһына алып барһа ла, конкурстарҙа һирәк ҡатнаша торғайным. Мәктәп йылдарында Салауат ҡалаһында уҙғарылған "Көмөш ҡыл" конкурсында, Өфөлә үткәрелгән 2014 йылғы "Йондоҙло академия" һәм 2015 йылғы "Өфө тулҡыны" конкурстарында ҡатнашыуымды һәм гран-при, юғары баһалар алыуымды ғына атап үтә алам. "Ну-ка, все вместе!" кеүек масштаблы, Рәсәй кимәлендәге ярыштарға сығырға йөрьәт иткәнем юҡ ине. Әммә был шоу уҙғарыласағы тураһында иғланды күргәс, ҡыйыуһыҙлығымды еңергә тәүге аҙым булыр, тигән уй килде. Сөнки был сараның форматы башҡаларҙан бик айырыла, һине 4-5 баһалама ағзаһы тыңлауы - бер, ә йөҙ кеше бер юлы талантыңды таныуы - бөтөнләй икенсе нәмә. Барыһы ла шулай уңышлы тура килде һәм мин конкурсҡа ғариза ебәрҙем. Ике ай самаһы үткәндер, был турала онота ла башлаған мәлдә, шоу төшөрөлә башларҙан бер нисә аҙна алдан шылтыратып, репетицияға килергә ҡуштылар. Шуға ныҡлы әҙерлек булманы, кастинг үткәреүселәр һайлаған йырҙы тиҙ генә өйрәнеп, 2-3 репетициянан һуң тапшырыуҙа төшөп тә ҡуйҙым.

Тәьҫораттар тураһында һөйләгәндә, был шоуҙы ғүмерҙә лә онотмаҫмын, һәр ваҡыт иҫләп һөйләрмен кеүек. Ундағы йөҙ иң шәп йырсылар, композиторҙар, сәнғәт әһелдәре мин йырлағанда аяғүрә тороп баҫыуы, талантымды таныуы һәм йылы һүҙҙәр әйтеүе күңелемде осондороп ебәрҙе, үҙ көсөмә ышанысым артты. Сергей Лазарев, Николай Басков, Юлия Савичева кеүек танылған йондоҙҙар әйткән һүҙҙәр, улар биргән кәңәштәр өсөн генә лә был сарала ҡатнашырға була. Яҡшыраҡ булдыра алам икән, тигән инаныу барлыҡҡа килде күңелемдә. Хәҙер инде тик яңы үрҙәр яуларға, алға барырға кәрәк.

**Сығышығыҙҙан һуң махсус музыкаль белемегеҙ юҡ, тип яуап биргәйнегеҙ. Әлеге көндә ни менән шөғөлләнәгеҙ?**

- Йыр-моңға ғашиҡ кеше булараҡ, күңелем менән сәхнәгә тартылып торһам да, махсус музыкаль белем алып, ошо юлды һайларға ҡыйманым. Етди бизнес-леди булырға һәм офиста эшләргә хыялланып, иҡтисад йүнәлешендә юғары белем алдым. Әлбиттә, хәҙер был бөтөнләй "минеке" түгел икәнен аңланым, ижад менән шөғөлләнергә кәрәк булыуына төшөндөм. Шуға З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтының эстрада-джаз йыры йүнәлешендә икенсе курста ситтән тороп белем алам, шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙә үҙемдең командамды тупланым һәм музыкаль продюсер менән яңы йырҙар ижад итеү менән мәшғүлмен. Төрлө сараларҙа сығыш яһайым, үҙемдең төркөмөм бар һәм вокал буйынса продюсер эшен дә атҡарам.

**Ниндәй жанрҙа ижад итәһегеҙ?**

- Төрлө йырҙар башҡарырға яратам, әммә күпселек pop, R&B (аренби), бейеү музыкаһы кеүек стилдәрҙе һайлайым. Элек талғын йырҙар башҡарырға ятатһам, хәҙер күңелле, дәртле йырҙарға өҫтөнлөк бирәм. Музыка кешене ҡыуандырырға, дәртләндерергә, позитивҡа көйләргә һәләтле тип иҫәпләйем һәм шуға ынтылам да. Әлегә рус һәм инглиз телдәрендә йырлайым, һирәк кенә булһа ла башҡортса йырҙарҙы ла башҡарам. Киләсәктә, бәлки, башҡортса йырҙар ҙа ижад итермен. Сөнки шоуҙа ҡатнашҡандан һуң тыуған республикамдан бик күптәр ыңғай баһа биреп яҙҙы, һаман да күтәрмәләп торалар. Шуға ла минең Ватаным - Башҡортостанда иң тоғро тыңлаусыларым, ижадымды үҙ итеүселәр йәшәй, тип уйлайым.

**Мәскәү сәхнәһен яулауы еңел түгел. Уңыш серегеҙ менән дә бүлешмәҫһегеҙме?**

- Эйе, Мәскәүҙә киң публикаға сығыуы, үҙең тураһында белдереүе ауыр. Йырсылар бик күп, араларында йырлай белгәне лә, белмәгәне лә бар, әммә конкуренция көслө. Күп нәмә танышлыҡ аша эшләнә, танышлығы һәм аҡсаһы булмаған, үҙаллы ижад итеүсегә ниндәйҙер уңыш ҡаҙаныуы еңел түгел. Мин был мәктәпте яңы ғына үтә башланым, тиһәң дә була. Ниндәйҙер оло ҡаҙаныштар тураһында һөйләүе иртәрәк, әммә ошо юлдан барыу өсөн күп тырышлыҡ һалам, эшләйем. "Ну-ка, все вместе!" шоуы ла артабан үҫешергә дәрт бирҙе, шуға бер нәмәнән дә ҡурҡмай, хыялдарҙы тормошҡа ашырыу өсөн тырышлыҡ һалырға, эшкә тотоноп ҡарарға кәрәк. Ғүмер бер генә, башҡаларҙың һүҙенә ҡарамаҫҡа, үҙ эшең менән мәшғүл булып, шуның менән янып йәшәргә, күп эшләргә, аҙ йоҡларға. Ваҡыт шул тиклем тиҙ үтә, өлгөрмәй ҡалыуың бар. Үҙ-үҙеңә ышаныс - хыялдарҙы тормошҡа ашыра алыуҙың төп гарантияһы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер минут эсендә моңо менән 99 кешене әсир иткән Азалия Ғәйнетдинова йондоҙло юлын башлап ҡына тора. Тырыш, алсаҡ һәм талантлы яҡташыбыҙға ижади сәфәрендә тик уңыштар юлдаш булыуын теләйек.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## МИЛЛИ КЕЙЕМЕҢ НИНДӘЙ?



**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы социаль селтәрҙәрҙә башҡорт кейеме флешмобының башланыуын иғлан итте.**

Ҡатнашыу өсөн башҡорт милли кейемендә төшкән фотоһүрәтте #Ҡоролтаймилликейем хештегы менән Фейсбук, Бәйләнештә йәки Инстаграм социаль селтәрҙәренә һалырға кәрәк. Кейем ҡайһы ырыу башҡорттарыныҡы, ҡайһы төбәккә хас биҙәктәр менән биҙәлгән - ошо мәғлүмәтте лә күрһәтеү мотлаҡ.

"Халҡыбыҙҙың күңел йәүһәре - милли кейемебеҙҙе донъяға таныт! Милли кейем - милли төҫ, милли сифатты сағылдырған бер билдә генә түгел, ә халыҡтың оло тарихын, ижади ҡеүәһен күрһәткән дәлил. Һәр төбәктең үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ биҙәктәре бар. Халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын, ата-бабалар ҡомартҡыһын бар донъяға танытайыҡ. Флешмобҡа ҡушылығыҙ!", - тип хәбәр итте проектты ойоштороусылар.

Әйткәндәй, былтыр йыл башынан Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы башҡорт милли кейеме буйынса "Хаталар өҫтөндә эш" акцияһы иғлан иткәйне. Май айында акцияны йомғаҡлау Өфөлә үтәсәк. Ентекләберәк хәбәр итербеҙ, тине ойоштороусылар.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## УЙҘАР КИЛӘ ЛӘ КИТӘ,

### башың урынында ҡалһын

Бөтөшө яман ҡамышты һыу эсендә үрт алыр; йөрөшө яман егетте ил эсендә яу алыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлаусылар бының менән ғорурланырға күнгән.

**(Бертран Рассел).**

Ахмаҡтар ашау һәм эсеү өсөн йәшәй, йүнле кешеләр йәшәү өсөн ашай һәм эсә.

**(Сократ).**

Күңелһеҙ кешеләрҙе тыңлап, өмөтһөҙ әҙәмдәрҙе төҙәтергә тырышып,алтын ваҡытыңды әрәм итмә. Был - ауырыу маҡсаттар һәм алдаҡсыс ынтылыштар.

**(О. Уайльд).**

Власҡа ынтылыу ҡурҡыуҙан килә. Кешеләрҙән ҡурҡмағандар улар өҫтөнән идара итергә ынтылмай.

**(Б. Рассел).**

Нимә ул еңелеү? Ул - мәктәп, ул - тағы ла камилыраҡ бер үргә тәүге аҙым.

**(У. Филлипс).**

Уйыңды тота алмаһаң да, һүҙеңде тот.

**(Славомир Троцкий).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше әле күптән түгел генә һатып алған сит ил машинаһында китеп барғанда юл ситендәге балаларҙы күреп ҡала. Егет улар тәңгәленә еткәс, машинаһын аҡрынайтып, балаларҙы уратыбыраҡ уҙып китергә иткәндә, машинаға таш атылғанын шәйләп ҡала. Машина туҡтап ҡала. Егет тиҙ генә төшөп, малайҙарҙың береһен елкәһенән эләктереп ала. "Ниңә һин минең машинаға таш бәрәһең? - ти ул малайға. - Һин был машинаның күпме торғанын беләһеңме?" "Ғәфү ит мине, ағай, - ти малай. - Мин һеҙҙең машинаға зыян килтерергә теләмәгәйнем. Минең ағайым инвалид, ул коляскаһынан йығылып төштө, уны күтәреп ултыртырға көсөм етмәй. Инде нисәмә сәғәт юлдан уҙған машиналарҙы туҡтатырға итеп, ҡул күтәрәм, барыһы ла уҙа ла китә. Таш бәрмәһәм, һеҙ ҙә уҙып китер инегеҙ". Егеткә малайҙың был ҡылығы шул тиклем ныҡ тәьҫир итә, ул күҙҙәренә йәш төйөлөп, инвалид баланы креслоға ултыртырға ярҙам итә. Шунан машинаһы эргәһенә бара һәм уның ишегендә баяғы таш бәрелеүҙән һуң ҡалған эҙҙе күреп ҡала. Ул был машинаһында күп йылдар йөрөй. Машинаһындағы баяғы эҙҙе буяп ҡуйырға кәрәк, тип тәҡдим итеүҙәренә ҡарамаҫтан, ул быға ризалашмай. Әгәр ҙә кешеләрҙең шыбырҙап әйткәнен ишетмәһәң, һиңә һәр саҡ таш бәрәсәктәр, икәнен хәтерләтеп тора уға был таш эҙе".**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 20 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 228/03